# БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО

## СКАЗКИ, ПРЕДАНИЯ, УСТНЫЕ РАССКАЗЫ, ТВОРЧЕСТВО СЭСЭНОВ

Башкирское книжное издательство * Уфа — 1982

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## ӘКИӘТТӘР, РИУӘЙӘТТӘР, ХӘТИРӘЛӘР, СӘСӘНДӘР ИЖАДЫ

Башҡортостан китап нәшриәте * Өфө — 1982

3 Башҡ
29 ХИ

*Редакция коллегияһы:*
*ЛЕВ БАРАГ, НУР ЗАРИПОВ, КИРӘЙ МӘРГӘН, ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ.*

Төҙөүселәре Н. Т. ЗАРИПОВ менән Ә. М. СӨЛӘЙМӘНОВ.

Яуаплы редакторы
Ғ. Б. ХӨСӘЙЕНОВ

*Редакционная коллегия:*
*ЛЕВ БАРАГ, НУР ЗАРИПОВ, КИРЕЙ МЭРГЭН, ГАЙСА ХУСАЙНОВ.*

Составители Н. Т. ЗАРИПОВ и А. М. СУЛЕЙМАНОВ.

Ответственный редактор
Г. Б. ХУСАЙНОВ.

29 ХИ Башҡорт халыҡ ижады. Совет осоро, икенсе китап. Әкиәттәр. Риүәйәттәр, хәтирәләр. Сәсәндәр ижады. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. — 424 бит.

Б $\frac{70700-139}{М\ 121\ (03)-82}$ 120 — 82 82. 3 Башҡ

## ТӨҘӨҮСЕЛӘРҘӘН

Был китапта совет осоронда ижад ителгән әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр һәм сәсәндәр ижады бирелде. Әкиәттәр һәм сәсәндәр ижады — Нур Зарипов, риүәйәт һәм хәтирәләр Әхмәт Сөләймәнов тарафынан төҙөлдө, инеш мәҡәлә менән аңлатмалар ҙа шул нисбәттә яҙылды.

Китап совет фольклористикаһында ҡабул ителгән фәнни принциптарға нигеҙләнеп төҙөлдө; әҫәрҙәр баҫма сығанаҡтарҙан, фольклор фондтарынан һайлап алынды. Уларҙың күпселеге тәү тапҡыр баҫыла.

Текстар жанрҙары буйынса тематик төркөмдәргә айырылды. Һәр төркөм эсендә хронологик тәртиптә һаҡларға тырышылды. Сәсәндәр ижадын биреүҙә лә ошо принцип күҙ уңында тотолдо.

Аңлатмалар бүлегендә әҫәрҙең паспорты (кемдән, ҡасан, кем яҙып алыуы), ҡулъяҙманың ҡайҙа һаҡланыуы, баҫма сығанағы, варианттары күрһәтелде: айырым мотивтәргә, тарихи шәхестәргә, географик атамаларға, текста номерә һуғылып, иҫкәрмәләр яһалды. Әкиәттәрҙең Аарне-Томпсон каталогы буйынса (ул, ҡыҫҡартып, АТ хәрефтәре менән генә бирелде) сюжет типтары билдәләнде. Сәсәндәргә ҡарата биобиблиографик мәғлүмәттәр ҙә ошонда урынлаштырылды.

Башҡа телдән ингән һүҙҙәр текста йондоҙ менән тамғаланып, китап ахырында алфавит тәртибендә һүҙлек бирелде.

# СОВЕТ ОСОРОНДА ФОЛЬКЛОР ҺӘМ СӘСӘНДӘР ИЖАДЫ

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң халыҡтың ауыҙ-тел ижады тәрән үҙгәрештәр кисерә: аяуһыҙ синфи көрәштә еңеп сыҡкан коммунистик идеология фольклорҙың идея йөкмәткеһен аныҡлай; мәғариф һәм ағартыу эштәренең киң йәйелдерелеүе, шул нигеҙҙә яҙма әҙәбиәттең сәскә атыуы халыҡтың эстетик аңын яңы образдар, яңы художестволы саралар, алымдар, формалар менән байыҡтыра, халыҡ таланттарына яңы мөмкинлектәр аса. Хәҙер улар әүәлгесә яттан һөйләү, импровизациялау менән генә сикләнмәйенсә, йыш ҡына ҡағыҙҡәләмгә тотоналар, әҫәрҙәрен үҙҙәре үк яҙмаға күсерәләр.

Хәҙер фольклорҙың тарихи ерлеге лә башка: акылға һыймаҫ фантастика — яңы ысынбарлыҡ менән, ҡайғы-хәсрәт һәм хыял социалистик тормош тыуҙырған шатлыҡлы кисерештәр, уй-тойғолар, өмөтлө ынтылыштар менән алмашына; халыҡ ижадында быға са булмаған дәрәжәлә реализм, тормошҡа айыҡ ҡараш көсәйә, уның төп һыҙатын һәм үҫер юлын билдәләй.

Ошо ижтимағи шарттар һәм ошо идеологик факторҙар халыҡ ижадына яңы төҫ биреп, уны барған һайын яҙма әҙәбиәткә нығыраҡ яҡынайта. Ҡайһы бер жанрҙа улар хатта үҙ-ара берегеп үк китә. Элек булһа, с ә с ә н аталыр нәфис һүҙ оҫталары — хәҙер талантлы шағирҙәр!.. Ныҡлабыраҡ ҡараһаң, шиғриәт өлкәһендә генә лә түгел ул берегеү, бер сифаттан икенсе сифатка күсеү. Иң боронғо һәм тик фольклор жанры һаналған әкиәттәр ҙә хәҙер — күбеһенсә профессиональ яҙыусылар эше. Мәҫәлән, Жәлил Кейекбаевтың әле лә балалар ҡулынан төшмәгән «Урман әкиәттәре» (1954), Баязит Бикбайҙың «Диңгеҙ һыуы ниңә тоҙло булған?» (1939), Ҡадир Даяндың «Эт нисек хужа тапты» (1932), Фәрит Иҫәнғоловтың «Балҡортостан ҡыҙы Нәзекәйбил» (1962), Йософ Гәрәй, Рәис Ғабдрахманов һ. б. яҙыусыларҙың әкиәттәре ҡәҙимге жанрҙың яңырыуын, әҙәби юнәлеш алыуын күрһәтәләр.



Был хәл фольклорсылар алдына шаҡтай ҡатмарлы мәсьәлә килтереп ҡуя: совет осоронда халыҡ ижадын һәм бигерәк тә сәсәндәр ижадын профессиональ яҙма әҙәбиәттән нисек айырырға? Ниндәй критерийҙәр бында хәл иткес роль уйнай?

Әле лә күптәрҙе бик уйландырған ошо мәсьәләгә ҡарата 50—60-сы йылдарҙа бөтә Союз күләмендә фәнни дискуссиялар булып үтте. Был тәңгәлдә бигерәк тә рус фольклорсылары әүҙемлек күрһәтте: «Русский фольклор» исемендә даими рәүештә сығарыла килгән фәнни серияның IX томын хәҙерге заманда халыҡ ижады проблемаһының ҡайһы бер теоретик һәм методологик мәсьәләләренә бағышлап [1], уның артынса совет фольклоры тураһында топланылған күләмле иңеш мәҡәлә менән «Русский советский фольклор» тигән антология сығарып [2], улар совет фольклористикаһына ҙур өлөш индерҙе. Бындай эштәр башҡорт фольклористикаһында ла эшләнде: 50-се йылдарҙа Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан өс томда әҙерләнеп донъяға сығарылған «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының һуңғы томы [3] һәм ошо уҡ институт ғалимдәренең совет осоронда әҙәбиәт һәм фольклор мәсьәләләренә ҡағылышлы хеҙмәттәренән тоҙолгән йыйынтыҡ [4] — әйтелгәнгә һәйбәт миҫал.

Күтәрелгән мәсьәлә тамам хәл ителеп бөтмәһә лә, күп төрлө материалға таянып, уның һәр яғын иҫәпкә алып уҙғарылған бәхәстәрҙә совет осоронда халыҡ ижадының яңы һыҙаттары асылды: совет фольклорын өйрәнеүҙә, бигерәк тә уның күләмен һәм үҫеш характерен билдәләүҙә, элекке принциптәрҙең ярамауы, сөнки хәҙер халыҡ ижадында бая әйтелгән сәбәптәр арҡаһында индивидуаль башланғыстың көсәйеүе, шуға бәйле рәүештә, әҫәрҙәрҙең ғел генә телдән һөйләп таралыуы, авторының билдәле булмауы, күп варианттылыҡ кеүек боронғо фольклор һыҙаттарының ныҡ кәмеүе, был ҡәҙимге принциптәрҙең хәл иткес роль уйнай алмауы беленде. Элеккеләрҙән бары бер принцип — традициялылыҡ, йәғни билдәле формаларҙа ҡалыплашып, әүәл-әүәлдән үҫтерелә килгән традицияларҙы дауам итеү, боронғо фольклорҙағы һымаҡ, әле лә фольклорҙы фольклор иткән, уны яҙма әҙәбиәттән айырып торған төп һыҙат — хәл иткес критерий тип табылды.

Әммә яңынан һорау тыуа: улай традициялылыҡ һаман көслө булғас, совет осоро фольклорын боронғонан нисек айырырға һуң?

---

[1] Проблемы современного народного творчества. Русский фольклор, IX, «Наука», М. — Л., 1964.

[2] Русский советский фольклор. Антология. Составление и примечания Л. В. Домановского, Н. В. Новикова, Г. Г. Шаповаловой, вступительная статья Л. В. Домановского, под редакцией Н. В. Новикова и Б. Н. Путилова, «Наука», Л., 1967.

[3] Башҡорт халыҡ ижады, 3-сө том, совет осоро. Тоҙоусыһы, редакторы, баш һүҙ һәм аңлатмалар авторы Кирәй Мәргән. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1955.

[4] Башҡорт совет әҙәбиәте һәм халыҡ ижады мәсьәләләре. Ғайса Хөсәйенов менән Салауат Галин редакцияһында. Өфө, 1968.

Быныһы өсөн төп критерий — әҫәрҙең темаһы. Асыҡлабыраҡ әйткәндә, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуңғы тарихи ысынбарлыҡты, социалистик йәмғиәт тыуҙырған яңылыҡтарҙы, мөһим ваҡиғаларҙы, дөйөм кисерештәрҙе сағылдырыу (шулар хаҡында һөйләү, йырлау, бәйеттәр сығарыу һ. б.) совет осоронда бөтә фольклор жанрҙары өсөн дәүер тамғаһы булып тора. Ләкин әкиәт, хәтирә, көләмәс жанрҙары өсөн был ғына етмәй. Сөнки уларҙа элегерәк булған тормош-көнкүреш мөнәсәбәттәре лә сағылырға мөмкин. Йыш ҡына ул шулай була ла. Мәҫәлән, ошо китаптағы тәүге биш әкиәт шундай. Был саҡта инде мәсьәләне әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһе, йәғни сюжетте тәшкил иткән хәл-ваҡиғаларҙың ниндәй идеология күҙлегенән баһаланыуы хәл итә.

Был том фәнни практикала ҡабул ителгән ана шул принцип-критерийҙәргә таянып төҙөлдө.

## 1

Совет осоронда әкиәт жанры башлыса боронғо сюжеттәрҙе социалистик идеология яҡтылығында эшкәртеү, күпмелер яңыртыу юнәлешендә үҫә. Китапҡа ингән бары өс әкиәттең генә («Нужаның үлеме», «Мулла менән «фәрештә» һәм «Илмәт менән Килмәт») яңы сюжетҡа ҡоролоуы, ә ҡалғандарының асылда боронғо сюжет мотивтәренән ойошторолоуы шуны раҫлай.

Был ижади процесте өйрәнеү бөтәһенән элек традиция менән яңылыҡ проблемаһын алға ҡуя, йәғни хәҙерге әкиәттәрҙә традицияның нимәлә һәм яңылыҡтың нимәлә күренеүен, художество йәһәтенән нисек кәүҙәләнеүен асыуҙы талап итә.

Жанр үҙенсәлектәренә ҡарап, совет осоро әкиәттәрен ике төркөмгә айырырға мөмкин: тәүге төркөмдәге әҫәрҙәрҙә батырҙар тураһындағы әкиәттәргә хас традицион героик мотивтәр төп урынды ала; һуңғыһында тормош-көнкүреш әкиәттәрен билдәләгән һыҙаттар, шуға бәйле стиль үҙенсәлектәре асыҡ күренә.

Классификацияла тематик айырма ла ярылып ята: беренсе төркөмдә халыҡтың азатлыҡҡа сығыу юлын эҙләүе һәм аҙаҡҡы сиктә тирандарға ҡаршы бөтәһе бергә берләшеп оло яуға — көрәшкә күтәрелеүе, ҡан ҡойоп, бәхетле иркен тормош яулауы сағыла. Икенсе төркөмдә йә боронғо хәлдәрҙе, дини ҡараш һәм йолаларҙы әкиәтләштереп, көлөп һөйләү («Элекке батша заманында, әрхәрәйҙәр, поптар, кантондар дәүерендә, ярлы Сәлим ваҡиғалары», «Мулла менән «фәрештә» һ. б.), йә элекке менән хәҙергене сағыштырыу («Нужаның үлеме»), йәки социалистик йәмғиәт тыуҙырған яңылыҡтар, атап әйткәндә, колхозлашыуға бәйле яңыса көнкүреш, яңы мөнәсәбәттәр хикәйәләнә.

«Таң атҡанда» әкиәтен персонаждары буйынса хайуандар тураһындағы әкиәт жанрына индерергә мөмкин, әммә «революцион» йөкмәткеһе менән ул беренсе төркөмгә яҡын тора.

Шулай итеп, материалды төркөмләүҙә үк баяғы проблеманың сағылышы күренә: традициялылыҡ — жанр билдәләрендә, ә яңылыҡ — тематик йөкмәткелә, ваҡиғаларҙы баһалауҙа.



Ләкин, әлбиттә, традициялылыҡ — ҡасандыр бер рәүештә ҡатып ҡалған, артабан һис ниндәй үҙгәрешкә бирелмәгән нәмә түгел. Халыҡ ижадында һәр быуын уны үҙ ихтыяждарына яраҡлаштырып ҡуллана, яңы мөмкинлектәрен аса, байыҡтыра. Һөҙөмтәлә традициялылыҡ һәм яңылыҡ йөкмәтке менән форма берҙәмлеген тыуҙырған эске бәйләнешкә инеп, әҫәрҙең сюжет ҡоролошонда, образдар системаһында һәм художество туҡымаһында үҙ-ара тығыҙ үрелеп китә.

Мәҫәлән, «Ирекбай» әкиәте сюжет төйөнө буйынса халыҡ-ара әкиәт сюжеттәрен туплаған каталогтарҙа «Тиҙ сапҡын» («Скорый гонец») тип аталған сюжет тибын (АТ 665) хәтерләтә. Был типҡа ҡараған боронғо әкиәттәрҙә, шул иҫәптән «Таҙ батыр» тигән башҡорт әкиәтендә [1], батша, үҙ ғәскәрен йыйып, күрше батшалыҡҡа яуға сыға, герой (әкиәт батыры) уға өйҙә онотолоп ҡалған ҡылысын килтереп бирә һ. б. Хәҙерге әкиәттә иһә Ирекбай Ҡыҫҡысхан фарманына буйһонмай ғына түгел, киреһенсә, уның үҙенә ҡаршы һуғыш аса. Шулай итеп, традицион сюжет синфи конфликт характерендә төйөнләнеп, баштан уҡ бөтөнләй икенсе көрәш — социаль көрәш төҫөн ала.

Юлда Ирекбайға Саптаретдин, Уғатар, Ҡулйөтар ҡушыла. Былар — асылда «Мөғжизәле батырҙар» («Чудесные искусники») тип аталған сюжет тибы (АТ 513 А) геройҙары. Элекке әкиәттәрҙә улар үҙенә кәләш юллаусы геройға ҡыҙ атаһы батшаның ауыр шарттарын үтәүҙә ярҙам күрһәтәләр [2]. Ә «Ирекбай» әкиәтендә был батырҙарҙың традицион функцияһы сюжет төйөнөндә билдәләнгән синфи конфликтте хәл итеүгә буйһондоролған: һәр ҡайһыһы үҙ «профессиялары» буйынса оло ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, бөтәһе бергә яуыз хан ғәскәрен тар-мар итәләр һәм аҙаҡҡы сиктә хандың үҙен дә үлтереп, илгә азатлыҡ яулайҙар.

Героик йөкмәткеһенә һәм шиғри телдә һөйләнеүенә таянып, быға са был әкиәтте «эпик поэма», «ҡобайыр» тип билдәләү һәм унда башҡорт халҡының Алтын Урҙа ханлығына ҡаршы көрәше сағыла тип «раҫлау» осраҡтары йәшәп килде [3].

Бындай фекер менән килешеп булмай. Сөнки, күреп үткәнсебеҙсә, әҫәр традицион сюжет мотивтәре һәм персонаждары менән дә, хикәйәләү стиле буйынса ла һис шикһеҙ батырҙар әкиәте жанрына ҡарай, һәм ул, әлбиттә, Октябрь революцияһынан һуң үҫешкән синфи аң яҡтылығында ижад ителгән. Быны әкиәттең йөкмәткеһе, традицион мотив һәм образдарҙың анық рәүештә синфи мәнфәғәттәргә яраҡлаштырылып алыныуы, төп герой һәм ярҙамсы батырҙарҙың үҙ эштәрен **аңлап** башҡарыуҙары дәлилләй.

---

[1] Башкирские народные сказки. Запись и переводы А. Г. Бессонова. Редакция, введение и примечания профессора Н. К. Дмитриева. Уфа, Башгосиздат, 1941, № 33.

[2] Быны бик матур бер миҫалы — «Буҙансы батыр» әкиәте.— Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр, өсөнсө китап. Өфө, 1978, № 19.

[3] Ҡарағыҙ: Очерки по истории Башкирской АССР, том I, часть первая. Башкирское книжное издательство, Уфа, 1956, с. 51.

Персонаждарҙың исемдәре лә экиәттең яңылығын күрһәтеп тора. Бында ике генә персонаж ҡәҙимге исемдәрендә алынған: Уғатар һәм Күлйотар. Төп герой менән дошман заттың исемдәре — Ирекбай һәм Ҡыҫҡысхан — уларҙың социаль характеренә ҡулай табылған яңы исемдәр. Бер-береһенә ҡаршы ҡуйылған Ирекбай менән Ҡыҫҡысхан — исемдәренә үк символик мәғәнә һалынып, азатлыҡ менән тиранлыкты — ғүмер-ғүмергә ҡаршылаш булған ошо ике социаль антиподты тап экиәтсә уңышлы дөйөмләштергән образдар улар.

Әҫәрҙең формаһы — күп өлөшөндә рифмалаштырылған проза, ирекле шиғри форма, революциянан һуң сәсәндәр ижадында башланған бер тенденцияға, йәғни һәр нәмәне, шул иҫәптән боронғо экиәттәрҙе лә, шиғри телгә күсереп һөйләү тенденцияһына бәйләнгән яңы поэтик күренеш. Рифмалаштырылған проза бигерәк тә Фәррәх Дәүләтшин ижадында киң ҡулланылыш ала, уның үҙенсәлекле ижад йөҙөн билдәләй. «Русса өйрәнгәндә», «Я ничего не понимаю» экиәттәре лә — шуға миҫал. F. Усманов, В. Ҡоломбәтов, С. Исмәғилев, С. Сәғитов экиәттәре иһә шиғри төҙөклөктәре менән сәсәндәр ижадында жанрҙың ысынлап та яңы сифатҡа күсеүен дәлилләй.

Шулай итеп, «Ирекбай» туранан-тура социалистик ысынбарлыкты сағылдырмаһа ла, идея-эстетик йөкмәткеһе һәм формаһы менән совет осорона ҡарай; традицион экиәт персонаждарын яңы функциярла һынландырып, халыҡтың азатлыкка сығыу юлын сағылдыра. Экиәттең дөйөм тантананы аңлатыусы һөйләм («Бына шунан һуң ғына иркен тормош короллдо») менән осланыуы боронғо экиәттәрҙәгесә хыялды түгел, — тарихи дөрөҫлөктө раҫлай.

Тәүге төркөмдәге башҡа экиәттәрҙә лә асылда шул ук тарихи тема — халыҡтың азат тормош яулауы башлыса традицион образдар ярҙамында күрһәтелә. Быларҙың күбеһендә тарихи конкретлелеккә ынтылыу асығыраҡ һиҙелә. Реалистик һыҙаттар бөтәһенән элек геройҙарҙың социаль сығышында, эш-ҡылыктарында һәм хәл-ваҡиғаларҙың билдәле тарихи ерлектә үҫтерелеүендә күренә.

Әйтәйек, батырҙар тураһындағы боронғо экиәттәрҙә герой йыш ҡына мөғжизәле рәүештә тыуа һәм ғәҙәттән тыш балалыҡ дәүерен уткәрә. Хәҙерге экиәттәрҙә эпик балалыҡтың ҡайһы бер һыҙаттары (мәҫәлән, ай үҫәһен көн үҫеү, йыл үҫәһен ай үҫеү) Ирекбайҙа ғына теркәлгән. Ә ҡалған экиәттәрҙә улар — ғүмер буйы ярлы йәшәгән әбей менән бабайҙың өс улы («Йәләл бабайҙың бәхет табыуы», «Өс батыр экиәте»), йә, етем үҫеп, байҙа ялсылыкта торған егет менән ҡыҙ («Елбиҙәк менән Илгиҙәр»).

Әлбиттә, ағай-энеле геройҙар боронғо экиәттәрҙә лә күп осрай. Уларҙа ағайҙар, ғәҙәттә, кесе улға ҡаршы ҡуйыла, ғаиләлә йыш ҡына йәберләнеп үҫкән кинйә идеаллаштырып һүрәтләнә. Батырҙар тураһында совет осоронда ижад ителгән экиәттәрҙә ағай-энеләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу юҡ. Киреһенсә, уларҙың һәр ҡайһыһының тормош юлы билдәле бер тарихи-социаль үҫеш юнәлешендә хикәйәләнә. «Өс батыр экиәте»ндә, мәҫәлән, оло улдың — урманда, уртансыһының — тауҙа, кесеһенең яланда бәхет эҙләүҙәре билдәле социаль ҡатламдарҙың тарихи юлын кәүҙәләндерә. Геройҙар юлының Себер урмандары, Кавказ тауҙары һәм Украина яландары аша үтеп, Мәскәү ҡалаһында бергә ҡушылыуы, был образдарға һалынған социаль йөкмәткене географик яҡтан да аныҡлап, тарихи дөрөҫлөктө арттыра.



«Йәләл бабайҙың бәхет табыуы» тигән әҫәрҙә ике оло улдың фажиғәле яҙмышы боронғо экиәттәрҙә уңышһыҙлыҡҡа осраған ағаларҙы хәтерләтә [1]. Ләкин бында ла мәсьәләне яңыса тәкрарлау һиҙелә: әгәр элекке экиәттәрҙә оло ағайҙарҙың күңелһеҙ яҙмышы, ҡағиҙә рәүешендә, уларҙың эшһеҙлеге, ҡомһоҙлоғо һәм шуға нигеҙләнгән хыянатсыллығы менән аңлатылһа, хәҙерге экиәттәрҙә олкән улдарҙың һәләкәте уларҙың йә оҫтон костәргә ҡаршы тора алмауҙарына, йә түҙемһеҙлектәренә бәйләнгән. «Йәләл бабайҙың бәхет табыуы» экиәтендә оло улдың — тау эйәһенән (мифик зат), уртансыһының — һуғышта үлтерелеүен һүрәтләп, экиәтсе быны менән элгәргерәк быуындар фажиғәһенең социаль сәбәптәренә (уларҙың ирекһеҙлегенә) аныҡ ишара яһай.

Батырҙар тураһында хәҙерге экиәттәрҙең социаль һәм шуға бәйләнешле идея йөкмәткеһен аныҡлауҙа геройҙарға аҡыл өйрәтеүсе ҡарт (йәки «батыр», «ғәҙел кеше») образы ҙур әһәмиәткә эйә. Асылда был — шулай уҡ традицион образ һәм күп осраҡта традицион формала алға баҫтырыла: йә юлда тап була, йә геройҙарҙың төшөнә инә. Әммә бөтә хикмәт — ул биргән аҡылда. Был осраҡта хәҙерге экиәтселәр, гүйә, уҙ-ара һүҙ беркетеп, берҙәм эш итәләр; бәхет табыу өсөн бөтә халыҡты йыйып, яуыздарға ҡаршы яуға күтәреү кәрәклеген әйткән, дөрөҫ юл күрһәткән бабай — Ленин булған ул, тип раҫлайҙар.

Экиәттәргә апа шулай азатлыҡ өсөн синфи көрәш мотиве һәм шуға бәйләнешле рәүештә даһи юлбашсы һәм, «Өс батыр экиәте»ндә асыҡ сағылғанса, халыҡҡа Ленин дөрөҫлөгөн аңлатҡан, иҙелеп йәшәүселәрҙе иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә етәкләгән большевиктәр образы килеп инә. Тап ошо революцион көрәш мотиве совет осоронда экиәтселәр ижадының тарихи асылын, яңы идея-эстетик юнәлешен билдәләй: экиәт геройҙары бабай биргән аҡылға таянып, халыҡты синфи көрәшкә күтәрәләр һәм аяуһыҙ алышта еңеп сығалар.

Әлбиттә, батырҙар тураһындағы боронғо экиәттәр ҙә мәсьәләнең ыңғай хәл ителеүе менән тамамлана. Ләкин хәҙерге экиәттәрҙә принципиаль яңылыҡ бар. Беренсенән, боронғо экиәт батырҙарының еңеүе, илдә ғәҙел, иркен тормош урынлаштырыуҙары — был әле хыял ғына, ә совет осоро экиәттәрендә ул — тарихи ысынбарлыҡ. Икенсенән, элекке экиәт батырҙары еңеүгә үҙҙәре генә ирешһәләр, хәҙер инде улар халыҡты синфи көрәшкә ойоштороусы ҡаһармандар булып, еңеүҙе халыҡ менән бергә яулайҙар. Ә яңғыҙаҡ батырҙарҙың юлы фажиғәле тамамлана. Ошо күҙлектән ҡарағанда, Мөхтәр Сәғитовтың: «Хәҙерге экиәттәрҙең төп геройы булып

[1] Мәҫәлән, ошо күп томлыҡ серияла экиәттәрҙең осонсо китабында баҫылған, «Алтынсуға батыр», «Юлбат», «Ҡыран батыр», «Ҡарабәкәл» һәм «Дарыу эҙләүселәр» тигән экиәттәрҙе ҡарағыҙ.

халыҡ массалары сығыш яһай. Традицион яңғыҙаҡ батыр башҡарырға тейеш эште бөтә халыҡ, коллектив көс башҡарып сыға»[1],— тигән фекерендә дөрөҫлөк бар.

Ошо принципиаль айырмалыҡтарҙы иҫәпкә алып, был типтағы хәҙерге экиәттәрҙе **социалистик революция ҡаһармандары тураһындағы экиәттәр** тип атарға мөмкин.

Күмәк көстөң, берҙәмлектең өҫтөнлөгө «Таң атҡанда» тигән экиәттә бигерәк тә асыҡ күрһәтелә. Бында ҡараңғылыҡтан яфа сиккән бөтә ҡош-ҡортто ҡараңғылыҡтан файҙа күргән ябалаҡтарға, яуыз бүреләргә һәм уларҙың башында торған еҙ тырнаҡлы арыҫландарға ҡаршы оло көрәшкә ойоштороусы Ҡыйыу Ыласын образы — был шулай уҡ социалистик революция ҡаһармандарының тәрән мәғәнәле символик образы тип әйтергә була. Ғ. Усмановтың ошо уҡ типтағы «Ҙур Ыласын» экиәте сәсәндәр ижадында символик образдың тағы ла конкретләшеүен күрһәтә.

Экиәттәрҙә һуңынан Ленин тип танылған аҡыллы бабайҙың (йәки батырҙың) геройҙарға дөрөҫ юл күрһәтеүе, «Елбиҙәк менән Илгиҙәр» экиәтендәге портрете — барыһы ла Ленин характеренә тап килеп, халыҡ ижадында уның сағыу образын һынландыра. Образда Ленингә хеҙмәтсән ҡатламдарҙың тәрән мөхәббәте һәм ышанысы, уны һәр халыҡтың үҙ кешеһе, үҙенең күптән көткән юлбашсыһы тип таныуы, ихлас ҙурлауы, ололауы сағыла.

Тормош-көнкүреш экиәттәренә килһәк, бында бөтәһенән элек темаңың хронологик аныҡлығы, тарихи үҫештең билдәле баҫҡысын яңы ижтимағи аң кимәленән һүрәтләү, йөкмәтке һәм формала юмористик элементтәрҙең ҙур урын алыуы күҙгә ташлана.

Шуныһы характерле: көлкөлө йөкмәткеләре, сюжеттең мажаралығы һәм көтөлмәгәнсә тамамланыуы менән ҡайһы бер әҫәрҙәр (мәҫәлән, «Русса өйрәнгәндә»[2] һәм «Я ничего не понимаю»[3] тип рус-са аталған экиәт) көләмәс жанрына яҡын тора; «Элекке батша заманында, әрхәрәйҙәр, поптар, кантондар дәүерендә, ярлы Сәлим ваҡиғалары»[4] тигән үтә мажаралы хикәйә булмағанды ысынлаштырып һөйләп, риүәйәт һәм хәтирә стиленә күсә; «Мулла менән «фәрештә»лә киреһенсә, булған хәл экиәт традицияларында дөйөмләштерелә, әҫәр дин әһелдәренә, иҫке ҡараштарға тапҡыр пародия, сатирик экиәт төҫөн ала.

«Нужаның үлеме» тип аталған экиәт йөкмәткеһе өс өлөштән тора: беренсеһендә — Октябрь революцияһына тиклемге заманда ҡарттарҙың дөрөҫлөк-ғәҙеллек эҙләүҙәре, икенсеһендә — «илгә килеп сыҡҡан бер ғәҙел кеше»нең кәңәштәрен тыңлап, халыҡтарҙың бергә тупланыуы һәм берҙәм көс менән батшалар, байҙарҙы ҡолатып, илдә яңы тормош ҡороуҙары, өсөнсөһөндә коллектив хужалыҡ бу-

[1] Мөхтәр Сәғитов. Хәҙерге экиәттәрҙең ҡайһы бер үҙенсәлектәре.— Башҡорт совет әҙәбиәте һәм халыҡ ижады мәсьәләләре. Өфө, 1968, 233-сө бит.

[2] СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының ғилми архиве (артабан — Ғилми архив), фонд 3, опись 12 / 202, 59—62-се биттәр.

[3] Шунда уҡ, 63—66-сы биттәр.

[4] Ғилми архив, ф. 3, оп. 10/39, 110—120-се биттәр.



лып берләшкән яңы крәҫтиән тормошоноң муллығы, һәр кем өсөн
тигеҙлеге һүрәтләнә. Бында ҡарттарға аҡыл өйрәтеүсе «ғәҙел кеше»
йөҙәндә шулай уҡ Ленин тәғлимәте сағыла.
«Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» экиәте ғаилә эсен-
дә йәберләнгән кесе ул тураһындағы боронғо сюжетте яңы ҡараш-
тар ерлегендә хикәйәләүе менән ҡыҙыҡлы. Үтә ялҡау һәм ғәмһеҙ
ағайҙарҙың, егәрле һәм тапҡыр ҡустыларынан үс алабыҙ тип, баҡ-
саға көл һибеүҙәре, бының иһә картуф уңышын күтәреүҙә совет
осоронда агрономия фәне пропагандалаған бик кәрәкле сара бу-
лыуы әҫәрҙең яңы идея йөкмәткеһен билдәләй.
«Илмәт менән Килмәт» экиәтендә лә егәрлелек менән ялҡау-
лыҡ комик планда һүрәтләнеп, тема 30-сы йылдарҙа колхоз тор-
мошо материалында хеҙмәткә яңыса ҡараш, яңы мөнәсәбәт күҙле-
генән хәл ителә.
Күренеүенсә, тормош-көнкүреш экиәттәрендә реализм теманың
тарихи ысынбарлыҡтан алыныуы, образдарҙа яңы тормош күренеш-
тәре, кеше характеренең ыңғай һәм кире һыҙаттары дөйөмләште-
реп сағылдырылыуы менән көсәйә. Боронғо экиәттәрҙең беренһендә
лә булмаған дәрәжәлә теманың шундай хронологик аныҡлығы,
тарихи ысынбарлыҡ менән бәйләнеше һәм социалистик идеология,
яңы әхлаҡ принциптәре күҙлегенән яҡтыртылышы — хәҙерге экиәт-
тәрҙең бөтә тәбиғәтен билдәләгән иң оло яңылыҡ ул.
Совет осоронда халыҡ ижадының тарихи реалистик йүнәлеш алы-
уына бәйләнешле рәүештә, экиәт формаһының байтаҡ үҙгәрештәр
кисереүен күрергә мөмкин.
Экиәт — һәр ваҡыт традицион башлам һәм традицион бөтөм
менән ҡаймаланған жанр. Был үҙенсәлек революциянан һуң да үҙ
көсөндә ҡала. Әммә бында ла, бигерәк тә бөтөмдә, бер принципиаль
яңылыҡ күренә: һәр экиәтсе үҙе һөйләгән сюжетте бөгөнгө тор-
мош менән килтереп бәйләй, экиәткә үҙенсә аңлатма бирә. «Ирек-
бай», «Өс батыр», «Елбиҙәк менән Илгиҙәр» экиәтендә аңлатма ха-
лыҡтың дөйөм шатлығын констатациялау, йәки тыңдаусыһеҙ еңеү
туйының йыл һайын ҡабатланып тороуын әйтеү формаһында булһа,
«Йәләл бабайҙың бәхет табыуы» экиәтендә киңәйтелгән эпилог
төҫөн ала. «Нужаның үлеме», «Илмәт менән Килмәт» үҙ-ара тығыҙ
бәйләнгән агитацион йөкмәткеле мәҡәләләр серияһы менән ослана.
Жанр формаһына ҡараған икенсе бер яңылыҡ — композицияла.
Боронғо экиәттәр йыш ҡына төрлө сюжеттәр ҡушылмаһынан тора.
Фәндә контаминация (ялғаныу) тип аталған был күренеш бигерәк
тә батырҙар экиәтенә хас. Хәҙерге экиәттәр иһә күбеһенсә бер
генә сюжетле: ул конкрет бер маҡсат (бәхет эҙләү, дөрөҫлөк эҙләү
һ. б.) менән башланып, шуға бәйле ваҡиғалар ғына һөйләнә һәм
сюжет шул маҡсатҡа ирешеү менән ослана.
Был ҡағиҙә бары бер экиәттә һаҡланмаған. Ул — «Елбиҙәк
менән Илгиҙәр». Бында геройҙарҙың бәхет эҙләү юлы, боронғо
экиәттәрҙәгесә төрлө сюжет мотивтәре менән аралашып, ифрат
мажаралы фантастик төҫ алып китә. Мәҫәлән, Илгиҙәрҙең тәүҙә
ике башлы дейеү менән һуғышып, ҡыҙҙы ҡотҡарыуы (был асылда
«Өс батшалыҡ» тип аталған сюжет тибына ҡарай — АТ 301), унан

баҡыр батшаһы булған дейеүҙең, аҙаҡ тағы «кеше ҡатын эсеүсе әбей батшаның» хәтәр йомоштарын үтәүе (былары «Конек-горбунок» тип йөротөлгән — АТ 531 — сюжетте икеләтә ҡабатлау булып тора) — береһе лә геройҙың төп маҡсатына туранан-тура бәйләнмәгән.

Хәҙерге әкиәттәрҙә реализм һыҙаттарының геройҙарҙың социаль йөҙөндә һәм улар башҡарған эштәрҙең тарихи аныҡлығында күренеүен әйткәйнек инде. Был кире типтарға ла ҡарай. Әкиәттәрҙә халыҡ дошмандарының байҙар, фабриканттар, батшалар йәки хатта исемләп Николай батша тип конкретләштерелеүе — шуның миҫалы. Ошо законлы тенденцияны иҫәпкә алһаң, әле әйтелгән мажаралы сюжеттәр генә түгел, икенсе әкиәттә Йәләл бабайҙың халыҡты йыйып, аждаһа менән һуғышыуы ла яһалма күренә. Был, әлбиттә, элекке традицияның яңы идея маҡсатына тейешенсә буйһондоролмауы арҡаһында килеп сыҡҡан ҡаршылыҡ.

## 2

Яңы әкиәттәр башлыса традицион сюжеттәрҙең «яңыртылған» варианттарынан торһа, халыҡ прозаһының башҡа жанрҙары совет осоронда тыуған өр-яңы әҫәрҙәр иҫәбенә тулылана бара.

Белгән-күргәнен кеше үҙ күңелендә генә һаҡлап ҡалмай. Уны башҡаларға хикәйә итә, шул туралағы уйҙары, кисерештәре менән уртаҡлаша. Әгәр йоҡмәткеһе менән бүтәндәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятырлыҡ булһалар, башлап һөйләүсе йәшәгән дәүерҙә үк уның хикәйәләре телдән-телгә күсә... Бына шул телдән-телгә күсә алыусанлығы менән ундай хикәйәләр күптән инде фольклорсыларҙың иғтибарын үҙҙәренә йәлеп итә килә. Дөрөҫ, башҡорт фольклористикаһында, 30—40-сы йылдарҙа яҙып алынған бер нисә текст һәм мәҡәләне иҫәпкә алмағанда, был тәңгәлдә әллә ни күҙгә күренерлек эш башҡарылманы. Уның ҡарауы башҡа халыҡтарҙа, мәҫәлән, рус совет фольклористикаһында, 30-сы йылдарҙан алып халыҡ прозаһының был өлкәһе менән ҡыҙыҡһыныу арткандан-арта бара. Рус совет фольклористикаһында улар, ғәҙәттә, йә «сказ», йә «устный рассказ» тип йөрөтөлһә, башҡорт фольклорсыларының хеҙмәттәрендә иһә берсә «сказ»[1], берсә «булған эште әкиәт итеп һөйләү» (быль)[2], берсә «легенда», «риүәйәт», «хикәйә-хәтирә»[3] тип исемләнде. Атамаларҙы ҡулланыуҙа ғына түгел, уларҙың жанр тәбиғәте, составы хаҡында ла тикшеренеүселәр әлегәсә бер фекергә килгәндәре юҡ.

Рус совет фольклористикаһында халыҡ прозаһының һүҙ барған төрө хаҡында әле лә ике төрлө ҡараш-концепция йәшәп килә.

---

[1] Ә. Усманов. Башҡорт совет фольклоры.— «Октябрь» ж., 1939, № 12, 68—77-се биттәр.

[2] Һуғыш фольклоры. Төҙөүсеһе Әхнәф Кирәй. Өфө, 1944, 46-сы бит.

[3] Ә. Сөләймәнов. Башҡорт легендаларында Октябрь темаһы. — «Совет Башҡортостаны», 1969, 3 июль; А. Сулейманов. Великий Октябрь в башкирской народной устной прозе.— Расцвет, сближение и взаимообогащение культур народов СССР. Вып. II, Уфа, 1970, с. 197—200.



Л. Е. Емельянов, мәҫәлән, хәтирә, риүәйәт кеүек үк телдән һөйләнеп йөрөгән был яңы күренештәрҙе, ғөмүмән, фольклор әҫәре тип ҡарамау яғында[1]. С. Н. Аҙбелов бындай жанрҙарҙың фольклор әҫәре була алыуын уларҙың ижтимағи әһәмиәте булыу-булмауы менән билдәләй[2].

Әлбиттә, халыҡ араһында осраған хикәйә, хәтирә, риүәйәт кеүек әҫәрҙәрҙең төрлөһө бар. Бар уларҙың ижтимағи әһәмиәткә эйә булып киң таралғаны, жанр билдәләре асыҡланғаны. Бар берике кеше һөйләшеүе рәүешендә иҫтәлек төҫлөһө.

Жанр билдәләре яғынан да улар бер иш түгел.

Башынан үткәнде хикәйәләүсе кеше үҙе бер үк ваҡытта шул хикәйәнең авторы ла, геройы ла булып сығыш яһай. Шуға күрә хикәйәләү шаһитле үткән заманда беренсе зат исеменән алып барыла. Бындай хикәйәләрҙе х ә т и р ә л ә р тип кенә йөрөтөргә булыр ине. Ваҡиғала үҙе туранан-тура ҡатнашмаһа ла, уны шаһит булараҡ тасуирләүҙәр ҙә стиле һәм функцияһы буйынса хәтирәләргә ҡарай.

Граждандар һуғышы ваҡиғаларына бәйле «Батыросҡанташ», «Ерәнсәкәй», 50—60-сы йылдарҙа булған хәлдәр тураһындағы «Айыу ташы», «Хәмиҙә» әҫәрҙәре, хәтирәгә хас «шаһитлелек» билдәһен юғалтыу сәбәпле, риүәйәт төҫөн алған. Икенсенән, бер үк ваҡиға төрлө кешеләр тарафынан төрлө формала һөйләнергә, йәғни бер вариантта — хәтирә, икенсеһендә — ярым риүәйәт, ярым хәтирә, өсөнсөһөндә риүәйәт һымаҡ һөйләнергә мөмкин. Мәҫәлән, 1918 йылда Дыуан-Мәсетле волосендә күтәрелгән кулак фетнәһе тураһындағы иҫтәлектәр хәтирә рәүешендә лә («Комиссар Ҡотдостоң үлеме»), ярым хәтирә, ярым риүәйәтте хәтерләткән формала ла («Большевиктәр бөтә буламы!») бирелгән. Бынан сығып, ҡайһы осорҙо сағылдырыуына ҡарамаҫтан, әгәр хикәйәлә шаһитлелек билдәһе булмай икән, ундай әҫәр р и ү ә й ә т тип иҫәпләнергә лә лайыҡ тип әйтергә лә була.

Һөйләнгән ваҡиғаларҙың ижтимағи әһәмиәте һәм шул әһәмиәтлелекте башҡарыусы йәшәгән осорҙа ғына түгел, күп ваҡыттарҙан һуң да һаҡлап ҡала алыу, йәғни заман һынауын үтә алыу, хәтирәләргә риүәйәт булып китеүгә мөмкинлек бирә. Тимәк, хәтирәиҫтәлектәр риүәйәт формалашыу юлында тәүге баҫҡыс хеҙмәтен үтәүҙәре менән дә әһәмиәтле.

Хәтирәләрҙең дә риүәйәттәрсә аңлатмалылыҡҡа ҡоролғандары була. Мәҫәлән, урын исемдәрен аңлатыусы хәтирәләр бар («Мөбәрәк ҡайыны», «Фатима соҡоро», «Хәйрулла ағаслығы», «Партизан урманы — Заһит баҡсаһы» һ. б.). Атаманың урынға ерегеүе, уға тағылып килеүсе хәтирә-аңлатманың, йылдар үткәс, риүәйәткә тартылыуына килтерергә мөмкин. Һуңғы ваҡытта тыуған һәйбәт традиция — яу һәм хеҙмәт ветерандары менән осрашыуҙар ҙа шуға булыша.

---

[1] Л. Е. Емельянов. Проблема художественности устного рассказа.— Русский фольклор. т. V, М.—Л., 1960, с. 245—264.

[2] С. Н. Азбелов. Современные устные рассказы.— Русский фольклор. т. IX, М.—Л., 1964, с. 132—177.

Әгәр элекке фольклорға быуаттар һынауын үтергә мөмкинлек булһа, совет осоро фольклоры сағыштырмаса йәш әле: тыуыу һәм формалашыу юлының башында ғына тора. Ләкин ул да дәүер емеше, үҙ дәүеренең «ижтимағи факты». Шуға күрә совет осоро фольклоры хаҡында һүҙ алып барғанда, уны революцияға тиклемге быуаттар һуҙымында формалашҡан фольклор үлсәмдәре менән генә баһалау бик үк дөрөҫ булмаҫ ине. Шундай факторҙарҙы иҫәпкә алып, совет осоро риүәйәттәрен генә түгел, бер ни тиклем шартлы рәүештә булһа ла, хәтирәләрҙе лә, фольклор күренеше тип ҡарайбыҙ.

Әлбиттә, күргән-белгәнде һәм ишеткәнде һөйләүселәрҙең һөйләгәндәре бөтәһе лә фольклор күренеше була алмай. Халыҡ араһында таралған бөтөн эпизодлы, аңлатмалы, ижтимағи әһәмиәтле хәтирәләр, риүәйәттәр генә быға тулыһынса дәғүә итә. Информацияны тыңлаусыға эмоционалерәк итеп еткерергә тырышыу һөҙөмтәһендә, художестволылыҡ билдәләре лә алып, улар эстетик функция үтәү мөмкинлегенә эйә булыусан.

Совет осоро ауыҙ-тел хикәйәләрен тематик яҡтан: 1) элекке тормош, 2) граждандар һуғышы, 3) халыҡ дошмандарына ҡаршы көрәш һәм колхозлашыу, 4) Бөйөк Ватан һуғышы, 5) тормош-көнкүреш хәлдәре тураһындағы риүәйәт, хәтирәләр төркөмдәренә бүлергә мөмкин.

1. Элекке тормош хаҡындағы хәтирә һәм риүәйәттәр. Иҫке тормоштоң ауырлыҡтарын үҙ елкәләренә татыған кешеләрҙән яҙып алынған хәтирәләрҙә синфи тигеҙһеҙлеккә нигеҙләнгән йәмғиәттең ҡәһәрле яҡтары фашлана. «Кантондар бар саҡта», «Алдыҡ азатлыҡ алдыҡ», «Әхмәтша йырсы», «Сәйебеҙ ҙә булды, ерҙе лә һатманыҡ» һ.б. хәтирәләрҙә батша түрәләренең, байарҙарҙың, байҙарҙың, буржуйҙарҙың мин-минлектәре, кирелектәре, мәкерлектәре, аяуһыҙлыҡтары асып һалына.

Традицион легенда һәм риүәйәттәрҙәге кеүек, элекке дәүер хаҡындағы хәтирәләрҙә лә ер һатыу проблемаһы үҙәк урындарҙың береһен алып тора. «Ленин булмағанда, бөтә ине башҡорт», «Әлдә революция сыҡты» тигән әҫәрҙәрҙә бер деталь иғтибарҙы тарта: ер һатҡан башҡорттоң ат бәйләр ҡаҙыҡ ҡағырға ла урыны юҡ. Ошо ғына деталдә лә ер һатыуҙың фажиғәле һөҙөмтәһе тәрән мәғәнәле сағылыш алған.

Элекке тормош тураһындағы хәтирәләрҙә шәхестең иркен сикләүсе, уны түбәнһетеүсе шәриғәт, йола ҡотҡоһы ла нәфрәт менән телгә алына. Улар ҙа синфи йәмғиәттең булмышын фашлай («Элекке тормош эт тормошо ине»).

Иҫке тормошто сағылдырыусы хәтирә һәм риүәйәттәргә социаль протест мотиве хас. Был мотив төрлөсә сағыла, әммә ул үҙен һәм синыфтарын яҡлап көрәшкә күтәрелеүсе батырҙарҙың, айырым шәхестәрҙең образын поэтиклаштереүҙә бигерәк тә көслө бирелә. Традицион легенда, риүәйәттәрҙән айырмалы рәүештә, яңы осор «халыҡ хикәйәләре» яңғыҙаҡ батырҙарҙы идеаллаштырыу менән генә сикләнмәй. Уларҙа күмәктең көсөн бергә туплаусы, бер маҡсатҡа йүнәлдереүсе конкрет шәхестәрҙең тарихи әһәмиәтен, тимәк,



халыҡтың синфи берҙәмлектә көс булыуын таныу кимәленә күтәрелеүен күрһәтеү өҫтөнлөк итә («Әлдә революция сыҡты», «Тоҙҡойған приискеһендә», «Сәйебеҙ ҙә булды, ерҙе лә һатманыҡ»).

2. Граждандар һуғышы тураһындағы риүәйәт һәм хәтирәләр. Граждандар һуғышы осорон сағылдырыусы «ауыҙ-тел хикәйәләре»ндә ҡаһарманлыҡ мотиве үҙәк урынды ала. Шәхестәре төрлө булған кеүек, геройҙарҙың ҡаһарманлыҡтары ла төрлө. Ләкин уларҙың барыһын да маҡсат аныҡлығы, фиҙакәрлек, революцияға тоғролоҡ берләштерә. «Сәрүәр», «Ҡыйыу ҡазаҡ», «Батыросҡанташ», «Нимә ул боевойлыҡ», «Ерәнсәкәй», «Аннаосҡантау» һ. б. хәтирә һәм риүәйәттәрҙең геройҙары, мәсәлән, үлем менән осрашҡанда ла ҡаушап ҡалмайҙар, ирек, азатлыҡ осон, Совет власе өсөн йәндәрен фиҙа ҡылырға әҙер торалар. Шуға ла граждандар һуғышы тураһындағы хәтирә һәм риүәйәттәрҙә ҡаһарманлыҡ мотиве трагик пафостан айырылғыһыҙ. «Аннаосҡантау», «Ерәнсәкәй», «Билдәһеҙ ҡыҙылармеец», «Ҡантүбә» һ. б. әҫәрҙәрҙең геройҙары тиңһеҙ алышта баштарын һалалар. Әммә оло маҡсат юлында ҡорбан булыу трагедияны оптимистик рухлы итә.

Граждандар һуғышы тураһындағы әҫәрҙәрҙең байтағында герой сифатында айырым шәхес түгел, ә дөйөм коллектив, халыҡ, ҡыҙылдар сығыш яһай. Шуның менән революцион көрәштең хеҙмәтсән халыҡ, масса эше булыуына баҫым яһала.

Күп кенә риүәйәт һәм хәтирәләрҙә Блюхер, Чапаев, Точисский, Крупская, Кашириндәр кеүек тарихи шәхестәр ҙә телгә алына. Улар ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙең аҡыллы етәкселәре, дошмандарға ҡаршы көрәште ойоштороусылар булып хәтерҙә ҡала («Чапаев дәресе», «Точисский рәхмәте», «Каширинселәр килгәндә»).

3. Халыҡ дошмандарына ҡаршы көрәш һәм колхозлашыу тураһындағы хәтирәләр, риүәйәттәр. 1918—1921 йылдарҙа Башҡортостандың әле бер мөйөшөндә, әле икенсеһендә кулак фетнәләре, урындағы милләтселәр менән берлектә сығыш яһаусы башҡа контрреволюцион элементтарҙың бандитлек хәрәкәте булып үтә. Бындай болалар ваҡытында урындағы партия, совет эшмәкәрҙәре, активистәр үлтерелә [1]. «Большевиктәр бөтә буламы!», «Батыр ташы» һ. б. шундай хәтирә һәм риүәйәттәрҙә, бер яҡтан, синфи дошмандарҙың вәхшилектәрен фаш итеүсе, икенсе яҡтан, большевиктәрҙең үҙ бурыстарына һуңғы һулыштарынаса тоғро булыуҙарын, уларҙың ихтыяр көсөнөң ныҡлығын асыусы картиналар йәнләндерелә.

Колхозлашыу осоро тураһындағы халыҡ прозаһы өлгөләрендә социалистик хужалыҡҡа ойошоу, кулактарға ҡаршы көрәш ваҡиғалары сағыла.

4. Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы хәтирәләр һәм риүәйәттәр. Был төркөмгә ҡараған әҫәрҙәр тарихтә тиңдәше булмаған оло яуҙың айырым эпизодтарын күҙ алдына баҫтыралар. Һуғыш ветерандары яу ҡырындағы үҙҙәренең

[1] Очерки по истории Башкирской АССР. т. 2, Уфа, 1966, с. 106—139, 189—190.

батырлыктарын, ғәҙәттә, үтә баҫалҡы баһалаусандар. «Әбделхаҡтың батырлығы» хәтирәһен генә алып ҡарайыҡ. Хәтирәне бәян ҡылыусы Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Билалов Яхияның маҡсаты — башкалар данын еткереү. Ул дошман дотына ҡыйыу ташберәү — башкалар данын еткереү. Ул дошман дотына ҡыйыу ташланған яҡташы Әбделхаҡ Ғәйетҡоловка һоҡлана. Ә үҙенең эше халанған яҡташы Әбделхаҡ Ғәйетҡоловка һоҡлана. Ә үҙенең эше хаҡында һүҙ ыңғайында ғына телгә ала. Дотты тонсоҡтороуы ла яҡҡында һүҙ ыңғайында ғына телгә ала. Дотты тонсоҡтороуы ла яҡташының өлөшөнә төшкән хәрби бойороҡто үтәшеү, уның эшен даташының өлөшөнә төшкән хәрби бойороҡто үтәшеү, уның эшен дауам итеү генә кеүек. Ләкин, асылда, ул үҙе лә данға лайыҡ.

Танкист Ҡотлобаев иһә үҙенең подвигтәре менән иң ҡыйын хәлдә лә совет яугиренең юғалып ҡалмауын, етеҙлеген, аҡыл менән эш итеүсәнлеген кәүҙәләндерә. Тәү ҡарашка уның ҡыланыштары дыуамаллыҡ кеүек күренгәндәй. Ләкин ул хәрби техниканы, таҡтика закондарын яҡшы белеүе, оҫталығы, һалҡын ҡанлылығы арҡаһында өлгәшә ул подвигтәргә.

Хәрби техниканы, тактиканы яҡшы белеүе, таҫыллығы яғынан Ҡотлобаевҡа элемтәсе Алмаҡаев оҡшаш («Сос егет»). Ул үҙен хәрби хәйлә алымын оҫта файҙалана белеүсе «бошонмаҫ» һалдат итеп таныта. Уға «Мыйыҡ», «Эт иҫәбе» кеүек хәтирәләрҙең геройҙары яҡын.

Хәтирәләрҙә гел батырлыктар ғына тасуирләнмәй. Һуғыштың ауырлыктары ла сағыла. Хәтирәләрҙә һуғыштың фажиғәле яҡтарының иҫкә алыныуы «кешелек тарихендә юғары рубеж» булған Бөйөк еңеүҙең еңел генә яуланмауын күрһәтә.

5. Т о р м о ш - к ө н к ү р е ш  х ә л д ә р е  т у р а һ ы н д а ғ ы  х ә т и р ә л ә р  һ ә м  р и ү ә й ә т т ә р. «Зар илаткан замандa», «Салих тауы», «Абыҙ үлеге» ише хәтирә һәм риүәйәттәрҙе революцияға тиклемге осор ваҡиғалары аша халыктың оло мөхәббәт, шуға нигеҙләнгән ғаилә һәм ҡатын-ҡыҙ азатлығы тураһындағы хыялы сағылған. Шуныһы характерле: ул хыял пассив уй йөрөтөү рәүешендә бирелмәй, актив характерҙәрҙең хәрәкәтендә һынланырыла. Улар йөҙөндә шәриғәт хөкөмөнә, ғәҙелһеҙ законлдарға ҡаршы сығып, мөхәббәтте, шәхес иркен яҡларлыҡ актив башланғыстарҙың революцияға тиклем үк типик булыуы асыла.

Был төркөмдәге әҫәрҙәрҙең байтағы топонимик характерҙә. Улар төрлө көлкөлө хәлдәрҙе («Айыу ташы», «Ҡынйыраҡ»), ғәҙәттәрҙе («Минһаж шишмәһе»), тәбиғәткә мөнәсәбәтте («Партизан урманы — Заһит баҡсаһы» һ. б.) сағылдырып, тотош алғанда, һүҙ барған төркөмдөң тематик яҡтан киң ҡоласлы булыуы тураһында һөйләйҙәр.

Б ә һ л е ү ә н д ә р  т у р а һ ы н д а ғ ы  х ә т и р ә  һәм р и ү ә й ә т т ә р ҙ е  лә тормош-көнкүреш төркөмөнә индерергә мөмкин. Ифрат көсլо кешеләр менән һоҡланыу, уларҙы идеаллаштырыу — ауыҙ-тел прозаһы өсөн ғәҙәти хәл. Ошо традиция совет осоронда ла күҙәтелә.

Революцияға тиклем йәки ике дәүер араһында йәшәүсе бәһлеүәндәр тураһындағы хәтирә һәм риүәйәттәрҙең геройҙары социаль ғәҙелһеҙлекте фаш итеүселәр, уға ҡаршы көрәшеүселәр булып һынлана. Был әҫәрҙәрҙең әһәмиәте лә шунда.



Совет осоро риүәйәттәрен һәм хәтирәләрен яҙып алыу эше һуңғы йылдарҙа ғына йәнләнеп китте. Фольклор фондтарына тупланған был материалдар уларҙың тематик йәһәттән төрлө булыуын, илебеҙ үҫешенең мөһим этаптарын сағылдырыуын, совет патриотизме, героизм пафосы менән һуғарылыуын асыҡ күрһәтә.

Совет осоро риүәйәттәре һәм хәтирәләренең п о э т и к  ү ҙ е н с ә л е к т ә р е күп яҡтан традицион легенда, риүәйәттәрҙекенә оҡшаш. Вариантлашҡан ваҡытта, уларҙың йөкмәткеһе, нигеҙҙә, тотороҡло һаҡланһа ла, уның бирелеш формаһы, текстарының күләме, һөйләнеү шартына (ваҡытына, аудиторияның үҙенсәлегенә), маҡсатына, башҡарыусының оҫталығына ҡарап һ. б. төрлө үҙгәрештәргә дусар ителә.

Миҫалға маҡсат ҡуйылышын ғына алып ҡарайыҡ. Маҡсат ҡуйылышы традицион легенда, риүәйәттәрҙәге һымаҡ, аңлатмалылыҡтың (этиологик мотивтең) булыу-булмауында ла сағыла. Аңлатмалылыҡ мотиве булмағанда, ғәҙәттә, тәү башта ваҡиғаның ижтимағи әһәмиәтлелек кимәленә ҡарап, тарихи йә көнкүреш шарттары, осор хаҡында мәғлүмәт бирелә. Был моменттең эстетик әһәмиәте уның экспозиция хеҙмәтен үтәүендә. Артабан үҫеү, өлгөрөү, тамамланыу моменттәре теүәл булған бер бөтөн эпизод (йәки эпизодтар сынйыры) айырыңҡырап тасуирләнә. Экспозицияла әйтелгәндәр шул рәүешле конкрет нигеҙләнеш ала, геройҙың башта билдәләнелгән ынтылыштарының ғәмәлгә ашыу-ашмауы асыҡлана («Әхмәтша йырсы», «Тимербай батыр», «Точисский рәхмәте», «Сафаның үлеме»). Бындай әҫәрҙәрҙә информация теүәллегенә ныҡ иғтибар ителә. Шуға күрә лә уларҙа сюжеттең бөтә элементтәре лә булыусан [1].

Совет осоронда аңлатмалылыҡҡа ҡоролған риүәйәттәрҙән бигерәк тә топонимик характерҙәгеләре ныҡ үҫеш алды. Хатта хәтирәләрҙең дә топонимик характерҙәгеләре осрай («Сахалин» ере», «Партизан урманы — Заһит баҡсаһы» һ. б.). Бының кеүек формаларҙа экспозиция булһа ла, сюжеттең тулы бирелеше шарт түгел.

Топонимик риүәйәттең төп маҡсаты — урын исемен асыҡлау. Шуңлыҡтан йыш ҡына урын исемдәре асыҡланыуы була, хикәйәләү ҙә туҡтай. Шул традицияға тоғро ҡалыу тик экспозиция, төйөнләнеш һәм сиселештән генә торған әҫәрҙәр барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе булған («Коммун тауы», «Мәтәйес күпере», «Ҡарауылташ, Партизандар ташы»). Атаманың тарихе ике-ос һөйләм менән генә бирелгән осраҡтар ҙа байтаҡ.

Аңлатмалы тамамланышты шартлы рәүештә э п и л о г тип атарға ла булыр ине. Эпилог аңлатмаһыҙ әҫәрҙәрҙә лә булғылай. Йыш ҡына ул һөйләнелгән ваҡиғанан, тасуирләнгән күренештәрҙән ғибрәтле һығымта сығарыу һымағыраҡ бирелә. Революцияға тиклемге тормошто сағылдырыусы хәтирәләрҙә элекке менән хә-

[1] Был әйтелгәндәр аңлатмалылыҡ мотиве булмаған бөтә ауыҙ-тел хикәйәләре лә сюжетле итеп бирелә тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Иҫтәлектәр һөйләгәндә, айырым эпизодтарҙы үҙәккә ҡуймайынса, баштан үткәнде, күргән-белгәнде бәйнә-бәйнә теҙеп сығыу алымы ла ҡулланылыусан. Ундай саҡта сюжет, әлбиттә, булмай.

ҙергене сағыштырыу, элеккене хурлау, совет ысынбарлығын маҡтау, бәхетле тормошҡа сығарғаны өсөн Ленингә, партияға, совет хөкүмәтенә рәхмәт тойғоларын белдереү менән тамамлау — шуның баҙыҡ миҫалы ул («Ленин булмағанда, бөтә ине башҡорт», «Әлдә революция сыҡты»). Тасуирләнгән ваҡиғаларға, шул ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан шәхестәргә халыҡтың бөгөнгө мөнәсәбәтен белдереү, улар иҫтәлегенә йыр сығарыу, һәйкәл ҡуйыу, сәскә ултыртыу тураһында әйтеү менән һүҙҙе ослау алымы ла шундай уҡ функция атҡара («Сафаның үлеме», «Большевиктәр бөтә буламы!»).

Персонаждарҙы һүрәтләгәндә традиционлыҡ өҫтөнлөк ала. Риүәйәттәрҙә генә түгел, күреп-белгән шәхес хаҡында һөйләгән хәтирәләрҙә лә индивидуаллəштереү алымы ҡулланылмай тиерлек. Автобиографик хәтирәләрҙә генә геройҙың эске кисерештәренә урын бирелергә мөмкин. Сөнки уның ролендә автор үҙе сығыш яһай. Ә дөйөм алғанда, персонаждарҙың иғтибарҙы тартырҙай һыҙаттары ла типик күренештең индивидуаль сағылышы кеүек кенә, йәғни теге йәки был сифат халыҡта күптән формалашҡан төшөнсәләр кимәленән сығып ҡына тасуирләнә. Мәҫәлән, «Ҡыҙылдар менән бергә» тигән хәтирәлә герой үҙе ғашиҡ булған йәһүт ҡыҙын: «Ҡыҙы бик матур ине. Үҙебеҙҙең башҡорт ҡыҙы кеүек ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, ҡара сәсле. Итәғәтле»,—тип тасуирлай. Йәғни конкрет ҡыҙҙың һылыулығы дөйөм идеал күҙлегенән баһалана.

Геройҙы статик хәлендә генә түгел, эш-хәрәкәте аша һынландырғанда ла традицияға тоғролоҡ күҙәтелә: ҡаһарман шәхестәр тураһында һүҙ барғанда, мәҫәлән, уларҙың ҡылыҡ-булмыштарына айырыуса традицион батырҙар образын хәтерләтерҙәйҙәренә баҫым яһала. Билдәһеҙ ҡыҙылармеец («Батыросҡанташ») менән батыр ҡыҙ Аннаның ҡаянан һикереүе («Аннаосҡантау»), мәҫәлән, Салауат, Бейеш кеүек батырҙарҙы иҫләргә мәжбүр итә. Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы Исламдың егерме дүрт «пантера»ға ҡаршы тороп, еңеп сығыуы, ут эсенән дошмандың бер танкыһын, өс совет танкыһын эвакуациялауы иһә уның хаҡында: «Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ, һай, батыр ҙа ир икән!» — тип әйтергә мөмкинлек бирә.

Традицион жанрҙарҙа персонаждарҙың социаль сығышын әйтеү үк уларҙың ҡайһыһы ыңғай, ҡайһыһы кире икәнен билдәләү сараһын үтәһә, совет осоро «ауыҙ-тел хикәйәләре»ндә был үлсәм генә етмәй. Персонаждарҙың ыңғай йә кире булыуы уларҙың кем яғында, кемгә ҡаршы сығыуы, уның ҡылығының ҡайһы синыфҡа хеҙмәт итеүе, йәмғиәткә, тирә-юнгә мөнәсәбәте, әхлаҡи һыҙаттары менән билдәләнә.

Граждандар һуғышы, кулак фетнәләре тураһындағы риүәйәт һәм хәтирәләрҙә кешеләрҙең яңы заманға хас яңы төркөмләнеш белдереүсе уртаҡлыҡ исемдәрен ҡулланыуға ныҡ иғтибар ителә. Ыңғай персонаждар «комиссар», «большевик», «ҡыҙылармеец», «партизан» тип кенә атала. Йыш ҡына был атамалар үҙ-ара синоним һымаҡ ҡулланыла. Шуның менән уларҙың уртаҡ маҡсатлы бер үк көс — йәмғиәтте революцион үҙгәртеп ҡороусы көс булыуы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ә кире персонаждар, ғәҙәттә, «дошмандар», «кулактар» ,



«аҡтар», «бандиттәр» тигән синонимдәр менән парыҡлана, уларҙың мәкерле эштәре фаш ҡылына.

Кире яҡ йыш ҡына «бандиттәр» тигән исем менән дөйөмләштерелһә, «большевик», «партизан», «ҡыҙылдар» тигән синонимдәр ҡайһы саҡта «батыр» һүҙе менән алмаштырыла («Батыросҡанташ», «Батыр ташы», «Сафаның үлеме», «Ерәнсәкәй»). Ә «батыр» һүҙенә башҡорт фольклорында тәрән йөкмәтке һалына. Ул көслөлөк менән ҡурҡыу белмәүҙе генә аңлатып ҡалмай, ә тәүәккәллекте лә, мәргәнлекте лә, сәсәнлекте лә, ғәҙеллекте лә, игелекле булыуҙы ла, әхлаҡи камиллекте лә үҙ эсенә ала, йәғни халыҡтың идеал геройын һынландыра.

Традицион легенда, риүәйәттәр объектив хикәйәләүҙе генә үҙ итеүсән. Ә совет осоро риүәйәттәре һәм хәтирәләре быңдай алым менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Улар араһында сатира һәм юмор пафослылары ла осрай. Комик эффект тыуҙырыуҙа геройҙың үҙ иркенән тыш көтөлмәгән ситуацияға юлығыуы һәм алдан ниәтләгәненә бөтөнләй оҡшамаған икенсе һөҙөмтәгә ирешеүе мөһим роль уйнай.

Әйбер, хәл, күренеш хаҡында яңылыш фекер тыуыуы, ләкин шул яңылышты ысынға алыу совет осоро риүәйәт һәм хәтирәләрҙең комик эффектле булыуына килтерә. Быңдай алым бигерәк тә иҫке ҡараштарҙы, дин әһелдәрен сатирик фашлауҙа ҡулланылыусан. Мәҫәлән, йәштәр трактор килеүенә ҡыуанышҡан бер мәлдә, Әхмәт тигән ҡарттың: «Йәшәү бөттө. Дәжжәл килә... Заман ахыры етте»,— тип, ҡолаҡтарын тығып, толопҡа төрөнөп, мөйөштә илап ятыуы («Дәжжәл»), мунсаға барған мулланың, ен икән тип, бесәйҙән ҡото осоп, иҫен юйыуы («Мулланың ен күргәне») иҫке хөрәфәттәргә, шәриғәткә пародия кеүек ҡабул ителә.

Сатира һәм юмор пафослы әҫәрҙәргә кинәйәлелек, әйтеп бөтөрмәй, уй йомоу хас. «Сахалин» ере» тигән бәләкәй генә топонимик риүәйәттең комиклек менән бер ниндәй уртаҡлығы юҡ кеүек. Ләкин тәү ҡарашҡа ғына шулай тойола. Ә асылда унда сарказм менән сиктәш аҫтыртын көлөү бар. Быға ул бер генә лексик сара — топонимик атама менән генә өлгәшә. Колхозға инмәүсе хәлләләр өсөн ситтән бүлеп бирелгән сабындың халыҡ тарафынан «Сахалин ере» тип аталыуында ысын Сахалингә ым бар. Ә «Сахалин» тигән һүҙ колхозлашыу осоронда «һөргөн ере», «кулактарҙың һуңғы төйәге» тигән төшөнсәне алған була. Тимәк, колхозды хушһынмаусыларҙың сабынын «Сахалин ере» тип атау менән үк халыҡ уларҙың кулак затлы булыуҙарына төрттөрә.

Риүәйәттәрҙең дә, хәтирәләрҙең дә теле башҡарыусының телмәр үҙенсәлектәрен сағылдыра. Риүәйәттәр нейтраль стилдә өсөнсө заттан һөйләнелә. Шуға күрә хәл-ваҡиғалар һәр саҡ объектив һүрәтләнгән кеүек була. Ә хәтирәләр беренсе заттан шаһитле үткән заманда һөйләнелгәнгә, әҙәби мемуарҙарҙағы һымаҡ, уларҙа һөйләүсе фигураһы үҙәктәрәк була. Субъективлек башланғысына ҙур ғына урын бирелһә лә, хәтирәләрҙең ундайҙарын да, «мин»де үтә фәстереүҙә ғәйепләмәйенсә, башҡа хәтирә, риүәйәттәр контексында ҡарарға кәрәк. Шул саҡта ғына уларҙың да булып ятҡан хәл-ваҡиғаларға, киңерәк алғанда, тарихҡа кешенең битараф ҡалмауын,

уны аңларға, үҙе аңлағанса аңлатырға тырышыу һөҙөмтәһе булыуына, ижтимағи әһәмиәтенә төшөнөргә мөмкин.

Хәтирәләрҙә лә, риүәйәттәрҙә лә диалогтар йыш ҡулланыла. Улар ваҡиғалыҡ төшөнсәһен биреүгә лә, персонаждарҙың үҙ-ара һәм тирә-юнгә мөнәсәбәтен күҙалларға ла, тотош алғанда, әҫәрҙең эмоциональлеген көсәйтеүгә лә булышалар. Текстың сәсмә өлөшө менән аралашып йә уны оҙатып килеүсе йырҙарҙың эстетик функцияһын да, нигеҙҙә, шулай аңлатырға була.

Шулай итеп, әкиәттәр рәтенә инмәгән ауыҙ-тел прозаһы совет осоронда традицион поэтик алымдарҙы яңы йөкмәткегә яраҡлаштырыу менән бер рәттән үҙҙәренә генә хас яңы художестволылыҡ билдәләре лә алалар.

3

Башҡорт халҡының эстетик аңында сәсәндәр — «ил күрке», выждан һәм намыҫ рыцарҙәре, гүзәл һәм актив йәмәғәт эшмәкәрҙәре, һүҙ сәнғәтендә халыҡ аҡылын, уның уй-тойғоларын, өмөтхыялдарын, тарихи ихтыяждарын һәм ынтылыштарын сағылдырыр талантлы шәхестәр булып кәүҙәләнә. Борон: «Яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ, яҡшылыҡты һөйәр ул, илдең зарын һөйләр ул, яуға саҡырып өндәр ул»,— тип ҡылыҡһырланған сәсәндәр беҙҙең заманда ла шундай уҡ бәҫле сифаттар менән алға баҫтырыла:

Сәсәндәрҙең күңелендә алтын ҡалып,
Әйтер һүҙен һөйләп бирер шуға һалып.
Тапҡыр һүҙен, ғибрәтле йырын-көйөн
Бөтә халыҡ тыңлап торор таңға ҡалып.

Сәсәндәрҙең уй-фекере халыҡ менән,
Үҙен танытыр һүҙендәге хаҡлыҡ менән.
Ҡайғырыр ул халыҡтағы ҡайғы менән
Һәм шатланыр халыҡтағы шатлыҡ менән.
(Ш. Шәрифуллин. Сәсән.)

Тәрәнерәк уйлаһаң, «Урал батыр» һәм «Аҡбуҙат» кеүек героик эпостар ҙа, тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар ҙа, кешенең кешелеген, юғары әхлаҡ нормаларын данлаған әйтемдәр (дидактик ҡобайырҙар) ҙа, халыҡтың социаль өмөттәрен һәм идеалдарын кәүҙәләндергән әкиәттәр ҙә, кеше күңеленең нескә ҡылдарын сиртеп, моң-зарын урғылтҡан, мөхәббәт тойғоларын, башҡа хистәрен һәм кисерештәрен көйгә һалған йырҙар ҙа, балаларҙың зиһенен, тапҡырлығын үҫтереүгә бағышланған йомаҡтар ҙа — барыһы ла, асылда, ҡасандыр йәшәгән сәсәндәр һүҙе, ҡурайсылар, йырсылар моңо улар.

Боронғо ҡомартҡыларҙы изге күреп хәтерҙә һаҡлау һәм яңы быуындарға тапшырыу өлкәһендә хәл иткес ролде сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар һәм башҡа талантлы шәхестәр башҡарған. Мәҫәлән, «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Мәргән менән Маянһылыу» һәм «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға» исемле эпостарҙың иң



тулы варианттары өсөн, бик күп тарихи йырҙар, легендалар һәм бүтән жанр әҫәрҙәре өсөн, шулай уҡ Ҡобағош (XVI быуат), Ҡарас (XVIII), Байыҡ-Айҙар (1710—1812 йылдан һуң), Ишмөхәммәт Мырҙаҡаев (1781—1878), Ғәбит (1856—1921) һәм Хәмит (XIX быуат ахыры — XX быуат сиреге) кеүек элгәрге мәшһүр сәсәндәрҡурайсылар хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр өсөн беҙ бөтәһенән элек Мөхәммәтша Буранғоловҡа бурыслыбыҙ. Хәйрулла сәсән Ишмурзиндән 30-сы йылдар ахырында «Алпамыша» эпосының әкиәтләшкән варианты («Алп батыр»), Фәррәх Дәүләтшиндән байтаҡ әкиәттәр яҙып алынған. Ғиндулла Усманов менән Вәлиулла Ҡоломбәтов үҙҙәре белгән әкиәттәрҙе, йырҙарҙы һәм башҡа әҫәрҙәрҙе үҙҙәре ҡағыҙға күсереп, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырғандар (аңлатмалар бүлеген ҡарағыҙ). Быңдай миҫалдар күп. Улар барыһы ла сәсәндәр институтының быуындан-быуынға күсә килеүен, беҙҙең заманда ла ҙур роль уйнауын раҫлай.

Ләкин был юнәлештә сәсәндәр эшмәкәрлеге ни хәтле әһәмиәтле булмаһын, талантлы сәсән мираҫ һаҡлаусы булып ҡына ҡала алмай. Ул үҙ дәүеренә лайыҡ яңы әҫәрҙәр ижад итергә, уртаҡ хазинаға үҙ өлөшөн өҫтәргә бурыслы. Фольклор традицияларының яңырыуы ла башлыса өшоға бәйләнгән.

Сәсәндәр — әле лә, элекке һымаҡ, башлыса фольклор традицияларын уңышлы дауам иттереүсе, халыҡсан һүҙ сәнғәтен заман рухында үҫтереүсе һәләтле кешеләр улар. Әҙәби йоғонтоға бирелгән осраҡта ла улар теләһә кемгә түгел, ә классик булып танылған йә булмаһа шул дәрәжәгә күтәрелгән абруйлы шағирҙәргә генә эйәрәләр, улар ижад иткән юғары өлгөләрҙе, камил шиғри формаларҙы ҡабул итәләр. Был китапта бирелгән сәсәндәр араһынан, мәҫәлән, Ғатаулла Ғәлиев Көнсығыш әҙәбиәтенән килгән 12—12, 12—11 ижекле классик шиғыр системаһын үҙ күрә, афористик поэзияны дауам итә. Сәйфулла Сәғитов, Шәйҙулла Шәрифуллиндәрҙә Ғабдулла Туҡай йоғонтоһо ныҡ һиҙелә. Ҡулъяҙмаларында һаҡланған ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙән Ғиндулла Усмановтың демократик рус әҙәбиәте классиктәре, бигерәк тә А. С. Пушкин, Н. А. Некрасов, Л. Н. Толстой, ижады менән ҡыҙыҡһынғанлығы беленә. Әкиәттәрҙе шиғырға һалыуҙа, ихтимал, уға Пушкин әкиәттәре поэтик өлгө хеҙмәтен үтәһә, «1939 йылдың 1940 йылға доклады һәм васыяты» тигән хикәйәте, әлбиттә, Мәжит Ғафуриҙең билдәле шиғыры менән танышыу һөҙөмтәһе булырға тейеш...

Сәсәндәр ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен яҙып алыу һәм баҫтырып сығарыу эшенә элек тейешле иғтибар булмаған. Егерменсе йылдар ахырында, мәҫәлән, бары 32 битлек бер китап — «Һүҙ табыусы һуҡыр Фәррәх әңгәмәләре» (Өфө, 1928) сығарылыуы ана шул хаҡта һөйләй. Әммә утыҙынсы йылдарҙа инде, бигерәк тә совет яҙыусыларының беренсе Бөтә Союз съезында А. М. Горькийҙең фольклорға һәм Сөләймән Стальский кеүек халыҡ таланттарына иғтибарҙы көсәйтергә саҡырғанынан һуң, уларға ҡарата дөйөм хәстәрлек бермә-бер арта. Башҡортостанда, мәҫәлән, Фәррәх Дәүләтшин, Йәрми Сәйете (Сәйет Исмәғилев), Хәйрулла Ишмурзин, Ғәзизә Сөләймәнова кеүек үҙ төбәгендә танылған йырсылар, бәйетселәр, әкиәтсе-

ләр, башҡа һүҙ оҫталары менән 1938 йылда даими элемтә урынлаштырыла, әҫәрҙәрен күпләп яҙып алыу һәм баҫтырып сығарыу эше башлана.

Сәсәндәр сәнғәтенең ҙур ижтимағи, политик һәм художество әһәмиәтен иҫәпкә алып, Башҡортостан Верховный Советы Президиумының 1944 йыл 14 апрель Указы менән «Башҡорт АССР-ының халыҡ сәсәне» тигән маҡтаулы исем булдырыла. Шул уҡ йылда был исем айырата киң танылған сәсәндәргә, шул иҫәптән Фәррәх Дәүләтшин менән Сәйет Исмәғилевкә, бирелә.

Сәсәндәрҙең әҫәрҙәрен халыҡҡа еткереү, популярләштереү буйынса, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙерләнеп, Башҡортостан китап нәшриәте тарафынан донъяға сығарылған китаптар [1] әһәмиәтле булды. Ләкин бынан һуң эш, ни сәбәптәндер, бик һүлпәнәйҙе: Ф. Дәүләтшин менән С. Исмәғилев китаптарын яңынан баҫтырып сығарыу менән сикләнеп, башҡа сәсәндәрҙең әҫәрҙәрен туплауҙы дауам итеү, яңы ижади шәхестәрҙе эҙләү кеүек кисектергеһеҙ эштәр ҙә, сәсәнлек сәнғәтен тарихи һәм теоретик планда өйрәнеүгә бәйле фәнни проблемалар ҙа, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күҙ уңынан төшөп торҙо.

70-се йылдарҙа был эш бер аҙ йәнләнде. Фольклор, археография экспедициялары ваҡытында яңы материалдар тупланды.

***

Ижад формалары буйынса совет осоро сәсәндәрен икегә, йәғни телдән ижад итеүсе импровизаторҙарға һәм яҙма рәүештә ижад итеүсе сәсәндәргә, айырырға мөмкин. Нәби Ғәҙелбаев, Хәйрулла Ишмурзин, Фәррәх Дәүләтшин, Сәйет Исмәғилев, Сәйфулла Сәғитов импровизаторҙар булһа, Ғатаулла Ғәлиев, Ғиндулла Усманов, Вәлиулла Ҡоломбәтов, Мөхәммәтша Буранғолов, Сәһерйәр Муллабаев, Шәйхулла Шәрифуллин, Ислам Смаҡов, Әсәҙулла Ғәтиәтуллин — әҫәрҙәрен кәрәк сағында үҙҙәре уҡ ҡағыҙға теркәп ҡуйған грамоталы сәсәндәр. Ләкин шул уҡ ваҡытта икенсе төркөмгә ингән сәсәндәр ижадын ысын мәғәнәһендә яҙма ижад тип булмай әле. Сөнки, беренсенән, яҙыу-яҙышыу уларҙың төп профессияһы түгел, улар үҙҙәрен яҙыусы итеп һанамайҙар һәм быға дәғүә лә итмәйҙәр. Дөрөҫ, арала яҙма әҙәбиәт өлкәһендә лә үҙ көстәрен һынап ҡарағандары бар. Мәҫәлән, М. Буранғолов егермәнән ашыу пьесалар яҙҙы, уларҙың ҡайһы берҙәре театр сәхнәләрендә уйналды. Ләкин бында ла ул башлыса фольклорсы булараҡ эш итте, билдәле эпос һәм легендаларҙы әҙәби ҡалыпҡа һалды.

Совет осоро сәсәндәре өсөн ижад көндәлек шөғөл түгел. Улар бәйет, шиғыр, йыр һ. б. әҫәрҙәр сығарыу эшенә конкрет хәл-ваҡиғаларҙан, ниндәйҙер рухи талаптан сығып, эш араларында ғына

[1] Башҡорт сәсәндәре. Өфө, 1953 /йыйынтыҡта 9 сәсән: Ф. Дәүләтшин, С. Исмәғилев, Ғ. Усманов, М. Ғәзизова, Х. Ишмурзин, Ғ. Сөләймәнова, С. Сәғитов, Ш. Насифуллина, Ғ. Сәйетов); Башҡорт халыҡ ижады, 3-сө том, совет- осоро. Кирәй Мәргән. Өфө, 1955 (шул уҡ сәсәндәр, тик Ғ. Сәйетов индерелмәгән һәм 50-се йылдарҙа ғына табылған Ш. Шәрифуллин өҫтәлгән).



мөрәжәғәт итәләр. Әҫәр күберәк импровизация юлы менән ижад ителә, ауыҙҙан ғына ҡағыҙға теркәп ҡуйыла. Шуға күп кенә әҫәрҙәрҙең ҡасан тыуыу датаһы ла күрһәтелмәй. Әҫәрҙе ҡағыҙға күсереү, яҙып ҡуйыу грамоталы сәсәндәр ижадының да башлыса импровизаторлыҡҡа ҡоролоуын һис кире ҡаҡмай.

Традициялар художестволылыҡтың милли ерлеген тәшкил итһә, новаторлыҡ уны заман рухына, яңы эстетик ихтыяждарға бәйләп алға этәрә. Үҙ-ара береккәнлектә, диалектик берҙәмлектә хуп күргән был ике төшөнсә әҫәрҙәң йөкмәткеһендә лә, формаһында ла урын ала һәм, художестволы ижадтың дөйөм законы буларак, яҙма әҙәбиәткә лә, фольклорға ла һәм, әлбиттә, сәсәндәр сәнғәтенә лә бер үк дәрәжәлә ҡарай, һәр ҡайһыһының күсәгилешлелеген, яңы ҡараштар, поэтик асыштар, уй-тойғолар һәм шулай уҡ яңы формалар, ысулдар, алымдар менән байығып, өҙлөкһөҙ үҫеүен тәьмин итә.

Бында шуныһын да күҙ уңында тоторға кәрәк: новаторлыҡ заман рухын аңлау, халыҡтың яңы эстетик ихтыяждарын тойоу икән, уның ысынлығы, дөйөм әһәмиәтлелеге һәр ваҡыт ижадсының аҡыл һиҙгерлегенә һәм поэтик талантына бәйле тигән һүҙ.

Сәсәндәр ижадына ошо закон күҙлегенән ҡараһаҡ, һәр ҡайһыһының үҙенә башҡа ижади шәхес булыуын, фольклор традицияларын яңы заман рухына бәйләп, үҙҙәренсә яңыртыуын, артабан үҫтереүен күрербеҙ.

Әйтәйек, Мөхәммәтша Буранғоловтың сәсәнлек таланты башлыса ҡобайыр жанрында асыла. Һуңғы замандарҙа халыҡ ижадында һүнә килгән был боронғо эпик шиғыр формаһының Буранғолов тарафынан ҙур хәстәрлек менән яҙып алыныуы, яңы өлгөләренең ижад ителеүе сәсәнгә XX быуат башында йәшәгән Ғәбит менән Хәмит ҡурайсыларҙың нык йоғонтоһона бәйләнгән. Ҡобайырсы Буранғоловтың эшмәкәрлеге (бында беҙ уның китапҡа индерелгән әҫәрҙәрен генә түгел, ә халыҡтан ул яҙып алған «Урал тау», «Әй Уралым, Уралым», «Бейек тауҙың үлгәне» кеүек мәшһүр ҡобайырҙарҙы ла күҙ уңында тотабыҙ) үҙ сиратында шулай уҡ эҙһеҙ ҡалмаған. Башҡортостан халыҡ шағирҙәре Рәшит Ниғмәти менән Сәйфи Ҡудаш, Баязит Бикбай, Рәми Ғарипов һәм башҡа шағирҙәр ижадында ҡобайыр өлгөләренең булыуы йоғонтоноң яҙма поэзияға ла үтеп инеүен күрһәтә.

Ғиндулла Усмановтың поэтик оҫталығы боронғо әкиәттәрҙе әҙәби шиғырға (классик шиғыр формаһына) һалып һөйләүҙә асығыраҡ күренһә, Сәйет Исмәғилевтә йыр стихияһы һәм аллегорияға нигеҙләнгән ижад көслөрәк һиҙелә.

Фәррәх Дәүләтшин күп ваҡыт мәрәкәләп һөйләргә ратһа, Вәлиулла Ҡоломбәтовтең, М. Буранғолов кеүек, халыҡ ижадына мөкиббән бирелгәнлеге, бигерәк тә ҡобайыр формаһын ҙурлап, шул традицияла яңы әҫәрҙәр тыуҙырырға ынтылғаны күренә.

Сәһерйәр Муллабаев — тик бәйетсе, Маһинур Ғәзизова менән Ғәзизә Сөләймәнова тик йырсылар [1] булһа, Ғатаулла Ғәлиев, Сәй-

[1] М. Ғәзизова менән Ғ. Сөләймәнова йырҙары «Башҡорт халыҡ сәсәндәре» (Өфө, 1953) һәм «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының 3-сө томында (1955) баҫылған.

фулла Сәғитов, Шәйҙулла Шәрифуллин — әҙәби шиғыр культураһын нығыт үҫләштергән сәсәндәр.

Сәсәндәр ижадында синфи көрәш ваҡиғаларын көсөргәнешле бәрелештәрендә һүрәтләп күрһәтеү ҙә ҙур урын алмаған. Быға Ғ. Усмановтың «Ҙур Ыласын» исемле әкиәте менән Ә. Ғәтиәтуллиндең «Беҙ көрәштек» тигән шиғыры ғына бер ни ҡәҙәр миҫал була ала. Усманов әкиәтендә әлек иҙелеп йәшәгән эшсән халыҡтың азатлыкка сығыу юлы, жанр эстетикаһына ярашлы рәүештә, күгәрсендәр һәм уларға ярҙам ҡулы һуҙған Ҡарсыға һәм Ыласын образдары аша сағылдырылһа, Әсәҙулла Ғәтиәтуллин әҫәре граждандар һуғышы мәлендә хатта ата менән улдың үҙ-ара атышҡан осраҡтарын асыҡ төшөрә.

Уның ҡарыуы сәсәндәр ижадында яңылыкты хуплау, хеҙмәтсән халыҡтың дөйөм шатлығын йырлау ҙур урын ала.

Ғәтиәтуллин, мәҫәлән, баяғы шиғырында төп иғтибарын ата менән ул фажиғәһен һүрәтләүгә түгел, аяуһыҙ синфи алышта халыҡтың еңеп сығыу шатлығын, яңы тормош тантанаһын белдереүгә юнәлтә.

Ғ. Усмановтың «Һыуға төшкән мулла», Ф. Дәүләтшиндең «Ғимай бай», «Намаҙ», С. Исмәғилевтең «Иҫке тормош бәйете», «Иҫке мәктәп» тигән колколо хикәйә, әкиәт һәм бәйеттәре элгәргә ҡәһәрле заман ғөрөфтәрен, томаналыкты, эксплуататор синыфтарҙың ҡомһоҙлоғон шулай уҡ хәҙерге яҡтылыкта фашлауҙары менән әһәмиәтле.

Шатлык тойғоһо — сәсәндәр өсөн уртаҡ мотив. Күп осраҡта ул Совет власен һәм яңы илде данлау, бөйөк Ленингә һәм Коммунистәр партияһына оло рәхмәт һүҙе менән ҡушыла.

Һауаларҙа оскан ыласын
Йәйеп кенә килә ҡоласын.
Бәхет менән ғүмер итәйек беҙ,
Йәшәһен дә Совет власе!
(Х. Ишмурзин)

Ҡайын япраҡ ярған сакта,
Япраҡ яра ерек тә.
Илебеҙгә үҙебеҙ хужа,
Шат йәшәйбеҙ иректә.
(С. Исмәғилев)

Партияның һәр бер һүҙе
Тора беҙгә бер ҡояш.
Төнобоҙ ҙә көндәр кеүек,
Шул ҡояш балкып торғас.
(Ф. Дәүләтшин)

Мәңге һүнмәҫ беҙҙең яҡты ҡояш,
Нурын һибер Совет иленә.
Яҡтылыкка беҙҙе алып сыҡкан
Мең рәхмәттәр бөйөк Ленингә.
(М. Низамова)



Бындай миҫалдар күп.

Айырата шуныһы мөһим: сәсәндәр — барына шөкөр иткән, йә булмаһа әҙергә бәҙер генә торған кешеләр түгел. Улар, алдынғы совет яҙыусылары кеүек үк, үҙҙәрен Совет иленең агитаторҙары, партия һалдаттары итеп тоялар.

Мин — коммунист, тип әйтә алам,
Алмаһам да ҡулға партбилет.
Минең йөрәгем Партия яклы:
Мин дә даһи Ленин улы бит! —

ти, мәҫәлән, Ислам Смаков бер шиғырында [1]. Шундай уҡ оло граждандык тойғоһо Нәби Ғәҙелбаевты яңы тормош өсөн көрәшселәр сафына баҫтыра. Осло күҙле, сәсән телле батрак синфи дошмандарҙың яуызлыктарын, йәшерен эштәрен асып, тортмә йырҙар сығара; уларҙы халык араһында телдән һөйләү-йырлау менән генә сикләнмәйенсә, шиғырҙарын матбуғатта баҫтыра. Уның ҡайһы бер әҫәрҙәре, Дауыт Юлтый раҫлауынса, «суд өсөн материалдар булып әүерелгән һәм күп ҡороткостар, кулактар, маскалы кешеләр хөкөмгә тартылғандар»[2]. Быны уның китапка индерелгән шиғырҙары ла раҫлай.

Яҙғаным — төш түгел, булған факт,
Ул факт ҡалмаһын, тим, ерҙә ятып.
Партиям шулай ҡушкас, асып һалам,
Бер дошман ала алмаҫ мине һатып,—

ти ул, ҡороткостарға ҡаршы көрәштә үҙенең ныҡлығын, партия эшенә тоғролоғон раҫлап.

Ғ. Ғәлиев тә үҙ ижадын иркен тормошҡа сыҡкан халыҡҡа хеҙмәт итеүгә бағышлай:

Совет тотҡан бәхет юлы тәбиғи һәм
Хаҡлылығын күрһәтһен был ҡәләм осо.

Илдә социалистик йәмғиәт төҙөү дәүерендә кеше аңында, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙә боронғонан әйәреп килгән иҫкелек ҡалдыктарын, айырым етешһеҙлек һәм кәмселектәрҙе сатирик фашлауҙа Ф. Дәүләтшин ижадының ҙур роль уйнауы билдәле. Сәсәндең «Алты ялкау бәйете» — шундай тәнкиттең бер өлгөһө.

Тормоштағы етешһеҙлектәрҙе асыу, тәнкитләү ағымын Ғ. Усмановтың «Алдынғы колхоз менән эшлекһеҙ колхоз» тигән шиғри хикәйәһе шулай уҡ иғтибарға лайыҡ. Ғ. Ғәлиевтең «Хәмер хаҡында» исемле шиғыры һәм «Ҡабаҡ менән Ҡарағай» мәҫәле, В. Ҡоломбәтовтың «Ялкау Мотой менән тараҡандар» әкиәте, С. Исмәғилев мәҫәлдәре һәм «Көйһөҙ кейәү», «Ҡупшы ҡыҙ» шиғырҙары, Ә. Ғәтиәтуллиндең «Ярар, бабай, ярар!», «Ат һорағас», «Ярты кәрәк» ише сатирик шиғырҙары айырым кешеләрҙең рухи ғәриплеген сәнғәтсә асыҡ сағылдырыуҙары менән ҡыҙыҡлы.

[1] Ғилми архив, ф. 3, оп. 73/7 — Ислам Смаков дәфтәрҙәре, 7-се томдәм, 82-се бит.
[2] Дауыт Юлтый. Нәби Ғәҙелбаев аға тураһында.— «Октябрь» ж., 1934, № 4, 15-се бит.

Шулай ҙа сәсәндәр ижадында тәнҡит түгел, ә позитив мотивтәр: яңы тормош үҫешен раҫлау, уның матурлығын, эшлекле кешеләрен, юғары әхлаҡ принциптәрен йырлау төп урынды ала.

С. Исмәғилевтең «Нуҗа бабай сәйәхәте», «Бәхет ҡыҙы тураһындағы ҡиссә», «Бәхет ҡошо хаҡында» тибындағы әкиәт йәки фантастик һүҙ», «Бәхет ҡошо хаҡында» тибындағы әкиәт йәки фантастик хикәйәләрендә халыҡ тормошоноң яңырыуы аллегорик образдар аша күрһәтелһә, С. Сәғитовтың «Сәйетбаба» тигән шиғырында конкрет миҫалда алға баҫтырыла.

Был йәһәттән Ғ. Ғәлиевтең «Донъя, йәмғиәт үҫеше» тигән бүлеккә айырылған әҫәрҙәре үҙенә башҡа әһәмиәткә эйә. Ғәлиевтең күп төрлө фәндәр, мәҫәлән, астрономия, физика, химия менән ҡыҙыҡһынғанлығы, тарихте, әҙәбиәтте яҡшы белгәнлеге, донъя һәм культура үҫешен асылда дөрөҫ аңлағанлығы күренә. Шунлыҡтан уның ижадында мәсьәләгә фәлсәфәүи ҡараш өҫтөнлөк ала, әҫәрҙәре тарихи-философик йөкмәткеле булыуҙары менән диҡҡәттә тарта. «Иҫке — яңының баҫҡысы» тигән шиғыры хатта бөтә боронғоно аңын-тоңон уйламайынса кире ҡағыусы «пролеткульт» шағирҙәренә ҡаршы яҙылған төҫлө.

«Донъя — шатлыҡ йорто», «Китте заман, килде заман», «Мәҙәниәттең беҙҙә башланыуы» һәм башҡа әҫәрҙәрендә сәсән социалистик йәмғиәттең күркәм сифаттарын аҫа. Шуның береһен ул Совет хөкүмәте менән халыҡтың үҙ-ара тығыҙ бәйләнешендә, уларҙың рухи берҙәмлегендә күрә; был мөһәбәт береккәнлектең яҡты яҙмышына, бөтә донъяға таралыр шанына ышана:

Халыҡ менән был хөкүмәт бергә барғас,
Беҙҙең шөһрәт ер шарына ашып китәр.
(«Хөкүмәт — ҙур ағастыр»)

Ғ. Усмановтың «1939 йылдың 1940 йылға доклады һәм васыяты» шулай уҡ тарихи-философик характерҙә булыуы менән Ғ. Ғәлиев әҫәрҙәренә яҡын тора.

Ил үҫеше халыҡтың эшмәкәрлегенә, һәр кемдең үҙ өҫтөнә төшкән граждандыҡ бурысын аңлауға, социаль активлегенә бәйләнгән. Ошо күҙлектән ҡарағанда, сәсәндәр ижадында яңы кеше образы шулай уҡ ҙур әһәмиәткә эйә.

Үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, тәбиғәткә мәңге йәшеллек, халыҡҡа үлемһеҙлек бүләк иткән Урал батыр, аждаһа-йыландар һәм яуыз Мәсем хан ҡыҫымын юҡҡа сығарған Һәүбән батыр ише эпик геройҙар, һис ни алдында ҡаушап ҡалмаған ғәҙәттән тыш ғәйрәтле әкиәт батырҙары, махсус ҡобайырҙарҙа ил-йорт азатлығы өсөн фиҙакәрлек һыҙаттары менән ҡылыҡһырланған Салауат батыр, Ҡарас батыр һымаҡ айбарлы ҡаһармандар һәм, ниһайәт, Байыҡ Айҙар кеүек бөтәһенән дә ил берҙәмлеге менән ир намыҫын өҫтөн күргән сәсәндәр — быларҙың һәр ҡайһыһы, тәрәнерәк уйлаһаң, асылда шулай уҡ яңы кеше — өҙлөкһөҙ үҫә, тарихи конкретләшә килгән эстетик ҡарашта ерлегендә юғары идеал дәрәжәһенә күтәрелгән кеше образдары.

Совет фольклорында һәм хәҙерге сәсәндәр ижадында беҙ тап ошо традицияның артабан үҫтерелеүен күрәбеҙ. Бында инде бөтәһенән элек халыҡтарҙы азатлыҡҡа алып сыҡҡан юлбашсы В. И. Ленин образы алға баҫа.



Жанр үҙенсәлектәренә ярашлы рәүештә, ул ике планда — йыр һәм шиғырҙарҙа башлыса лирик, әкиәт һәм шиғри хикәйәләрҙә эпик һыҙаттарҙа алға баҫтырыла. Әммә ҡайҙа ла бөйөк юлбашсының даһи аҡылы, халыҡ бәхете өсөн көрәштә фиҙакәрлеге, ҡаһарманлығы образдың эстетик асылын тәшкил итә. Шунлыҡтан уның поэтик кәүҙәләнеше хатта лирик жанрҙарҙа ла йыш ҡына эпик төҫ ала. Бына халыҡ йырҙарынан бер миҫал:

Һауаларҙан геүләп, һай, осҡаны
Самолет та тигән ҡош икән.
Илебеҙҙә нур балҡытты Ленин,
*Мең аҡыллы батыр* кеше икән.

Йәки:

Һауаларҙа осҡан самолеттың
Геүелдәйҙер ҡорос та моторы.
Бәхет бирҙе беҙгә, байлыҡ бирҙе
Ленин тигән *халыҡ батыры.*

«Мең аҡыллы батыр», «бәхет биргән, байлыҡ биргән халыҡ батыры» — был инде Ленингә рәхмәт һүҙе әйтеү, йәки уға ҡарата күңелдәрҙә һаҡланған тәрән хис-тойғоларҙы белдереү генә түгел, ә традицион эстетикаға ярашлы рәүештә, уны героик эпос һәм әкиәттәрҙә кәүҙәләнгән ғәйрәтле батырҙар менән хаҡлы тиңләү тигән һүҙ.

Сәсәндәр ижадында был эпик һыҙат йыш ҡына йырҙарҙағыса символик образдарға төрөлә. Мәҫәлән, Ғ. Усманов «В. И. Лениндең донъянан күскәнен ишеткән көндә» тигән шиғырында уны баяғыса «халыҡтарҙы ҡәһәрҙән ҡотҡарған ҡаһарман» тип баһалаһа, «1939 йылдың 1940 йылға доклады һәм васыяты» тигән көйлө хикәйәһендә «Ер ҡояшы» тип атай:

Мең һигеҙ йөҙ етмешенсе йыл апрелдә
Балҡып тыуған был донъяға Ер ҡояшы.
Шул ҡояштан азатлыҡтың нуры балҡый,
Ленин Ильич — Ер шарының бер ҡояшы.

Символик образдың эпик йөкмәткеһе — бөйөк юлбашсының тыуыуын уҡ балҡып сыҡҡан ҡояшҡа тиңләүҙә. Поэтик сағыштырыу С. Исмәғилев ижадында тағы ла аныҡыраҡ төҫ ала:

Күк ҡояшы булһа юғарыла,
Ер ҡояшы, Ильич, һин булдың.
Бөтә ер йөҙөнә нурҙар һиптең,
Күк ҡояшы менән тиң булдың.
(«Ер ҡояшы»)

Башҡорттарҙа ғына түгел, ғомүмән, күп халыҡтар ижадында ыласын — ғәйрәтле һәм намыҫлы ир-егеттәрҙең символик образы. Совет осоронда иһә ул Ленингә ҡарата ла ҡулланыла. Мәҫәлән, беҙҙә шундай йыр бар:

Уралда ғына тауҙың ҡая ташын
Оя ғына иткән Ыласын.
Ленин бабай — беҙҙең, ай, Ыласын
Алып биргән Совет власен.

Был образдың яңы әкиәттәрҙә (мәҫәлән, «Таң атҡанда») урын алыуы ла ошо традицияға бәйләнгән. Бының йәнә бер асыҡ миҫалы — F. Усмановтың «Ҙур Ыласын» тигән әкиәте. Бында символик төҫтәге Ыласын образы, героик эпос һәм әкиәт традицияларына ярашлы рәүештә, ҡарға, сәүкә, һайыҫҡан кеүек ҡара көстәрҙе ҡыйратыусы итеп һынландырыла.

Сәсәндәр ижадында яңы кеше образы совет кешеһенең хеҙмәт активлеген һүрәтләүҙә лә бик асыҡ күренә. Был йәһәттән Ф. Дәүләтшиндең уңған ҡыҙҙарҙы данлаған «Fәлиә ҡыҙ бәйете» әһәмиәтле. «Ватан һуғышы бәйеттәре», «Ҙур көрәш» һәм башҡа әҫәрҙәрендә алдынғы кешеләрҙең актив характерен, юғары граждандыҡ тойғоларын һынландырып, сәсән бәйет жанрының яңы мөмкинлектәрен асты, уны, Ким Әхмәтйәнов башлап күргәнсә, «одаларға тартым мотивтәр менән һуғарҙы»[1].

Жанрҙың совет осоронда яңырыуы Сәһерйәр Муллабаев бәйеттәрендә тағы ла асығыраҡ күренә. Гел ҡайғы-хәсрәтте, ҡотолғоһоҙлоҡто йырлаған элекке һуғыш бәйеттәренән айырмалы рәүештә, Муллабаев бәйеттәрендә һәм, ғөмүмән, Бөйөк Ватан һуғышы бәйеттәрендә совет яугирҙәренең антҡа тоғролоғо, күмәк батырлығы йырлана. Улар, социалистик Ватан ҡаһармандары, ил-йортҡа ҡайғыла. Улар, социалистик Ватан ҡаһармандары, ил-йортҡа ҡайтыу юлының тик еңеү аша, Берлин аша булыуын асыҡ белә, шундай ситуацияларҙа ла шуға ышаныуын кәметмәй. Ватан һуғышы йылдарында яугир шағирҙәр ижадында ла киң урын алған ошо уртаҡ мотив[2] Муллабаевтың «Урал итәгенән Берлингә» тигән бәйетендә бына нисек әйтелә:

Урал итәгенән Берлингә бик-бик алыҫ, тинең.
Бына хәҙер мин Берлиндә, аралар бик яҡын беҙҙең.
Төштә түгел, мин өнөмдә хатты яҙам Берлиндән,
Тап ошонан илкәйемә иң яҡын ара икән.

Йәнә шуныһы, һәр кон үлем һағалап торған шарттарҙа ла совет һуғышсыһының бошонҡолоҡҡа бирелмәүе, үҙенең кешелек бәҫенә кер төшөрмәүе, тыуған тупраҡ һәм ғаилә тойғоһо, етдилек һәм шаянлыҡ Муллабаев бәйеттәрендә уҡыусының да күңелен күтәргән эстетик нурҙар булып балҡый.

Һөйөклө ил — социалистик Ватан яҙмышы хәл ителгән ауыр йылдарҙа башҡорт шағирҙәренең фольклор традицияларына, бигерәк тә ҡобайырҙарға кәүҙәләнгән героик образдарға, мөрәжәғәт итеүҙәре, Оло Рәсәй тураһында ата-бабалар һүҙен, изге васыяттарын иҫкә төшөроүҙәре билдәле. Сәйфи Ҡудаштың «Әсә йыры», Рәшит Ниғмәтиҙең «Әсә һүҙе» һәм «Үлтер, улым, фашисте!» ҡобайырҙары, һәр кемдең намыҫын уятып, ирмен тигән ирҙәрҙе изге яуға саҡырған тетрәткес шиғри оран булдылар. «1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлылары» һәм «Салауат батыр» исемендә легендалар һәм йырҙар йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты. М. Буранғоловтың «Икенсе әрме» һәм «Ҡаһым түрә» йыр-легендаларын героик эпос ҡалыбына һалған «Ватан һуғышы» ҡобайыры ла — ошо рәттә яҙылған әһәмиәтле әҫәр. Ҡобайыр 1812 йылғы Ватан һуғышында Наполеон баҫҡынсыларына ҡаршы башҡорттарҙы изге яуға дәртләндергән Байыҡ сәсәндең ялҡынлы һүҙҙәрен, ил, халыҡ азатлығы осон үҙҙәрен аямаған легендар һәм тарихи батырҙарҙы иҫкә төшөрөп, ата-бабаларҙың традицион ҡаһарманлығын, бөйөк рус халҡы менән тарихи дуҫлығын, уртаҡ Ватан тупрағында мөҡәддәс тойғоларын хәҙерге яугирҙәр өсөн юғары өлгө итеп ҡуйҙы.

Йәш быуында юғары әхлаҡ сифаттарын тәрбиәләү, әҙәпкә һәм ғилемгә, эшлеклелеккә һәм ижтимағи активлеккә саҡырыу — сәсәндәр ижадында борон-борондан килгән традицион йүнәлеш. Был уларҙың хатта төп бурысы һымаҡ. «Шиғри өндәмәләр» тип атарға мөмкин булған бындай әҫәрҙәр был китапта Фәррәх Дәүләтшин менән Сәйет Исмәғилевтә генә түгел, башҡа сәсәндәр ижадында ла ҙур урын ала.

Иң элек шуныһы күҙгә ташлана: шиғри өндәмә күбеһенсә кешенең актив тормош позицияһын яҡлау менән үрелә. Мәҫәлән:

Илеңдә һин етем түгел,
Күңелле тот үҙеңде;
Бәхет алға сығып тормай,
Эҙләп тап бәхетеңде.

Йәки:

Тормош юлыңды үҙең һал,
Белем алып, көсөң менән.
Алған белемең уртаҡлаш
Һәр эшеңдә илең менән.
(И. Смаков)

Тормошта актив йәшәүҙең сәбәп-сәбәбен F. Fәлиев кешенең өмөтө-дәрте, оло тойғолары менән бәйләй.

Өмөтлә дәрт ҡанат булыр егет, иргә,
Ҡанатлылар тиҙ етерҙәр йыраҡ ергә,—

ти ул һәм дәртле эшсәнлектең иң матур бер өлгөһө итеп ударниктәргә иғтибарҙы йүнәлтә:

Тәүәккәл дәрт, өмөт тулһа ирҙең эсе,—
Ударник кем?— тиһәң, тап ана шул кеше!
Ышанған үҙ-үҙенә ысын батыр йөрәк,
Ҡайҙа барһа уңышлылыр уның эше.
(«Өмөт — бәхет башы»)

«Бөтә ниғмәттән өҫтөндөр таҡыл-пур» тип башланған шиғырында шулай уҡ бик мәғәнәле иҫкәртеү яңғырай:

[1] Ким Әхмәтйәнов. Фәррәх сәсән.— Сәсән тауышы. Өфө, 1967, 7-се бит.
[2] Был хаҡта ҡарағыҙ: Нур Зарипов. Яуҙа тыуған шиғырҙар.— Окопта яҙылған шиғырҙар (Бөйөк еңеүгә 30 йыл тулыуға арналған йыйынтыҡ), төҙөүсеһе Fабдулла Байбурин. Өфө, 1975.

Егерменсе быуат бит был, онотма!
Егетлек дәрте булһа, һис бойоҡма!

Тарихте байҡап ҡараһаң, бында шундай бер законлы үҫеште лә күреп була: элек айырата дидактик ҡобайырҙарҙа ныҡ сағылған был традиция, XIX быуат ахыры һәм XX быуат башында мәғрифәтселек идеялары менән һуғарылып, яҙма шиғыр формаһын үҙләштерә башлай һәм яңы сифатҡа күсә. Быларҙың иң күркәм миҫалдары — Аҡмулла менән Мәжит Ғафури ижады. Октябрь революцияһынан һуң да бөтмәй әле ул,— киреһенсә, яңы форма, яңы йөкмәткелә дауам итә, сәскә ата. Егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа социалистик идеология ерлегендә ижад ителеп, әҙәбиәт ғилемендә «агитацион шиғырҙар» тип аталған әҫәрҙәрҙе уларҙың эстетик асылы менән шулай уҡ мәғрифәтселектең үҙенсә бер яңы күренеше тип ҡарарға мөмкин.

Әммә бында шуныһын айырып әйтеү кәрәктер, ахырыһы: егерменсе йылдарҙа ҡайһы бер кире шауҡымдарға юлығып, боронғоно бик се йылдарҙа ҡайһы бер кире шауҡымдарға юлығып, боронғоно бик һанламаған шағирҙәрҙе был юнәлеш йыш ҡына ҡоро өгөт-нәсихәткә ҡоролған шалтырауыҡлы шиғырҙар яҙыуға алып килә, ундай әҫәрҙәр хәҙерге зауыҡлы уҡыусылар тарафынан кире ҡағыла; әҙәби үҫештә күсәгилешлелек законын тәрән аңлаған талантлы шағирҙәр ижадында иһә халыҡсан дидактика, боронғо сәсәндәр сәнғәтендәгесә, афористик поэзия ҡалыбына һуғылып, милли үҙенсәлекле бер эстетик категория дәрәжәһенә күтәрелә. Быларҙың иң күркәм миҫалдарын халыҡ шағирҙәре Мостай Кәрим, Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа әҙиптәр ижадында табырға мөмкин.

Халыҡсан дидактика, әлбиттә, хәҙерге сәсәндәр ижадында бер поэтик кимәлдә түгел. Был тәңгәлдә фекер тослоғо, шиғри төҙөклөгө һәм поэтик образлылығы менән Ғатаулла Ғәлиевтең әҫәрҙәре айырата ҙур әһәмиәткә эйә. Ул донъяның зиннәттәрен асып күрһәтә, йәмғиәт үҫешендә кешенең ролен, кешене кеше иткән күркәм сифаттарҙы һүрәтләй. Сәсән хаҡлы: ундай сифаттарҙың иң кәрәклеһе — «ғаҡыл-нур, әҙәм затты әҙәм иткән ана шул».

Элекке донъяның күп етешһеҙлектәрен күргән сәсән «ғаҡылнур» һәм «ғилем-һөнәр»ҙең әҙәм балаһының үҙе өсөн генә түгел, ә халыҡ тормошон еңеләйтеү-яҡшыртыу өсөн, уның экономик һәм культура хәжәттәрен үтәүгә буйһондоролоп, артта ҡалған милләтте үҫтереү, алдынғылар менән тиңләштереү өсөн кәрәклеген әйтә:

Артҡа ҡалған милләт алға уҡып баҫыр,
Уҡымаған халыҡтарҙың хәле насар.
Йәш милләттең егеттәре ғалим булһа,
Үҙ халҡыны алға әйҙәп, ал-гөл яһар.

Тап бына ошо позицияла Ғ. Ғәлиев Мифтахетдин Аҡмуллаға яҡын тора, яңы заманда уның ҡараштарын дауам итә. Ләкин бында принципиаль айырма бар. Әгәр дини фанатизм хөкөм һөрөп, ғилемһөнәр өсөн тейешле шарттар булмаған ҡәһәрле заманда Аҡмуллаһың һәм башҡа мәғрифәтсе шағирҙәрҙең халыҡты аң-белемгә саҡырыуҙары бары изге теләк йәки, философтарға эйәреп әйткәндә, идеалистик ҡараш, ерлекһеҙ ынтылыш булыуҙан уҙмаһа, Коммунис-



тәр партияһы һәм Совет хөкүмәтенең практик хәстәрлеге менән бөтә халыҡ мәғарифе киң йәйелдерелгән заманда мәғрифәтселек социалистик йәмғиәттең үҙ тәбиғәтенән килеп сыҡҡан таланты хуплауға, уның тарихи үҫеш ихтыяждарын аңлауға бәйләнгән.

Әлбиттә, аңлау — бер нәмә, әммә уны сәнғәтсә сағылдырыу, шиғриәт теле менән әйтеп бирә белеү — икенсе нәмә. Ғатаулла Ғәлиевтең сәсәнлеге лә тап бына шунда күренә. Ул өгөт-нәсихәт уҡымай, ә фекерен шиғри телдә эҙмә-эҙлекле рәүештә үҫтерә, күңелгә үтмәле, зиһендә ҡалмалы поэтик образдарға һала, тормош-көнкүреш тәжрибәһен дөйөмләштергән афористик һығымталар яһай. Мәҫәлән:

Ал ғилемде, туймаҫ ғилмең күпләгенән,
Кемдә тапһаң, биҙмәгәйһең кәмлегенән:
Алтын тапһа, һәр кем ала шатлыҡ менән,
Ғәрләнмәйсә, бер ауылдың сүплегенән.

Ғилем — бөтмәҫ хазиналыр — урламаҫтар,
Эйәһенә зиннәттер ул — хурламаҫтар;
Дошмандарҙы еңергә ҙур ҡорал булыр,
Матди көстәр фәнгә ҡаршы торалмаҫтар.

«Ғилем хаҡында йәштәргә бер һүҙ» тип аталған ошо уҡ шиғырында автор уҡыусыны бер яҡтан иҫкәртеп ҡуйыуҙы ла кәрәкле һанай:

Ғалим — мин, тип баш күтәрмә, булма тирәк,
Булһаң да һин башҡаларҙан алғаш зирәк.
Емешле ағас һис ваҡытта баш күтәрмәҫ,
Емеш бирмәҫ тирәк булыу ниңә кәрәк?

Ғәлиев ижадында дидактик мотивтәр ана шундай образлы сағыштырыуҙар менән кеше характерендә яңы төр эстетик һыҙат булып һыҙатлана. Сәсәндең «Тел хаҡында», «Асыу хаҡында», «Һөйләшкәндә» һәм әхлаҡҡа ҡағылышлы башҡа әҫәрҙәре төрлө кешеләр холҡоп сәнғәтсә тасуирлап күрһәтеүҙәре, юғары әҙәпкә өйрәтеүҙәре менән ҡиммәт. Ҡыҫҡаһы, Ғатаулла Ғәлиевтең ҡайһы ғына әҫәрен алмайыҡ, һәр береһе күпте күргән аҡыллы сәсән һүҙе, хәҙерге заман талабы булып аңлашыла, ышандыра, күңелдәргә үтеп инеп, намыҫты уята, актив йәшәүгә дәртләндерә.

Сәсәндәр ижадында йәнә бер күркәм һыҙат — юмористик һәм сатирик әҫәрҙәр. Уларҙа ҡайһы бер кеше тормошондағы рухи кәмселектәр, атап әйткәндә,— эшлекһеҙлек һәм ялҡаулыҡ, көнсөлөк һәм хөсөтлөк, зауыҡһыҙлыҡ һәм дәртһеҙлек һәм башҡа төрлө әҫке ғәриплектәр юғары әҙәп һәм әхлаҡ күҙлегенән тәнҡит ителә: Вәлиулла Ҡоломбәтов «Ялҡау Мотой менән таraҡандар», Фәррәх Дәүләтшин «Алты ялҡау бәйете», Сәйет Исмәғилев мәҫәлдәре һәм «Ҡойһөҙ кейәү» менән «Ҡупшы ҡыҙ» шиғырҙары, Ислам Смаков менән Әсәҙулла Ғәтнәтуллиндең шаян йырҙары һәм таҡмаҡтары. Ғиниәтулла Усмановтың «Алдынғы колхоз менән эшлекһеҙ колхоз» тигән шиғри хикәйәһе контраслыҡҡа ҡоролған тарихи доҡоҫлоғо, тәнҡиттең үткерлеге менән әле лә идея-эстетик әһәмиәтен юғалтмаған төҫлө.

Комик йөкмәткеле әҫәрҙәр араһында Әсәҙулла Ғәтнәтуллиндең сатирик шиғырҙары («Алдаҡсы», «Ярар, бабай, ярар!», «Ярты кә-рәк» һ. б.) үҙенә башҡараҡ урын биләй. Уларҙа авторҙың йөрәген әрнеткән факттарҙың дөрөҫлөгөн уҡыусы үҙе лә раҫлай алырға мөм-кин. Ләкин эш унда ғына түгел. Сәсән шул кире күренештәргә ҡаршы тороплоҡ сара таба һәм, «Ҡарт» тигән шиғырында шуны нәҡ сәсәндәрсә мәрәкәләп һөйләп, башҡаларға ла аңғарта,— тимәк, шул сараны файҙаланырға саҡыра:

Бригадирҙең ҡыйыҡ эшен
Асып бирә халыҡҡа.
Урынлы тәнҡит иткәнгә
Тәбрик итә халыҡ та.

Халыҡтың үҙ араһында йәшәгән осло күҙле, үткер телле һүҙ оҫталарының образлы тәнҡите урындағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә ни тиклем ҙур роль уйнауы һәр кемгә мәғлүм.

Шулай итеп, революциянан һуң азатлыҡ тойғоһо һәм синыфһыҙ йәмғиәт идеалдары менән ҡеүәтләнгән сәсәндәр ижады яҙма әҙә-биәт менән бер идеологик платформала йәнәшә үҫә. Совет осоронда уларҙың икеһе лә эшсән халыҡҡа, уның эстетик аңын, юғары әхлаҡ һыҙаттарын тәрбиәләүгә хеҙмәт итә.

**Нур Зарипов,**
**Әхмәт Сөләймәнов**

# Әкиәттәр

## ИРЕКБАЙ

Борон-борон заманда
Бик алыҫта, бер илдә,
Байбурия ерендә
Йәшәгән, ти, бер ҡарт менән бер
ҡарсыҡ.
Үҙҙәре ҡартайып килгәндә,
Быларҙың булды, ти, бер ир балаһы.
Исемен ҡуштылар, ти, Ирекбай,
Бирҙеләр, ти, уға бер тай.
Был малай бик шәп үҫә,
Ай үҫәһен, кон үҫә,
Йыл үҫәһен, ай үҫә;
Һәр кем уға һоҡлана,
Һәр кем күреп шатлана,
Уйын уйнаған сағында
Бик яраткан сабырға.
Урмандарға барған ул,
Айыу, бүре атлапып,
Йортҡа ҡайтып ингән ул.

Йылдар илап уҙғанда,
Айҙар аяҙ булғанда,
Кондәр конләп йөрогәндә,
Ирекбайға ун биш тулғанда,
Хандан әмер килгән, ти:
«Һәр бер иргә, йәшкә-ҡартҡа,
Атланырға ҡара атҡа,
Юнәлергә тура утҡа!»
Был әмергә ил халҡы
Ҡурҡыу менән ҡараған,
Ирекбайҙы үҙҙәренә
Башлыҡ итеп һайлаған.
Ирекбай башлыҡ булғас:
— Был хандың әмеренә

Баш эймәгеҙ берегеҙ,
Ут ебәрһә илебеҙгә,
Йөҙ һытмағыҙ берегеҙ!
Илен утка тоторбоҙ,
Үҙен туҙан итербеҙ.
Китәм мин Ҡыҫҡыс ханға,
Ул тыныслык боҙмаһын,
Һис хәйләһен ҡормаһын! —
Тип ырғып менде тайға,
Сапты, ти, ҡарап айға.
Эй саба, ти, эй саба,
Саба ла саба торғас,
Осраған, ти, бер кеше.
Ҡырын яткан үләнгә,
Башын һалған бүкәнгә,
Төҫкә-башка йәш кеше,
Сабыу икән бар эше,
Исеме шуға — Саптаретдин.
— Мин Ирекбай буламын,
Ҡыҫҡыс ханға барамын.
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе ашаны,
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға.
Хәҙер барамын уға,
Көс һынашып ҡарарға!..
— Мине лә ал иптәшкә,
Бергә-бергә булырбыҙ,
Йомошондо тыңлармын,
Ҡоштар менән ярышһаң да,
Мин уларҙы уҙырмын,—
Тине, ти, Саптаретдин.
Шулай итеп, икәүләшеп
Саптылар улар алға,
Туп-тура ҡарап айға.
Эй сабалар, сабалар —
Энә буйы ер сабалар.
Саба ла саба торғас,
Осраттылар тағы кеше,
Атыу икән, ти, бар эше.
Елкәһендә йәйәһе,
Арҡаһында уктары,
Алтын икән остары.
Иҫәнлек-һаулык һорашкас,
Ирекбай:
— Һеҙ кем булаһығыҙ?
Теге кеше:
— Мин Уғатар булам, ағай,
Ә һеҙ кем булаһығыҙ?



Ирекбай:
— Был — Саптаретдин, минең юлдашым,
Ҡыҫҡыс ханға юл башым.
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе ашаны.
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға.
Хәҙер мин барам уға,
Көс һынашып ҡарарға.
Уғатар:
— Мине лә үҙегеҙ менән алығыҙ,
Һеҙгә кәрәк булырмын,
Күбәләктәй ҡошто ла
Күктән атып алырмын.
Саптаретдин шул арала
Ат килтерҙе Уғатарға.
Шунан былар өсәүләшеп
Эй сабалар, сабалар,
Эй сабалар, сабалар.
Саба торғас, быларға
Тап булған йәнә кеше,
Күл йотоу икән эше:
Күлдең һыуын йоткан да
Тобонә тошоп яткан.
Иҫәнлек-һаулык һорагас:
— Һеҙ кем булаһығыҙ? — тине Ирекбай.
Теге кеше:
— Мин Күлйотар булырмын,
Һеҙҙе кем тип танырмын?
Ирекбай:
— Былар минең юлдаштыр,
Һөнәрҙәре бик фаштыр,
Ҡыҫҡыс хандыр юлыбыҙ,
Байбурия еребеҙ.
Илгә әмер ташланы,
Күп ирҙәрҙе ашаны.
Етер инде ул ханға,
Туйындырҙы ерҙе ҡанға..
Хәҙер барам мин уға,
Көс һынашып ҡарарға.
Шунан Күлйотар:
— Мине лә алһағыҙсы,
Һеҙгә кәрәк булырмын.
Ҙур-ҙур күлдәр йотормон,
Күп балыктар тотормон;
Һеҙҙе ашка туйҙырырмын.

Саптаретдин күҙ асып йомғансы юк булды ла алма сыбар тоҫтә тағы бер тарпанды ҡыуып килтерҙе, ти.

Инде былар дүртәүләшеп
Киттеләр, ти, сабышып,
Берен-бере уҙышып.
Саптылар, ти, гел алға,
Туп-туры ҡарап айға.
Эй саптылар, саптылар,
Эй саптылар, саптылар.
Саба торғас, барып былар
Еттеләр бер сахра ергә.

Бында ҡоштар һайрайҙар,
Төрлө кейектәр олойҙар,
Бер ҡараһаң, матурлыҡ,
Бер ҡараһаң, ҡурҡырлыҡ:
Арыҫландар аҡыра,
Зубрҙары баҡыра.

Көн кис булып киткәнгә,
Шунда ҡунмаҡ булдылар,
Бергәләшеп өҫөһө
Утын ташып яҡтылар.
Уғатар китте һунарға,
Саптаретдин сапты үгеҙ һуйырға,
Күлйотар ҡалды ҡаҙан аҫырға,
Ирекбай ҡалды ҡыуыш яһарға.
Саптаретдин алып килде бер үгеҙ,
Иҫ киткес инде һимеҙ.
Уғатар ҙа саҡ күтәреп
Алып килде өйрәктәр,
Матур-матур дүдәктәр.
Ирекбай ҡыуыш яһаны,
Күлйотар аш өлгөрттө.
Ашты тәмләп ашағас,
Батырҙар ҡаты йоҡлап
Киттеләр, бик нык арығас.

Иртән тороп таң менән,
Саптылар фарман менән.
Эй саптылар, саптылар,
Саба ла саба торғас,
Етәләр таш ҡалаға —
Буялған гел ҡараға.

Ҡыҫҡыс хан шунда йәшәй икән,
Таш кәртәһе нык икән.
Инә алмайҙар батырҙар,
Кәңәш ҡороп ҡарайҙар.
Шул арала Ҡыҫҡыс хан
Йыйҙырҙы, ти, ҙур майҙан.



Йыйҙырғастын ҙур майҙан,
Уҡтарын да туптарын
Осорорға ҡушты, ти,
Һәр батырҙың башына
Бер ҡыҙ бирмәк булды, ти.

Шунда һуғыш башланған.
Йәҙерәләр ташланған.
Ә батырҙар тегеләрҙең
Өҫтәренә ташланған.
Хан йыйған барлыҡ косон:
Бер ҡапҡаһынан көтөү-көтөү филдәр сығара,
Бер ҡапҡаһынан көтөү-көтөү арыҫландар сығара,
Берәһенән — ҡараптар менән туптар,
Берәһенән — меңләп-меңләп һалдаттар,
Бары ла ҡылыс таҡҡан, тимер кейемле!
Ҡулдарында — һөңгө,
Әйтерһең дә, урман ҡороған был ерҙә!

Шунан ҡаланың дүрт яғынан дүрт батыр
Тотондолар ҡырырға шатыр-шотор:
Ирекбай ҡылыс менән турай һалдаттарын,
Саптаретдин түшәп һалды һөңгө менән филдәрен.
Күлйотар ос уртлауҙа күлде йотоп,
Уғатар ҡыҙыл ҡомға ҡушып, аҡтар
Ултыртты ҡомға кәмәләрен.

Хан ғәскәрен еңгәс, батырҙар
Дүрт ҡапҡанан инделәр баҫып,
Ҡыҫҡыс хандың һарайын ватып,
Үҙен дә ебәрҙеләр атып.

Батырҙарҙың был эшенә
Халыҡтар бик шатланды.
Күрер өсөн бөтәһе лә
Таш ҡалаға ташланды.

Ирекбайҙар ҙур майҙанда
Башлыҡ булып танылды,
Бына шунан һуң ғына
Иркен тормош ҡоролдо.

## ЙӘЛӘЛ БАБАЙҘЫҢ БӘХЕТ ТАБЫУЫ

Борон-борон заманда, илдә батшалар хөкөм һөргән ваҡытта, бер ауылда Йәләл исемле бер ҡарт бабай йәшәгән. Ул бик ярлы булған. Һауырға кәзәһе лә булмаған уның.

Йәләл бабайҙың өс улы булған. Былар өсөһө лә таҙа, батыр, көслө булғандар. Берҙән-бер көндө Йәләл бабай өс улын үҙ янына саҡырып ала ла:

— Минең ишетеүемсә, бик алыҫта, ҙур тауҙар, урмандар, һыуҙар артында, бер тау бар икән, шул тауҙы барып ҡаҙған кеше бәхет таба икән, — ти. Шул саҡ Йәләл ҡарттың оло улы сығып:

— Мин ул тауға барам, бәхетте тапмайынса илгә ҡайтмам,— тигән.

Оло улы бәхет эҙләргә тип юлға сыҡҡан. Егет ҡуйы урмандар, иң ҙур һыуҙар, бейек тауҙар үткән. Бәхет тауын барып тапҡан. Еңдәрен һыҙғанып, тауҙы ҡаҙған, таштарҙы ватҡан. Ете көн, ете төн буйына арымай-талмай бәхет эҙләгән. Һигеҙенсе көн егет әҙәм башы ҙурлығы алтын тапҡан. «Атай әйткән бәхетебеҙ ошолор инде»,— тип, шатланып, алтынды күтәреп алған. Шул саҡ тау эйәһе ажғырып килеп сыҡҡан да егеткә:

— Ни йөрәгең етеп минең байлығымды алырға килдең? — тигән. Егет:

— Мине атайым бәхет эҙләргә ебәрҙе,— тигән.— Бына таптым да алып ҡайтам,— тип яуап биргән. Егет менән тау эйәһе ер һелкетеп алышҡандар. Бер әмәл дә ҡалмағас, тау эйәһе асыуынан тауҙы аҡтарып ташлаған. Егет тау аҫтында һәләк булған.

Йәләл бабай оло улын айҙар, йылдар буйы көткән. Ләкин ҡарттың оло улы әйләнеп ҡайтмаған, хәбәрһеҙ ғәйеп булған.

Берҙән-бер көндө батша илгә фарман таратҡан. «Илдә бәхетһеҙ кешеләребеҙ бар икән. Дарья кеүек күп халыҡҡа бәхет етмәй. Ул бәхет сит ил батшаһы ҡулында. Уны һуғышып алырға кәрәк. Илдең бөтә ир-егеттәре ҡоралланып күрше батшаға ҡаршы һуғышҡа барһындар, үҙ батшаларына ярҙам итһендәр. Шул саҡта ғына бөтә бәхетһеҙҙәр бәхетле булыр»,— тигән.

Йәләл бабай был хәбәрҙе ишеткәс, уртансы улын үҙ янына саҡырып алған.

— Улым, беҙҙең бәхет сит ил батшаһы ҡулында икән, шул бәхетте барып алыу өсөн батшабыҙ илдең бөтә арыҫлан егеттәрен йыя икән. Һин дә бар әле! — тигән. Йәләл бабайҙың уртансы улы, ата һүҙен тыңлап, һуғышҡа киткән. Был бик ҡаты һуғыш булған. Әҙәм баштарынан тауҙар өйөлгән, ҡандарынан йылғалар аҡҡан. Айҙар үткән, йылдар үткән. Йәләл бабайҙың уртансы улы ла ҡайтмаған. Шул һуғышта үлеп ҡалған.

Ике улы бәхет эҙләргә китеп ғәйеп булғас, Йәләл бабай кинйә улын эйәртеп үҙе сығып киткән. Ете көн, ете төн барғандар, һигеҙенсе көн бер батыр осратҡандар.

— Ҡайҙа бараһың? — тип һораған ул. Йәләл бабай туҡтаған да:

— Бәхет эҙләргә барам, ике улым шуның артынан китеп, ғәйеп булды. Һаҡалым ағарғансы бәхет күрмәнем. Ҡарт көнөмдә булһа ла, шул бәхетте табайым тип сыҡҡайным. Ҡайҙа икән ул? — тигән. Шул саҡ теге батыр:

— Күпте күргән кешегә оҡшайһың. Һеҙ эҙләгән бәхет бар, ул үҙ ерегеҙҙә. Ләкин уны алыу еңел түгел. Үҙең менән улыңдың ғына көсө етмәҫ: һеҙҙең бәхетегеҙ ете башлы аждаһа ҡулында. Һин илгә



ҡайт, бөтә бәхетһеҙҙәрҙе йый. Ҡоро ҡул менән дә алып булмай. Бөтә ҡоралдарығыҙҙы алып бөтә илегеҙ менән яу булып килегеҙ,— тигән.

Йәләл бабай кинйә улы менән иленә кире ҡайтҡан. Ҡайтҡан юлында һәр ауылға инеп һөйләп барған. «Бәхетһеҙҙәр, ярлылар, бәхет алырға йыйылығыҙ! Батыр егет алтын аҡыл өйрәтте: беҙҙең бәхет сит илдә түгел, үҙ еребеҙҙә, ете башлы аждаһа ҡулында икән»,— тигән.

Һәр ауылда Йәләл бабай һүҙен йотлоғоп тыңлағандар. Бәхетһеҙ ярлылар һәнәктәрен, балталарын, салғыларын тотоп, Йәләл бабайға ҡушыла барғандар. Шулай итеп, бөтә ил йыйылған. Халыҡ бөтә ил булып ете башлы аждаһа ҡулынан бәхетте тартып алырға күтәрелгән. Улар үткән ерҙә күк күкрәп, йәшен йәшнәп, тау тетрәп, урман шаулап ҡалған.

Бәхетте үҙ ҡулында йәшереп тотҡан аждаһа менән ете көн, ете төн алышҡандар. Һигеҙенсе көндә аждаһаның ете башын етегә өҙгәндәр, тураҡлап бөтөргәндәр. Бөтә халыҡ бәхет алған. Аждаһа биләп торған ер, урман, һыу халыҡ ҡулына ҡалған. Көн яҡтырып киткән. Бар ил шатланған.

Ете башлы аждаһаның етегә тураҡланған тәнен күргәс, ер йөҙөндәге аждаһа-йыландар ояларынан сыҡҡандар.

Йәләл бабайға алтын аҡыл өйрәткән батыр был йыландарҙың ояларынан сыҡҡанын бик алыҫтан күргән. Йәләл бабайҙы эҙләп тапҡан да:

— Һаҡ булығыҙ, ил булып, үҙ бәхетегеҙҙе күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағыҙ!— тигән. Йәләл бабайға бер ҡылыс биргән.— Аждаһаларҙың иң ҙурыһын ошоноң менән сабып үлтерерһең,— тигән.

Батыр әйткән һүҙ дөрөҫ булған: аждаһа-йыландар Йәләл бабайҙың бәхетен алырға һыуҙан да, тауҙан да, урмандан да үрелгәндәр. Улар килгән ерҙән һыу ҡорой, үлән кибә икән. Үтелгән юлдарында көл генә ҡалған.

Халыҡ бәхетте һаҡларға күтәрелгән. Йәләл бабай йән дуҫтарын йыйған, үҙ ояһын һаҡлаған арыҫлан кеүек, бәхетен һаҡлаған. Был алыштар бик дәһшәтле булған. Ҡан дарья булып аҡҡан, тау-тау мәйеттәр өйөлгән. Айҙар, йылдар алышҡандар. Аҙаҡ килеп, аждаһалар-йыландар еңелгәндәр. Ҡайһыһының башы өҙөлгән, ҡайһыһының муйыны һынған. Йәләл бабай үҙе алтын аҡыл өйрәткән батыр биргән ҡылыс менән аждаһаларҙың иң ҙурҙарын сапҡылап үлтергән. Шулай итеп, халыҡ бәхетен күҙ ҡараһы кеүек итеп һаҡлаған.

Киң ҡырҙар тулы ашлыҡ үҫкән, урман йәшәргән, алмалар, хөрмәләр бешкән. Халыҡ бик күңелле рәхәтлектә йәшәгән.

Рәхәт йәшәгән халыҡ берҙән-бер көн тәрән ҡайғыға ҡалған. Халыҡҡа бәхет алыуҙа алтын аҡыл өйрәткән һәм уны ҡаты һуғышҡа алып барған батыр үлгән. Бөтә ил ҡайғырған, ҡарттар, әбейҙәр, ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, егеттәр, балалар — барыһы ла илағандар. Йәләл ҡарт бигерәк тә ҡайғырған.

Ул үҙ ғүмерендә иң ҡәҙерле кешеһен юғалтҡан. Был батыр атаһан да яғымлы булған. Бөтә ил халҡы бер ауыҙҙан:

— Был батырҙы ергә күмдермәйек, аҫыл таштан йорт һалдырып, шунда ҡуяйыҡ, беҙгә ғүмерлек бәхет биреүсе батырҙың кәүҙәһен мәңге һаҡлайыҡ,— тигәп. Батырға иң ҡиммәтле таштан йорт һалғандар, кәүҙәһен бик ҡәҙерләп шунда ҡуйғандар.

Был батырҙың үҙе үҫтергән, йән яратҡан, иң яҡын серҙәше булған. Ул да үҙе кеүек үк батыр булған. Ҡаһарман-батыр менән һуңғы хушлашыу һүҙен әйтеү өсөн ил халҡы йыйылған. Шунда оло батырҙың яҡын дуҫы сығып ант иткән:

— Беҙ ҡаһарман-батырҙың һүҙҙәренә ел дә тейҙермәбеҙ, уның алып биргән бәхетенә саң - да ҡундырмабыҙ,— тигән.— Ер йөҙөндә беҙҙең дуҫтарыбыҙ ҙа, дошмандарыбыҙ ҙа бик күп. Беҙҙең бәхетле булыуыбыҙ өсөн дуҫтарыбыҙ шатлапа, дошмандарыбыҙ ҡайғыра,— тигән.— Бәхетебеҙҙе мәңге һаҡларбыҙ, ботә йыһанда күренеп торһон өсөн, алтын хәрефтәр менән мәңгелеккә яҙып ҡуйырбыҙ,— тигән.

Йәләл бабай бәхеттең ҡәҙерен белгән. Батыр алып биргән ерҙәргә тултырып иген сәскән, урмандарҙы һаҡлаған, ботә күңелен һалып, тырышып эшләгән. Берҙән-бер көн ҡаһарман-батырҙың йән дуҫы, икенсе батыр, Йәләл бабайҙы үҙ янына саҡырып алған. Бәхеттең ҡәҙерен белеп һаҡлағаны өсөн бик күп бүләктәр биргән.

— Аждаһаларға, йыландарға ҡаршы бергә алыштыҡ, хәҙер ботә илде гөл итербеҙ, бергә йәшәрбеҙ,— тигән.

Йәләл бабай әле лә иҫән-һау, ти. Уның кинйә улы үҡып, бик ҙур кеше булып еткән, ти. Йәләл бабай үҙенә алтын аҡыл өйрәткән батыр биргән ҡылысын ныҡ һаҡлай, ти. «Үлгәнсе һуғышһам һуғышырмын, тик бәхетте һис бер кемгә лә бирмәмен!» — тип әйтә икән, ти.

## ӨС БАТЫР ӘКИӘТЕ

Был ерҙән таш атып таш етмәҫ, атланып ат етмәҫ урында, тау буйында — урманда, күл буйында — яланда бер ҡарт йәшәгән, ти. Уның бесәйенән башҡа мал-тыуары, ярға һеңгән землянкаһынан башҡа ҡаралтыһы булмаған. Ҡарсығы уға өс малай табып биргән дә үлеп киткән. Ҡарт малайҙарҙы, ни тапһа — шуны ашатып, ни бар — шуны кейендереп, ҡарап үҫтергән.

Малайҙар бик теремек булғандар. Ямғыр яуғанда ла, ҡояш балҡығанда ла, ел иҫкәндә лә үҫкәндәр. Улар атаһы менән һунарға йөрөр булғандар. Урманда йәнлек аулап, тауҙа ҡош атып, күлдә балыҡ тотоп көн иткәндәр улар.

Ҡартлыҡ баҫҡанға, күп нужа күргәнгә, ҡарттың таҙалығы бик самалы булған. Малайҙары егет булып килгәндә генә, ул ныҡлап ауырып киткән. Үлер алдынан малайҙарын саҡырып алған да былай тигән:

— Уландарым, мин һеҙҙе бәхетле яһай алманым. Ул бәхетте мин үҙем дә күрмәнем. Һеҙгә мираҫ итеп ҡалдырыр нәмәм дә юҡ. Оло улым, һиңә ана шул ҡуйы урман ҡала. Уртансы улым, һиңә ана шул бейек тау ҡала. Кинйә улым, һиңә ана шул киң ялан ҡала. Тағы бер васыятым бар: дуҫ менән дошманды, дороҫлоҡ менән ялғанды, яҡшылыҡ менән яуызлыҡты айыра белегеҙ. Йорогоҙ, донъя гиҙегеҙ. Юлдарығыҙ айырылыр, ләкин һеҙ уны һуңынан ҡушырға тырышығыҙ. Айырылған юлдарығыҙ бергә ҡушылған ерҙә бәхет табырһығыҙ. Шул ваҡытта ботә илгә бәхет килер.

Шул һүҙҙәрҙе әйткәс, ҡарт оҙаҡ та тормай үлеп киткән.

Малайҙар бары менән яҡшылап аталарын ерләгәндәр ҙә, һунарға йөрөй торған уҡ-һаҙаҡтарын алып, ил гиҙергә сығып киткәндәр. Ай киткәндәр, йыл киткәндәр. Бер юл сатына еткәс, хәл алырға туҡтағандар. Юл сатында өс көн, өс төн йоҡлап хәл алғас, иң олоһо тороп һүҙ башлаған:

— Йә, туғандар, инде беҙҙең юлдар ошонан айырыла. Һәр бер айырылған юл кире ҡушылмай. Ләкин беҙҙең юлдарҙың айырылған ере булған кеүек ҡушылған ере лә булырға тейеш. Атайым ҡушҡанса, юлдарыбыҙ бергә ҡушылғанға тиклем йөрөргә кәрәк.

Туғандар хушлашалар ҙа, айырылған юл сатлығына һоңғо ҡаҙап ҡалдырып, һәр ҡайһыһы үҙ юлына юнәләләр, ти.

Иң олоһо, атаһының васыяты буйынса, урман юлы менән киткән. Ағас һанап, йәнлек аулап бик күп йорогән, ти, ул. Етмәгән ере, баҫмаған ҡыуағы ҡалмаған уның. Шулай йөрөй торғас, кондәрҙең берендә кешеләр торкөмө янына барып сыҡҡан, ти, был.

— Әйҙә, хуш килдең, урман батыры! — тип бик яҡшы ҡаршы алғандар уны.

— Һеҙ кемдәр? — тип һораған теге егет.

— Беҙме? Беҙ — дуҫтар,— тип яуап биргәндәр быға.

Былар йыйылыш яһап яталар икән. Аранан береһе: «Дошманға ҡаршы яуға сығайыҡ»,— тип һөйләй, ти. Теге егет һикереп торған да:

— Ә кемдәр һуң дошмандар, кемдәр дуҫтар? — тип һораған.

— Дошмандармы? Дошмандар — байҙар, буржуйҙар, кеше көсө менән көн итеүселәр, ә дуҫтар — бына беҙҙең кеүек бер нәмәһе лә юҡ кешеләр,— тип яуап биргәндәр теге егеткә.

Былар эшсе-большевиктәр булып сыҡҡандар. Буржуйҙарҙы ҡырып бөтөроү, революция яһау тураһында һөйләшәләр икән улар. Шунан был егет тә уларға ҡушылып бергә яуға киткән, ти.

Ҡарттың икенсе улы, атаһы ҡушҡанса, тау юлы менән киткән. Ул ҡош атып, тау ярып, таш ватып күп йорогән, ти. Шулай бер саҡ ул, тау аҡтарып, алтын сығарыусы шахтерҙарға тап булған.

— Хуш киләһең, тау батыры! — тип ҡаршы алғандар уны шахтерҙар.

— Һеҙ дуҫмы, дошманмы? — тип һораған егет.

— Беҙ — дуҫтар,— тип яуап биргәндәр тегеләр. Шунан егетте ҡунаҡ итеү өсөн үҙҙәренең ҡыуыштарына алып киткәндәр. Барғас, егет ни күҙе менән күрһен — землянкалағы халыҡтар армияларын кеүек теҙелеп торалар, ти. Аранан береһе алға сыҡҡан да: «Беҙ дороҫлоҡ өсөн көрәшергә тейешбеҙ!» — тип һөйләй, ти. Шунан теге егет югереп барған да:

— Әйт әле, дуҫ, дороҫлоҡ ҡайҙа ла, ялған ҡайҙа? — тип һораған.

— Дороҫлок эшселәр яғында большевиктәрҙә, ә ялған дошмандарҙа, байҙар, буржуйҙар яғында,— тип яуап биргәндәр, ти.

Был — большевик комиссар булып сыккан. Шахтерҙарҙан отряд ойоштороп, байҙарға ҡаршы яуға сығырға торалар икән улар. Шунан теге егет тә улар менән барырға теләүен әйткән. Уны ла алғандар, ҡорал биргәндәр, бергәләп һуғышка киткәндәр.

Атаһы ойрәтеүенсә, ялан юлы менән киткән өсонсо туғандары баҫыуҙарҙы гиҙеп йорой-йорой бер ауылга барып сыҡкан.

— Хуш киләһең, ҡыр батыры,— тип ҡаршы алғандар быныһын да.

Егет уларға ниһә, күрә: урам тулы халыҡ, сходка йыйылғандар, ниҙер тикшереп яталар, ти. Алдараҡ торған берәүһе бик шәп итеп доклад һөйләй, ти: «Ғәҙел тормош булһын өсон, беҙгә яуызлыҡҡа ҡаршы көрәшергә кәрәк!» — тип әйтә, ти.

Егет уға яҡын уҡ килгән дә:

— Нимә һуң ул ғәҙеллек, ҡайҙа ул? Яуызлыҡ нимә? — тип һорау биргән.

— Яуызлыҡмы? Яуызлыҡ — кеше иҫәбенә йәшәү, кешене яфалау була, байҙар шулай итәләр. Ә ғәҙеллек кешегә азатлыҡ биреү була, ғәҙеллек беҙҙең яҡта,— тип яуап биргән теге доклад һөйләүсе кеше.

Ул большевик-агитатор булған, ярлыларҙы, крәҫтиәндәрҙе ойоштороп, яуызлыҡҡа, байҙарға ҡаршы һуғыш асырға саҡырған. Шунан ауылдағы крәҫтиәндәр дружина булып ойошкандар. Теге егет тә уларға ҡушылған. Улар ҡорал алып яуға киткәндәр.

Шулай итеп, өс туған өсөһө өс яҡтан дошманға ҡаршы һуғышып йөрөгәндәр. Бик теремек булғанға, уңғанлыҡ һәм батырлыҡ күрһәткәнгә, бара-бара уларҙың өсөһөн дә командир итеп һайлағандар. Береһе Себер яғында, икенсеһе Кавказ яғында, өсөнсөһө Украина яғында һуғышкан. Йән аямай һуғышып, дошманды өҙгөләп, юҡ иткәндәр. Дороҫлок яғында тороусы эшсе-крәҫтиәндәрҙән яңы власте төҙөп ебәргәндәр.

Дошманды ҡыйратып, улар Мәскәүгә йыйылғандар. Шунда уларҙың айырылған юлдары бергә ҡушылған. Шунан һуң Мәскәү ҡалаһы өҫтөндә, күк ҡабағы кеүек нур сәсеп, биш ҡанатлы йондоҙ күтәрелгән. Ул йондоҙ — бәхет йондоҙо булып сыҡкан. Шул йондоҙ нурынан һуҡырҙар күрә башлағандар, телһеҙҙәр телгә килгәндәр. Тау кеүек байлыҡ ишелгән, диңгеҙ кеүек бәхет йәйелгән, ғәҙел, рәхәт тормош килгән.

Ә теге өс туған әле лә иҫәндәр, ти. Ана шулай герой булып дан алғандар, ти, улар; рәхәт һәм шат тормош көтәләр, ти.

## ЕЛБИҘӘК МЕНӘН ИЛГИҘӘР

Борон заманда, беҙ әсәнән яңы ғына тыуғанда, йәштәр уйын ҡорғанда, ҡарттар билен бөкөрәйтеп һуҡа һөргәндә, йәшәгән, ти, бик ҡарун бер бай кеше. Ул иге-сиге булмаған мал аҫыраған, ти. Малдарын кем дә кем юғалта, ул шуның башын киҫкән, ти. Бына



шул байҙа ике етем бала котоу коткән. Уның береһе — ҡыҙ, Елбиҙәк исемле, икенсеһе — ир бала, Илгиҙәр исемле булған, ти.

Улар бик йәш булһалар ҙа, үҙҙәре күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы-хәсрәт сиккәндәр, ти. Иләкләп-силәкләп ямғыр яуғанда ла, малдарҙы алып ҡайтмағандар, ти. Бик алып ҡайтырҙар ине лә — байҙың яфалауынан ҡурҡҡандар.

Бына бер көндө, шулай, бүреләр котоүгә ташланғандар ҙа һарыҡтарҙы яралағандар. Етемдәр, нимә эшләргә лә белмәйенсә аптырашып, үкһеп-үкһеп илағандар. Күҙ йәштәренән күлдәр хасил булған, ти.

Ҡояш баткас, ҡараңғы төшкәс кенә улар малдарҙы алып ҡайтҡандар. Бай, малдарҙы һанап ҡараһа, унлап һарығы тулмай, ти. Шуның өсөн бай уларҙың һәр береһенә һарыҡ башына унар ҡамсы һуҡкан да, ашатмай-эсермәй, һарыҡ башына — бер йылдан ун йылға төрмәгә ябып ҡуйған, ти. Көнлөк аштары бер кружка һыу,бер ҡыйырсыҡ ҡына икмәк булған, ти.

Айҙар үткән, йылдар үткән, төрмәнән сыҡҡанда Илгиҙәр ун һигеҙ йәшкә, Елбиҙәк ун алты йәшкә еткән, ти. Улар әлек эшләгәндәре өсөн хаҡ һорап ҡараһалар ҙа, бай уларға һуҡыр бер тин дә аҡса бирмәгән. «Яҡшы саҡта китеп ҡалығыҙ, юғиһә башығыҙҙы киҫеп, ҡаҙыҡ башына элеп ҡуйырмын»,— тигән, ти. Шунан һуң Илгиҙәр ҙә, Елбиҙәк тә баштарын эйеп сығып киткәндәр. Үҙҙәренең күҙ йәштәренән хасил булған күлгә барып еткәндәр икән, ни күҙҙәре менән күрһендәр — күл буйында ҡамыштар, бер-береһен ҡосаҡлап, талдар үҫкән, ти. Өйрәктәр баҡылдап, тәлмәрйендәр баҡылдап, балыҡтар йылт-йылт итеп уйнап йөройҙәр, ти.

— Һеңлем, кис булып бара, ошонда ғына ҡунайыҡ,— тигән Илгиҙәр. Һеңлеһе риза булған.

Кискелеккә һыу эскәндәр ҙә былар шунда йоҡларға ятҡандар. Елбиҙәк йоҡоға киткәс тә төш күргән, ти. Төшөндә уның янына кесерәк кәүҙәле бер бабай килеп сыҡкан. Күҙҙәрен серле рәүештә ҡыҫа төшөп, көлөмһөрәп ҡарап торған да бик ягымлы итеп һөйләй башлаған:

— Һеҙ бик йәшләй күп ауырлыҡ күрҙегеҙ, ауыр эштә эшләнегеҙ, ни тиклем генә эшләһәгеҙ ҙә, тамағығыҙ туҡ булманы, өҫтөгоҙ кейем күрмәне. Әйе, байға эшләп бәхет табып булмай шул. Һеҙ үҙегеҙ өсөн эшләргә, үҙ бәхетегеҙҙе табырға тейешһегеҙ,— тип әйтте, ти, был. Шунан серҙе асты, ти.— Бәхет эҙләй торған юлда алтынлап һалынған, алтын көмбәҙле һарайҙар, көмөштән һалынған йорттар, баҡырҙан һалынған амбарҙар, икһеҙ-сикһеҙ байлыктар булыр. Уларҙы һеҙгә бирмәҫтәр, бирмәһәләр, кос менән алығыҙ,— ти. Аҡыллы ҡарт шунда Елбиҙәккә бер усма сыбыҡ бирә.— Мә, бына ошо сыбыҡтарҙы һындырып күрһәт әле,— ти.

Елбиҙәк сыбыҡтарҙы берәм-берәм һындырып бөтөрә. Һынған сыбыҡтар шунда уҡ кире ялғаналар. Теге бабай сыбыҡтарҙы бергә ҡушып бәйләй ҙә яңынан ҡыҙға тоттора:

— Хәҙер бөтәһен дә бер юлы һындыр инде,— ти.

Ҡыҙ һындырып ҡарай, һындыра алмай. Шунда уянып китә. Илгиҙәрҙе уята ла төшөн һөйләп бирә. Был төштө һөйләгәс, Илги-

ҙәрҙең байҙа нитегеп котоу көткәндәре, төрмәлә ятҡандары бер-бер артлы күҙ алдынан үтәләр. Оҙаҡ ҡына уйлаһын ултыра ла, Елбиҙәккә ҡарап:

— Ул бабай сыбыҡтарҙы ниңә бәйләп бирҙе икән? Их, ниңә уның һүҙен котмәнең икән? — ти.— Ярай, беҙ уны эҙләйек, бәлки, табырбыҙ,— ти.

Үҙҙәренең күҙ йәштәренән йыйылған күлгә «Хәсрәт күле» тип исем ҡушалар ҙа былар, урындарынан тороп, юлға сығып китәләр. Ете көн, ете төн үтә. Әлек үҙҙәре котоу көткән бай йортона килеп етәләр. Елбиҙәк тышта ҡала, Илгиҙәр йортҡа инеп китә. Рохсәтһеҙ килеп инеүсегә бай, аяҡ тибеп:

— Кем рохсәте менән индең? Сығып кит! — тип ҡысҡыра.

— Аҡырма, бай ағай, котоу көткән өсөн беҙгә тейешле хаҡты бир,— ти егет.

— Бирҙем бит инде... Ун йыл буйы төрмәлә ултырттым. Һарыҡ башына ун ҡамсы һуҡтым,— ти бай.

Илгиҙәр, ғәйрәтләнеп:

— Үҙең белеп бирмәһәң, тартып алам, — тигән икән, бай шөрләп ҡалған, ти. Был ваҡытта Илгиҙәр байға килеп эшләй башлағандағы кеүек көсһөҙ булмаған инде, ә киң күкрәкле, ҡалын беләкле, типһә тимер өҙөрлөк егет булған, ти.

Бай ниşләргә белмәгән:

— Беҙҙә ҡал, ҡатын алып бирермен, һеңлеңә кейәү табырмын, һыйыр, ат бирермен,— тип ҡараһа ла, Илгиҙәр риза булмаған:

— Түләрһең әле,— тип сыҡҡан да киткән, ти.

Улар тағы ете көн, ете төн барғандар. Ете юл сатлығына килеп сыҡҡандар икән, шунда ете төрлө яҙыу күреп, аптырап ҡалғандар. Бында шулай тип яҙылған, ти:

— Был юлдан киткән кеше ҡайтмай.
— Был юлдан киткән кеше бәхет таба.
— Был юлдан киткән кеше бәхетһеҙ ҡала.
— Был юлдан киткән кеше байлыҡ таба.
— Был юлдан киткән кеше олошһоҙ ҡала.
— Был юлдан киткән кеше ғазап сигә.
— Был юлдан киткән кеше һөнәр таба.

Бик оҙаҡ уйлап торғандан һуң, Илгиҙәр менән Елбиҙәк бер фекергә килделәр, ти. Ҡыҙ,— ауыр булһа ла ағаһынан айырылып, һөнәр өйрәнеү юлынан, Илгиҙәр ғазап сигеү юлынан китте, ти.

Ҡыҙ үҙ юлы менән китә торһон, беҙ Илгиҙәрҙең нисек ил гиҙеп йөрөүен һөйләйек әле.

Илгиҙәр ил гиҙеп көн китте, төн китте, ай китте, ти, бара торғас, өйрәк урядник, һайыҫҡан сотник, толкө шотник, ҡарға ҡарауыл, күгәрсен ҡуҙәтеүсе булып, һарыҡтар менән бүреләр бергә йөрөгән илгә барып сыҡҡан, ти. Бер йортҡа барып инһә, бер генә ҡортҡа ултыра, ти. Илгиҙәр барып ингәс тә сәләм бирҙе, ти.

— Һауығыҙмы, әбей?

— Һау әле. Ни эшләп йөрөйһөң, улым? Һин ғазап сигә торған юлға килеп ингәнһең бит. Бар, кире ҡайтып кит. Юғиһә был илдәрҙә башың әрәм булыр,— тигән ҡарсыҡ.



— Ғазап сикһәм сигермен, әбей, әммә аҡыллы ҡартты табмайынса кире ҡайтмам,— тигән Илгиҙәр.

— Ниндәй аҡыллы ҡарт һуң ул? — тип һораған ҡарсыҡ.

Илгиҙәр шунан һуң үҙенең байҙа нитегеүҙәрен, ун йыл буйы төрмәлә ултырыуын, байҙан сығып китеүҙәрен, һеңлеһе булыуын, уның тош күреүен — ботәһен дә бөйнә-бөйнә һөйләп биргән. Шунан һуң әбей уға:

— Изге юлда йөрөйһөң икән, балаҡайым,— тип көҙгө менән тараҡ биргән.— Улым, артыңдан ҡыуа башлаһалар, башта көҙгөнө ташла: ул дарья булыр; тағы ҡыуһалар, тарағыңды ташла: ул урман булыр. Шулай итеп, дошмандан ҡасып ҡотолорһоң,— тигән, ти.

Илгиҙәр ошо әбей өйөндә йоҡлаған да тағы юлға сығып киткән. Бара торғас, матур ағаслыҡҡа барып еткән. Бер өйгә барып ингән. Бер ҡыҙ ҡаршы сыҡҡан:

— Әй егет! Был илдәргә нишләп килеп сыҡтың? Минең ирем — ике башлы дейеү кеше ҡаны менән туҡлана. Ҡайтһа, һинең дә ҡаныңды эсер. Кит бынан тиҙерәк,— тигән. Илгиҙәр:

— Кем кемдекен эсер, ҡарап ҡарарбыҙ,— тигән.

— Ундай ғәйрәтле булһаң, беҙҙә ашап ят, минең ирем ун биш көнлөк юлға сығып китте. Ул ҡайтҡансы, кос йыйырһың,—тигән теге ҡыҙ. Егет риза булған. Ҡыҙ уға ике башлы дейеү баҡсаһынан алма ашарға ҡушҡан. Егет бер биш көн алма ашағас, ҡыҙ, уның көсөн һынамаҡсы булып:

— Бына һиңә ҙур сүкеш, бына һиңә ҙур шар. Сүкеште күтәреп һуғып ҡара: һуға алһаң, дейеүгә көсөң етер, һуға алмаһаң — етмәҫ,— тип әйткән.

Егет сүкеште күтәреп ҡараған, ҡуҙғата ла алмаған. Ҡыҙ уға тағы алма ашарға ҡушҡан. Егет тағы ла биш көн алма ашағас, ҡыҙ уға тағы шар һуғырға ҡушҡан. Был юлы Илгиҙәр сүкеште күтәрә биреп ҡуйған. Ҡыҙ уға тағы алма ашарға ҡушҡан. Биш көндән һуң егет ҙур сүкеште күтәреп, шарҙы һуғып ебәргән икән, ҙур шар тәгәрәп, ике башлы дейеүҙең өйҙәрен емереп киткән, ти.

Дейеү ҡайта:

— Был өйҙө кем емерҙе? — ти. Теге ҡыҙ:

— Ҡәйнешең килде, шар менән уйнап йөрөй ине, шары яңылыш өйгә тейеп емерҙе,— ти.

— Ҡайҙа, күрһәт әле миңә ҡәйнеште?

Шунан ҡыҙ Илгиҙәрҙе күрһәтә. Ике башлы дейеү:

— Йә, ҡәйнеш, алыш бармы, бирөш бармы?

— Беҙҙә етмеш төрлө һөнәр бар, алыш та бар, бирөш тә бар.

— Әйҙә, улай булғас, алышабыҙ,— тип дейеү Илгиҙәр менән көрәшә башлаған. Башлап дейеү егетте күтәреп бәргән, егет саҡсаҡ аяғына баҫып ҡалған. Шунан егет дейеүҙе күтәреп бәргән, дейеү теҙенә саҡлы ергә батҡан.

— Әһә, һин шулаймы ни әле, ҡәйнеш,— тигән дейеү, аяҡтарын тартып алып. Хәйлә ҡормаҡсы булған: — Ҡана, бер аҙ һыу эсеп алайыҡ,— тигән.— Һыуһағанһыңдыр, ҡәйнеш, әйҙә, һин дә эс,— тип Илгиҙәргә һулда торған мискәне күрһәткән дә, үҙе уң яҡта

торғанын төп күтәрә эскән дә бөткән. Илгиҙәр ҙә эсеп бөткән. Ә ул мискәләрҙең береһендә — көсләндерә торған, икенсеһендә көсһеҙләндерә торған һыу булған икән. Былар көрәшкән арала баяғы ҡыҙ мискәләрҙе алмаштырып өлгөргән. Һыуҙы эскәс, Илгиҙәрҙең көсө артып, тағы ла ғәйрәтләнеберәк киткән. Яңынан көрәшә башлағайнылар, дейеүҙе егет шундайын итеп күтәреп бәрҙе, дейеү муйынынан үк ергә батты, ти. Шул арала ҡыҙ дейеүҙең ҡылысын килтереп егеткә бирҙе, егет дейеүҙең башын сабып та өҙҙө, ти.

Дейеүҙе үлтергәс, Илгиҙәр хәл алды, дейеүҙең баҡсаһында тағы ун көн буйына алма ашап йөрөнө, ти. Шунан ҡыҙ, мин һинән ҡалмайым тип, дейеүҙең алтын-көмөштәрен бер йомарлаҡҡа әйләндереп кәрзиненә һалып алды ла егеткә эйәреп китте, ти. Был ҡыҙ бер әбей менән бабайҙың ҡыҙы икән. Уны дейеү урлаған булған.

Хәҙер былар икәүләп ай киткәндәр, һыу кискәндәр, бара торғас, бер йортҡа барып еткәндәр. Был йорт гел баҡырҙан икән: йорттар ҙа баҡыр, баҡсала үҫә торған ағастары ла баҡыр, уларҙа һайраусы ҡоштар ҙа баҡыр — барыһы ла баҡыр, ти. Оло өйҙән бер ҡыҙ килеп сыҡҡан да:

— Минең ирем — баҡыр батша дейеү нәҫеленән, әҙәм затын һис яратмай. Ҡайҙан килдегеҙ, шунда китегеҙ,— тигән.

Илгиҙәр:

— Йә, күп һөйләнмә, ирең ҡасан ҡайта, нимә эшләтә, шуны әйт,— ти.

— Минең ирем әҙәм затына йомош ҡуша ла ҡушҡанды үтәй алмаусының башын ҡиҫеп, мейеһен ҡош-ҡорттарға ташлай. Бына-бына дөбөр-шатыр ҡайтып төшөргә тейеш ул, тиҙерәк ҡасығыҙ,— тигән дә баҡыр батшаның ҡатыны баяғы ҡыҙ менән Илгиҙәрҙе йәшереп ҡуйған. Баҡыр батша дөбөр-шатыр ҡайтып төшкән.

— Фу-фу, әҙәм еҫе бар,— тигән өйгә ингәс тә.

— Бар шул, булһа, нишләтерһең? — тигән ҡатыны.

— Нишләтәйем, йомош ҡушам. Ҡайҙа, сығар үҙен тиҙерәк,— ти баҡыр батша. Илгиҙәрҙе сығарғайнылар, дейеү уға күҙен текәп:

— Һинең ни һөнәрең бар? — ти.

— Мин етмеш төрлө һөнәр беләм,— ти егет.

— Улай булһа, миңә көмөш батшаның көмөш ҡошон урлап алып ҡайт. Мине баҡыр ҡоштар ғына тәнәғәтләндермәй. Алып ҡайтмаһаң, башыңды киҫәм,— ти дейеү.

Илгиҙәр ҡарыулашмаған, көмөш батшаның көмөш ҡошон урларға киткән. Ул баҡыр батшаның күршеһендә, ете тау аръяғында йәшәй икән. Илгиҙәр ете тауҙы артылып, көмөш батшаға барып еткән. Нисек урлайым икән, тип торғанда, көмөш батшаның бер хеҙмәтсеһе килеп сыҡҡан.

— Эй егет, нимә эштәп йөрөйһөң бында? Тай тиҙерәк. Юҡһа дейеүгә тотоп бирәм үҙеңде! — ти икән был.

— Ашыҡмай тор, ағай, һин башта миңә юл өйрәт: батшаңдың көмөш ҡошон нисек урлайым икән?

— Һе, көмөш батшаның көмөш ҡошон бик һаҡлайҙар шул. Улар барыһы ла көмөш батшаның көмөш һарайында, ҡыҙы бүлмәһендә, кескәй генә ситлектәрҙә тора. Алғанда ҡоштоң үҙен генә алырға



кәрәк. Ҡыҙ бүлмәһенә инә алаһың икән, ҡошто ала алаһың. Ниндәй булһа ла һөнәрең бармы һуң? — тип һораған хеҙмәтсе.

— Мин гармун уйнарға, йырларға бик оҫта,— тигән егет.

— Һе, улай икән,— тигән хеҙмәтсе.— Батшаның ҡыҙы сирләй. Бик күп төрлө дарыуҙар менән дауалап ҡаранылар, береһе лә килешмәне. Бәлки, һинең гармун-йырың шифа булыр: йыр-моң ярата ул ҡыҙ,— тип Илгиҙәрҙе үҙе менән алып ингән. Ингәс, хеҙмәтсенең көмөш телле гармунын алып, эй уйнарға тотонған Илгиҙәр, гармун тауышы ҡыҙҙың бүлмәһенә барып ишетелгән. Сирләп ятҡан ҡыҙ һикереп тороп ултырған да:

— Кем анда уйнай? Минең янға индерегеҙ! — тип бойорған.

Илгиҙәр, көмөш бүлмәгә ингәс, ни күҙе менән күрһен, бүлмәлә көмөш ситлектәр эсендә көмөш ҡоштар сутылдашып ултыралар, ти. Уның күҙе ҡыҙған, нисек итеп ҡыҙға серҙе сисәйем икән тип уйлай-уйлай, бик оҙаҡ уйнаған. Ул һаман гармун уйнаған, йыр йырлаған. Ошо моңло тауышҡа рәхәтләнеп ҡыҙ йоҡлап киткән. Егет кешенең йөрәге нисек түҙеп торһон һуң? Ҡыҙ йоҡлап киткәс тә, ул уның янына барып ятҡан. Ятҡан да батша ҡыҙын ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлаған, һурып-һурып үпкән, ти. Төн уртаһында Илгиҙәр ипләп кенә урынынан торған да, шым ғына барып, көмөш ситлеккә үрелгән. Ҡараңғының күҙе юҡ бит инде ул: Илгиҙәрҙең еңе тейеп, көмөш сымдар зеңләргә тотонған. Ҡарауылсылар килеп тә кергәндәр, егетте тотоп, батшаға алып та ингәндәр.

— Мин һиңә ҡошомдо бирәм, тик һин башта миңә алтын батшаның алтын ҡошон урлап алып ҡайтып бир. Алып ҡайтмаһаң, башыңды киҫтерәм,— тигән көмөш батша.

Илгиҙәр риза булған да тағы юлға сығып киткән. Ете көн, ете төн үткән, алтын батша еренә барып еткән. Алтын батшаның алтын йорттары күҙҙәрҙе сағылдырып ялтырап тора, ти.

Ҡапҡа төбөнә барып еткәс, алтын батшаның хеҙмәтсеһе килеп сыҡҡан:

— Ни йомош?

Егет хәлде һөйләгәс, хеҙмәтсе аҡыл биргән:

— Бына оҙаҡламай батша ҡыҙы күлгә һыу инергә барыр. Һин артынан шым ғына бар. Ул еңгәһе менән сисенеп һыуға төшкәс, күлдәктәрен ал да ҡамыш араһына боҫ. Алтын батшаның ҡыҙы һыуҙан сығып, күлдәге булмағас, иларға-ялбарырға тотонор: «Күлдәгемде кем алды? Ҡарт кеше алһа — бабай тиермен; ир уртаһындағы кеше алһа — ағай тиермен; егет кеше алһа — кейәүгә сығырмын»,— тиер. Күлдәктәрен һин ана шунан һуң ғына бирерһең,— тигән.

Илгиҙәр хеҙмәтсе ҡушҡанса эшләй. Алтын батша ҡыҙы һыу инергә киткәс, артынан боҫа-боҫа бара ла ҡамыш араһына инеп ултыра. Алтын батша ҡыҙы еңгәһе менән килә. Сисенеп, икеһе лә күлгә төшөп китә. Улар һыуға инеп, һыу сәсрәтешә башлағас та, егет ипләп кенә ҡамыш эсенән сыға ла, ҡыҙҙың күлдәктәрен алып, тағы ла ҡамыш араһына боҫа.

Һыу инеп туйғас, тегеләр сығалар. Еңгәһе кейенә, ә ҡыҙҙың күлдәге юҡ. Ҡыҙ аптырап ҡала. Шәрә ҡайтырға ояла. Шунан асыу-

Илгиҙәр әле алып ҡайтҡан ҡыҙы менән кәңәш итә. Ҡыҙ әйтә:
— Ҡырҡ ҡолас оҙонлоғонда тотош арҡан ал, ул бер ҡарыш та кәм булмаһын. Һыу айғырын шул арҡанға урап тоторһоң, батшаның иң шәп атын һора, ти. Егет батшанан аҡса ала ла баҙарға сығып китә. Баҙарҙа арҡандарҙы үлсәп ҡарай — береһе бер ҡолас, береһе ярты ҡолас тулмай. Йорой торғас, ҡырҡ ҡоластан бер ҡарыш ҡына кәм арҡан осрай. Теп-теүәле генә табылмағас, егет ошо арҡанды һатып ала. Ҡайтҡас батшаға:
— Һыу айғырын алып ҡайтам. Атланып барыр өсөн, аттарың араһынан иң шәбен һайлап алырға рөхсәт ит,— ти.
Әбей батша тағы вәзирҙәрен йыя.
— Теге егет ат һорай, бирергәме, юҡмы? — ти.
— Бирергә кәрәк,— тиҙәр вәзирҙәр.
Илгиҙәр батшаның йылҡы өйөрөнән аҫау айғырын тотоп мендe. Шунан китте был елдереп. Әй китте, әй китте, елдереп бара торғас, бик ҙур диңгеҙ янына барып етте. Һикереп төшә һалды ла, теге ҡырҡ ҡоласҡа бер ҡарыш ҡына тулмаҫ арҡанды алып, айғырҙы сырмарға тотондо. Ҡолаҡ осона ғына бер ҡарыш арҡан етмәй ҡалды. Ярай, булды был хәҙер, һыу айғыры быны хәҙер әллә ни тешләй алмаҫ, тешләһә лә, арҡанды өҙөп, тәнен йәрәхәтләй алмаҫ.
Менеп килгән атын ана шулай арҡан менән сырмап көпләгәс, уны диңгеҙгә төшөрөп ебәрә. Ат һыуға сумыу менән, диңгеҙ ҡайнай башлай, ҡанлана: тегендә, диңгеҙ төбөндә, айғырҙар һуғыша бит инде! Шунан был айғыр һыу айғырын ярға ҡыуып алып сыға. Һыуҙан сыҡҡас та, Илгиҙәр һыу айғырының ялына йәбешеп, йәшен тиҙлегенән менеп атлана ла саба башлай. Һыу айғырын алып ҡайта,әбей батшаға бирә. Айғырҙы амбарға ябып ҡуялар. Илгиҙәр һыу айғырын алып ҡайтҡас, әбей батша үҙенең вәзирҙәрен саҡырып тағын кәңәш итә.
— Хәҙер ни эшләргә инде, миңә кәңәш бирегеҙ,— ти.
— Донъяла никтәникс тигән бер нәмә бар икән, шуны алып ҡайтырға ҡушырға кәрәк,— тиҙәр вәзирҙәр.— Барыбер таба алмаҫ ул уны, тапһа ла алып ҡайта алмаҫ,— тиҙәр.
— Донъяла никтәникс бармы, юҡмы? — ти.
— Юҡ, ундай нәмәне ишеткәнем юҡ,— ти ике башлы дейеүҙә торған ҡыҙ.
— Бар ул, бар. Тик уның ҡайҙа икәнен генә белмәйем мин,— ти теге тылсымлы батша ҡыҙы.
— Мин уны табырға тейешмен. Тапмаһам, мине үлем көтә,— ти Илгиҙәр.
— Һин һигеҙ йылға етерлек аҙыҡ ал. Аҙыҡтың ҡырҡ көнлөгө бер сәтләүек тиклем генә булһын. Атыңа ла шундай аҙыҡ ал. Бына һиңә кулъяулыҡ. Битеңде, ҡулыңды башҡа нәмәгә һөртмә, ошо кулъяулыҡҡа ғына һөрт,— ти тәүге ҡыҙ.
Илгиҙәр, һигеҙ йылға етерлек аҙыҡ алып, никтәниксте эҙләргә сығып китә. Ай китә, йыл китә, бер өйгә барып етә. Ишекте асып ебәрһә, ултыра, ти, бер ҡортҡа. Бешергән, ти, майлы бутҡа. Ҡарсыҡ егетте күргәс тә ашарға ултырырға саҡыра.



Егет битен йыуа. Әбей таҫтамал бирә. Егет таҫтамалды алмай, битен-күҙен үҙенең кулъяулығына һөртә. Һөртә башлағайны, әбей ҡыҙының кулъяулығын танып, үҙенең кейәүе икәнен белеп алды. Бутка ашағас, Илгиҙәр һорай:
— Әбей, һин никтәниксте беләһеңме?
— Мин ер йөҙөндәге барлыҡ януарҙарҙың башлығы булам, ҡарармын,— ти әбей. Ҡарағайны, хайуандар донъяһында никтәникс юҡ.
— Ярай, улай булғас, алға атлайым,— тип Илгиҙәр сығып китә.
Айҙар китә, йылдар китә, тағы бер йортҡа барып етә. Ишекте асып ебәрһә, ултыра, ти, бер ҡортҡа, бешергән, ти, майлы бутҡа.
Әбей егетте күргәс тә, үҙе менән бергә бутҡа ашарға саҡыра. Егет йыуына башлағас, әбей уға таҫтамал бирә. Илгиҙәр әбей биргән таҫтамал менән һөртөнмәй, үҙенең кулъяулығына һөртөнә башлай. Шунан һуң әбей бының үҙенең кейәүе икәнлеген белә. Был ҡортҡа теге кулъяулыҡ биргән ҡыҙҙың олөсәһе булып сыға.
— Әбей, һин донъяла никтәникс барлығын беләһеңме? — ти.
— Мин бөтә донъя йөҙөндәге ҡоштарҙың башлығы булам, барып ҡарармын, булһа, әйтермен,— ти ҙә ҡоштар араһына сығып китә. Һорашып ҡайтҡас, никтәникстең ҡоштар донъяһында юҡлығын әйтә.
Егет тағы сығып китә. Айҙар китә, йылдар китә, тағы бер йортҡа барып етә. Ишекте асып ебәрһә, ултыра, ти, бер ҡортҡа, бешергән, ти, майлы бутҡа.
Был әбей ҙә егетте бутҡа ашарға саҡырған, ти. Егет бында ла, ҡулын-битен йыуып, әбей биргән таҫтамалға һөртөнмәй, теге ҡыҙ биргән кулъяулыҡҡа һөртөнә. Әбей уны үҙенең кейәүе икәнен танып ала. Был ҡортҡа ҡыҙҙың әсәһенең олөсәһе икән, ти. Бутка ашағас, Илгиҙәр был ҡортҡанан да баяғыса һорай:
— Әбей, был донъяла никтәникс бармы, юҡмы?
— Мин бөтә донъялағы һыу йәнлектәренең башлығы булам,— ти ҡортҡа.— Улар араһында бик күп йәшәгәндәре бар, һорашырмын,— ти. Һыу йәнлектәренең йыйылышын йыйып һораша башлағайны, бер ҡыҙ тәлмәрйен әйтә:
— Минең атайым никтәникстең барлығын миңә һөйләгәйне ,— ти.
— Атайың ҡайҙа, ниңә йыйылышҡа килмәне? — ти ҡарсыҡ.
— Ул ауырып ята. Үҙенең янына барып һорағыҙ,— ти ҡыҙ тәлмәрйен.
Уға кит балығын ебәрәләр. Ул, ҡыҙ тәлмәрйендең атаһына барып:
— Донъяла никтәникс бармы? — тип һорай.
— Бар. Был диңгеҙҙән һуң бер ҡоро ер булыр, шунан тағы диңгеҙ башланыр. Ана шул диңгеҙ төбөндә ике ҡатлы йорт бар. Никтәникс ана шул йорттоң аҫҡы ҡатында тора,—ти сирле тәлмәрйен. Кит ҡайтып әйткәс тә, йыйылыш таралған, ти. Йыйылыш таралғас, егет, әбей менән һаубуллашып, шул диңгеҙҙе эҙләп киткән. Айҙар, йылдар үткән, беҙҙең егет теге диңгеҙгә барып та еткән, ти. Атын бер тирәккә бәйләгән дә үҙе диңгеҙ төбөнә төшөп киткән. Диңгеҙ төбөнә төшөп бара торғас, бер ҙур ташҡа абынып йығылған икән, шунда уның ҡулына ишек тотҡаһы тейгән, ти. Күҙен асып

караһа, алдында ике ҡатлы йорт тора, ти. Егет йорттоң аҫҡы ҡатына төшә. Унда ҙу-у-ур өҫтәл, өҫтәл тирәләп ултырғыстар теҙелгән. Илгиҙәр өҫтәл аҫтына ҡаса. Күп тә үтмәй, бер ҡарт ҡайтып инә лә:

— Никтәникс, миңә ашарға килтер,— ти.

Шул арала кемдер берәү, үҙе күренмәйенсә, өҫтәлде ашамлыҡтар менән тултырып ташлай. Ҡарт тамағын туйҙыра ла сығып китә. Илгиҙәр өҫтәл өҫтөндәге ашамлыҡтарҙы ашайым тип сыҡһа, өҫтәл өҫтөндә бер ашамлыҡ ҡалмаған! Илгиҙәр аптырап тормай, теге бабай һымаҡ:

— Никтәникс, миңә ашарға килтер,— ти. Өҫтәл өҫтө шунда уҡ ашамлыҡтар менән тула. Илгиҙәр, ашап туйғас:

— Вәт рәхмәт, Никтәникс! — ти. Шул ваҡыт Никтәникс, телгә килеп:

— Мин нисә йылдар буйы ашамлыҡтар әҙерләп торҙом, ләкин рәхмәт ишеткәнем булманы. Һин миңә рәхмәт әйттең, хәҙер мин һинән ҡалмайым,— ти.

— Һуң, теге ҡарттан нисек ҡотолорбоҙ?

— Ул өйҙә юҡ саҡта, һыуҙаң сығып, ҡоро ергә аяҡ баҫырға өлгөрһәк, ул беҙҙе тота алмаҫ,— ти Никтәникс.

— Әйҙә, улай булғас, тиҙерәк булайыҡ,— ти. ҙә Илгиҙәр, етәкләгәндәй итеп, ҡулын һуҙа. Ҡулында йомшаҡ ҡына бер нәмә һиҙә, ә үҙе күренмәй.

Улар диңгеҙ төбөнән сығалар ҙа, Илгиҙәрҙең атына атланып, юлға төшәләр. Юлда һөйләшәләр, ә Никтәникс үҙе күренмәй. Айҙар, йылдар үткәс, әбей батшаға ҡайтып етәләр.

— Алып ҡайттыңмы?

— Алып ҡайттым, бадишам.

— Ҡайҙа ул?

— Хәҙер күрерһең.

— Минең хәҙер үк күрәһем килә.

— Шулаймы? Хәҙер. Никтәникс, батша өсөн ашамлыҡтар әҙерлә!

Никтәникс күҙгә күренмәй, ә өҫтәл өҫтөн ашамлыҡтар менән тултырып ташлай. Батша аптырап ҡала. Вәзирҙәрен саҡырып кәңәш итә.

Вәзирҙәрҙең береһе:

— Был егет ҡырҡ ҡыҫыр бейәнән ҡырҡ биҙрә һөт һауып алып, ҡырҡ көн ҡайнатһын; ҡырҡ көн ҡайнатҡандан һуң да, ҡырҡ биҙрә һөт ҡалһын,— ти.

Илгиҙәрҙе саҡыралар:

— Батшанан әмер бар: ҡырҡ ҡыҫыр бейәнән ҡырҡ биҙрә һөт һауып алаһың да ҡырҡ көн ҡайнатаһың, шунан һуң да ҡырҡ биҙрә һөт ҡалһын,— тиҙәр.

— Була ул,— тип сығып китә лә Илгиҙәр ике башлы дейеүҙән ҡотҡарған ҡыҙ менән кәңәш итә.

— Ҡайғырма, эшләрбеҙ,— ти ҡыҙ.

Ҡырҡ ҡыҫыр бейә, ҡырҡ биҙрә килтереп ҡуялар. Биҙрәләрҙе иңләп ултыртып сыҡҡайны Илгиҙәр, ҡыҫыр бейәләрҙең имсәктәренән гөжләп һөт сәптерә башланы, ҡырҡ биҙрә ҡырҡ минутта тулды,



ти. Иҫе-аҡылы китеп, әбей батша ҡарап тора, вәзирҙәре тора, ни эшләргә белмәйҙәр, ти.

Хәҙер ҡайнатырға ҡушалар. Егерме көн ҡайнатҡас, әбей батша ҡарарға килә. Һөт бер ҙә кәмемәгәс, асыуы килеп, ерле юҡҡа бәйләнергә тотона. Прәме һарыуын ҡайнатып ҡайната бит әй быныҡ. Илгиҙәр түҙмәй, әбей батшаны күтәреп ала ла ҡайнап торған ҡаҙанға ырғыта. Әбей батша шунда бешеп үлә. Илгиҙәр ике ҡыҙын алып сығып ҡаса.

Көндәр буйы, йылдар буйы китәләр. Бара торғас, түбәләрен ҡар ҡаплап торған бейек таулы-ташлы илгә етәләр. Бер тау араһынан үтеп баралар ине, былар ҡаршыһына бер бөркөт осоп килеп төштө.

— Нишләп йөрөйһөгөҙ былай? — ти.

Илгиҙәр үҙенең башынан үткәндәрен һөйләп биргәс, бөркөт әйтә:

— Ер йөҙөндә эшләп көн итә торған бөтә кешеләр шикелле, һеҙ ҙә нужа юлына ингәнһегеҙ. Был юлдан сығыу һеҙгә еңел булмаҫ,— ти.

— Һиңә, күккә күтәрелеп донъя күргән бөркөткә, бәлки, билдәлелер: был нужа юлынан беҙгә нисек сығырға һуң, ҡайҙа барырға? — тип һорай Илгиҙәр.

— Эйе, мин тауҙар аша осоп, бик күп донъя күрҙем, бөйөк аҡыл эйәһен осраттым. Бына шул бабай әйтә, нужа күрһәтеүселәрҙе бөтөрмәй тороп, нужа юлынан ҡотолоп булмай, ти.

— Нужа күрһәтеүселәрҙе нисек итеп бөтөрөргә һуң? — ти егет.

— Һеҙ илдә булған етем-еҫпеләр, михнәт эсендә йәшәүселәр — барығыҙ ҙа бергә йыйылығыҙ. Ҡулығыҙға ҡылыс алығыҙ. Үҙегеҙҙе ғазаплаусыларҙы ер йөҙөнән ҡыуығыҙ, юҡ итегеҙ. Ауылдарҙан-ауылдарға китегеҙ, ҡалаға етегеҙ, унда тағы аҡыл бирерҙәр,— ти тау бөркөтө.

Бына ошонан һуң инде Илгиҙәр ауылдарҙан-ауылдарға китә. Нужа күреүселәрҙең бөтәһен дә ул үҙенең артынан эйәртә. Ҡулдарына балтамы-сукмармы, һәнәкме-мылтыҡмы алалар ҙа алға китәләр.

Былар китә торһон, беҙ Елбиҙәктең нишләп йөрөүен һөйләйек.

Елбиҙәк ағаһынан айырылғас, көндәр, төндәр китә, бик күп ерҙәр үтә. Бер ваҡыт бик матур болонлоҡҡа барып сыға. Унда бер ҡыуышты күрә лә шуның янына бара. Барһа, ҡыуыштан бер ҡарт килеп сыға.

— Нихәл, бабаҡай? — ти Елбиҙәк, һаулыҡ һораша.

— Бик әйбәт әле, ҡыҙым. Һине был яҡҡа ниндәй елдәр ташланы?

— Бәхет эҙләргә сыҡтым, бабай. Бәхет эҙләйем. Бәхетте ҡайҙан табырға икән? — ти ҡыҙ.

— Ҡыҙым, ул бәхет ер аҫтында ла, күктә лә, һыуҙа ла түгел. Беҙҙең үҙебеҙҙең ҡулда ул,— ти ҡарт.

— Нишләп үҙебеҙҙең ҡулда булһын ул?! Бына беҙ, бәхетле булабыҙ тип, кесе йәштән байҙың көтөүен көттөк. Һарыҡтарын юғалтҡан өсөн бай беҙҙе төрмәгә ябып ун йыл тотто. Унан беҙ сығып киттек,— тип ҡыҙ бөтәһен дә бәйнә-бәйнә һөйләп бирә.

Ҡарт әйтә:

— Ҡыҙым, һөнәрле юлға ингәнһең икән, һөнәр өйрәнергә кәрәк. Минең янда торһаң, һөнәрле булырһың,— ти.

— Ниндәй һөнәр өйрәтәһең һуң, бабай?

— Берләшергә өйрәтәм, ҡыҙым, бәхет асҡысы берләшеүҙә ул.

— Өйрәт, бабаҡайым, өйрәт. Бәхет асҡысын алырға өйрәт,— ти ҡыҙ.

Елбиҙәк был бабайҙы тыңлап ултырған һайын, уға мөхәббәтеныраҡ килеп: «Бәй-бәй, әллә төшөмдә күргән бабаймы был?» — тип уйлана башлай. Шунан һорап ҡуя:

— Бабаҡай, һин минең төшөмә ингән бик аҡыллы ҡартмы әллә?

— Әллә шул... Ә ниңә? — ти бабай.

— Беҙ ағайым менән икәү үҙебеҙҙең күҙ йәшенән хасил булған күл буйында йоҡлап ятҡанда, мин бер төш күргәйнем. Төшөмдә хас һинең тоҫлө бер бабай килде лә миңә сыбыҡтар бирҙе, шуларҙы һындырырға ҡушты. Мин уларҙы берәм-берәм һындырып бөтөрҙөм. Ә сыбыҡтар, ниндәй фарман менәндер, ҡабат ялғандылар. Шунан теге бабай уларҙы бергә ҡушып һындырырға ҡушты. Мин һындырырға итеп ҡарай башлағайным, уяныптынып киттем. Күҙемде йомоп, бабайҙы коттом-коттом — ул ҡабат килмәне. Бына хәҙер мин һине үҙем эҙләп таптым, әйе бит, бабаҡай?— ти Елбиҙәк, шатланып.

Аҡыллы ҡарт матур итеп йылмайып ҡарап торҙо ла шулай тип әйтте, ти.

— Шулай берәм-берәм йөрөһәгеҙ, һеҙҙе лә яңғыҙ сыбыкты һындырған кеүек һындырып харап итеп бөтөрөрҙәр. Ә инде бергәләп йөрөһәгеҙ, уҡмашҡан сыбыҡтар шикелле ныҡ булырһығыҙ,— тине, ти.

— Улай булғас, минең ағайым әрәм булғандыр инде? — тип Елбиҙәк илап ебәрә.

— Юҡ, әрәм булманы, илама,— ти бабай.— Мин уға ҡаршы үҙемдең бер боркотөмдө ебәрҙем. Белеүемсә, улар осраштылар, бөркот уға мин әйткәнде әйтте инде,— ти.

— Бабай, һин уны ҡайҙан беләһең? Минең уны күрәһем килә,— ти Елбиҙәк.

— Күрерһең, ҡыҙым, күрерһең әле.

— Һөнәреңде өйрәт инде, бабай?

— Һин ауылдарҙан-ауылдарға кит. Ҡалаларға ет. Үҙегеҙ кеүек үк иҙелгәндәрҙе күр. Уларға бәхеттең күктә лә, һыуҙа ла, ер аҫтында ла булмағанлығын һөйлә. Бәхет ул байҙар, баҡыр, көмөш, алтын батшалар ҡулында икәнлеген аңлат. Шул асҡысты уларҙан тартып алыу өсөн ҡулығыҙға үткен ҡылыстар алығыҙ ҙа яуыздарҙың баштарын киҫегеҙ. Ергә, һыуға, бейек йорттарға үҙегеҙ хужа булығыҙ,— тип бабай Елбиҙәккә юл күрһәтә.

Елбиҙәк ана шул юлдан ауылдан-ауылға, ҡаланан-ҡалаға барып, аҡыллы ҡарт һөйләгән һүҙҙәрҙе халыҡҡа еткеҙгән. Уға эйәреп, иҙелгән халыҡтар, байҙарға, батшаларға ҡаршы йәшен ҡылыстар күтәреп һуғышҡа сыҡҡандар.



Бер заман улар Илгиҙәр туплаған ғәскәргә барып ҡушылғандар ҙа, көслө ташҡын булып, дейеү пәрейҙәре, албаҫтылар йәшәй торған һарайҙар өҫтөнә ташланғандар. Һарайҙар, тәхеттәр янып, коло күккә осҡан. Һуғыш шул саҡлы ҡаты булған, урмандар, ҡырҙар үлек менән тулған. Уйһыу урындарҙа ҡан күлдәре хасил булған. Дошман һаман ҡарыулашҡан, бәхет асҡысын үҙ ҡулында һаҡлап ҡалдырырға тырышҡан. Яуыҙлыҡҡа ҡаршы асыуы ҡайнап, ғәҙеллек даулап оло яуға күтәрелгән халыҡ ташҡынын баҫып буламы һуң?! Ә теге бабай үҙенең аҡыллы һүҙҙәре менән халыҡты аяуһыҙ көрәшкә дәртләндергән, бөркөт кеүек батырҙарын ебәреп, еңеүгә юл күрһәткән, алға саҡырып торған.

Нисек кенә ҡарыулашмаһындар, дошмандар еңелгән. Илдә ғәҙеллек урынлаштырылған. Еңеү туйына бөтә халыҡ саҡырылған. Унда мин дә булдым, бойок аҡыллы ҡартты ла, уның бөркөттәрен дә, Илгиҙәр менән Елбиҙәкте лә үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, Ниҡтәникс әҙерләй торған аштарҙан да тәмлерәк аштарын ашаным. Беҙ ашағанда, алтын ҡоштар менән көмөш ҡоштар һайрап торҙо.

Хәҙерге Октябрь байрамы ана шул оло туйҙың дауамы икән ул.

## ТАҢ АТҠАНДА

Борон-борон заманда, һайыҫҡан һанат булғанда, ҡарға ҡарауылда торғанда, бүре — батша, төлкө түрә булған бер ваҡытта, бөтә донъя йөҙөн ҡараңғы төн ҡаплап алған булған. Был ҡараңғы төндөң бөтөүен бөтә йәнлек, ҡош-ҡорт, хайуандар һағынып көткәндәр, ти. Тик ҡараңғы төндә лә күреүсе, уны үҙенең кинкүреше осон файҙаланыусы уҫал бүре, ошо ғәмһеҙ ҡараңғылыҡтан файҙаланып һунарсылыҡ итеүсе ябалаҡ, тауыҡтарҙың, башҡа ҡоштарҙың күрмәүенән файҙаланып, уларҙы ҡырыусы төлкө, ҡош йомортҡаларын урлаусы һайыҫҡандар был төндөң бөтмәүен теләгәндәр. Ә был төндөң ни өсөн шулай булыуын бер кем дә аңламаған, шуға күрә уны бөтөрөү юлын да белмәгәндәр, ти, әле.

Бер ваҡыт ошо яҡтырғыс оҙон ҡараңғылыҡтан ҡотолоу юлдарын табыу өсөн бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр бер урынға йыйылғандар. Бында ҡараңғылыҡтан файҙаланып көн күреүселәрҙән төлкө менән һайыҫҡандар ҙа килгән, ти. Йыйылышта ҡараңғылыҡтың сәбәбен эҙләгәндәр. Ҡайһы берәүҙәр был ҡараңғылыҡты алла тарафынан ҡушылған эш, тип, икенсе берәүҙәр, ҡояшты ер аҫты аллаһы урлаған икән, тип, ә өсөнсө берәүҙәр: «Ҡараңғылыҡ — үҙебеҙҙең гонаһ шомлоғо ул»,— тип аңлатҡандар.

Быларҙың бөтәһен дә ситтән күҙәтеп тыңлап тороусы ылаsын һүҙ алған да:

— Иптәштәр! Һеҙ был ҡараңғылыҡтың сәбәбен ул тиклем йыраҡтан эҙләмәгеҙ,— тигән.— Ете тау, ете ҡара урман, ете диңгеҙ аръяғында бер бейек тау бар. Бына шул тауҙың башында соғондән эшләнгән бер бик ҙур һарай бар икән. Ул һарайҙы етешәр башлы аждаһалар, ҡорос тешле, тимер тырнаҡлы йыртҡыстар һаҡлап торалар икән. Һи өсөн тиһәң, бөтә яҡтылыҡты ошо һарай эсендә ҡорос

тешле, еҙ тырнаҡлы, шырт йөнлө, зәһәр күҙле арыҫлан үҙ ҡулында тота икән. Ошо һарайҙы барып ватһаң ғына яҡтылыҡты донъяға сығарырға мөмкин. Ә ул һарайҙы ватыр өсөн бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр бер уҡмашҡан көс булып берләшергә кәрәк. Бына шул ваҡытта ғына беҙ яҡты донъяға сыға алырбыҙ,— тигән.

Бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр араһында ғауға күтәрелгән. Бөтәһе лә ошо сөгөн һарайҙы ватыр өсөн фекер йөрөтә башлаған. Ә ситтән генә был хәлде күҙәтеп торған төлкө, ыласындың һүҙҙәрен еткереү өсөн, бүрене эҙләп сапҡан, ә һайыҫҡан ябалаҡҡа осҡан, ти.

Хәбәрҙе ишеткәс, бүре ябалаҡты саҡыртып алған да ошо минутта уҡ ыласынды барып табып үлтерергә, башын үҙенә алып килергә ҡушҡан. Ябалаҡ: «Барам, табам, ыласынды быуып үлтерәм!» — тип йыйылыш барған урынға осҡан, ти. Ябалаҡтың ҡанат ҡағып килгәнен күреп, бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар һәм йәнлектәр уға ҡаршы сыҡҡандар икән, ябалаҡ саҡ-саҡ ҡасып ҡотолған, ти. Бүре, был хәбәрҙе ишеткәс, һайыҫҡанды шул минутта уҡ саҡыртып ала ла уны ете ҡара урман, ете тау, ете диңгеҙ аръяғындағы бейек тау башына урынлашҡан сөгөн һарайҙағы арыҫланға хәбәр итергә ебәрә. Ләкин инде был һуң була.

Ҡараңғылыҡтан туйған бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр, бөтәһе бергә, дауыл ҡуптарып, ете ҡара урман, ете тау, ете диңгеҙ аръяғындағы бейек тау башына урынлашҡан сөгөн һарайға ҡарай йүнәләләр. Бүре, ябалаҡ, төлкө был ташҡынды күреп, һәр ҡайһыһы үҙенең өңөнә кереп ҡаса.

Был ташҡын һымаҡ көстөң иң алдында бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәргә юл күрһәтеп, уларҙы дәртләндереп, ҡыйыу ыласын оса икән. Бына бер ваҡыт сөгөн һарай ҙа күренә. Уның тирә-яғын һаҡлап тороусы етешәр башлы аждаһалар, ҡорос тешле, еҙ тырнаҡлы йыртҡыстар башында ҡыйыу ыласын торған көскә ҡаршы төшәләр. Ҡот осҡос һуғыш башлана. Ҡыйыу ыласын бөтә ергә етешеп, бөтә ҡош-ҡорт, йәнлектәргә дәрт-дарман биреп, еңеүгә рухландырып йөрөгән. Ҡан ҡойош өс көн, өс төн барған. Бына шул саҡ инде тегеләрҙең ҡорос тештәре, еҙ тырнаҡтары һынғылай, шырт йөндәре өтөлгөләй, башлаған. Ыласынға эйәргәндәр, быны күреп, тағы ла дәррәүерәк ынтылғандар икән, сөгөн һарайға уҡ барып терәлгәндәр. Миллионлаған йоҙроҡтарҙы бергә уҡмаштырып, тиңдәшһеҙ ғәйрәт менән һуҡҡандар икән, сөгөн һарай селпәрәмә килеп, теге ағыу күҙле арыҫлан да шунда юҡ булды, ти. Бына шул ваҡытта офоҡтан нурланып, бөтә донъяға таң нуры сәселде, ти. Тора-бара был яҡтылыҡ бөтә донъяны солғап алды, ти.

Мең-мең йылдар буйына ҡараңғы төндән ялҡҡан ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр яҡтыла иркен тын алып, рәхәт кенә йәшәй башлағайнылар, ти, теге ғәйеп булған ҡорос тешле, еҙ тырнаҡлы арыҫлан үҙенең бөтә йыртҡыстары менән быларға тағы ла һөжүм башланы, ти. Тағы ла ете көн, ете төн буйына ҡаты һуғыш, аяуһыҙ ҡан ҡойош булған. Арыҫлан яҡлылар аҙаҡ барыбер еңелгән.

Бына шул ваҡыттан алып ҡыйыу ыласындар илендә бөтә ҡош-ҡорт, хайуандар, йәнлектәр рәхәт тормошта йәшәйҙәр, ти.



## ҠЫЙЫУ МЕНӘН БАТЫР

Борон-борон заманда ҡарурман артында, күҙ иңләмәҫлек алыҫ бер яланда йәшәгән, ти, ике ағай: Ҡыйыу менән Батыр. Улар һәр саҡ шат күңелле, бер-береһенә ихтирамлы булғандар. Уларҙың уйҙары ла, кәңәштәре лә уртаҡ ине, ти. Шулай йөрөй торғас, буштан-бушҡа ошо дуҫлыҡты ниндәйҙер бер ҡара йылан саҡҡан да киткән, ти. Ҡыйыу менән Батыр бер-береһен күрмәҫ, күрһәләр — күрешмәҫ, яҡшылап һөйләшмәҫ булдылар, ти.

Берҙән-бер көндө ҡояш байыған саҡта, йорт алдында осранып, былар һүҙгә килгәндәр. Һүҙ һүҙгә ялғанған, бәхәс килеп сыҡҡан: икеһенең ҡайһыһы кешегә ныҡыраҡ кәрәк — Ҡыйыумы, Батырмы, йәнәһе.

Оҙаҡ бәхәсләшкән был икәү. Был бәхәскә яуап таба алмай, төн уртаһын еткергәндәр. Иртәнсәк тағы башлағандар, тағы кис иткәндәр. Көн дә бәхәсләшеп-бәхәсләшеп, йоҡлап китер булғандар, ти. Шулай бәхәсләшә торғас, бер көндө иртә таңдан тороп, Ҡыйыу менән Батыр алыҫ юлға сыҡмаҡ булғандар. Юлда кемдең кешегә ныҡыраҡ кәрәген асыҡламаҡ булғандар.

Ҡыйыу менән Батыр бик күп юл үтеп, бер тар ғына аҫланға барып сығып, ҡайҙа барырға белмәй, тирә-яҡты ҡарап тора башлағандар, ти. Шул саҡ улар ҡаршыһына бер әбей килеп сыҡҡан, ти. Был әбейҙән улар бында бөтә халыҡтың ҡанын эсеүсе бер байҙың йәшәгәнен белгәндәр. Әбей уларға:

— Был байҙы үлтереү өсөн, һеҙгә бик ҡыйыу, батыр йөрәкле булырға кәрәк, — тигән.

Тик шунда ғына Ҡыйыу менән Батыр үҙҙәренең кешеләргә бер тигеҙ кәрәк икәнен аңлағандар. Аңлағандар ҙа, бәхәстәренән туҡтап, әбейгә рәхмәттәр уҡый-уҡый, артабан киткәндәр, ти.

Улар барып ике көн буйы бай менән көс һынашҡан. Шунан ғына уны еңеп ҡуйғандар, ти. Бөтә байлыҡты халыҡҡа таратҡандар, ти. Шул көндән алып Батыр менән Ҡыйыу донъяла иң яҡын, иң татыу дуҫ булып киткәндәр.

## МУЛЛА МЕНӘН «ФӘРЕШТӘ»

Әүәл заманда булған, ти, Хәлил тигән бер мулла. Уның булған, ти, дүрт ҡатыны. Был мулланы ҡунаҡҡа-фәлән саҡырһалар, ул һәр ваҡыт дүрт ҡатынын да алып бара торған булған. Бер ваҡыт был мулланы исем ҡушырға саҡырғандар. Шуны ғына көтөп торған кеүек, саҡырыусының артынан уҡ мулла ашҡа барырға юлға сығып киткән. Ҡатындары дүртәүләп арттараҡ ҡалғандар. Бер шаян ғына кеше, ҡараңғы төшөп килгән ваҡытта оҫтабикәләр үҙҙәре генә китеп барғанын белгәс, уларҙы ҡурҡытырға булған. Ул тиҙ генә тунын әйләндереп кейгән дә битенә ҡулында булған противогазын кейеп алған. Шунан оҫтабикәләрҙең арттарынан килеп еткән дә:

— Туҡтағыҙ әле, ниңә ҡараңғы төндә үҙегеҙ генә йөрөйһөгөҙ? — тигән.

Тауышҡа оҫтабикәләр әйләнеп ҡараһалар — ҙур танаулы, быяла күҙле «фәрештә» тора, ти. «Фәрештә»не күргәс, сырылдашып дүртеһе дүрт яҡҡа югерешәләр. Шул ваҡыт был кеше тиҙ генә югереп барып иң ҡарт оҫтабикәне тотоп ала. Шунан уға былай ти:

— Һин — иң ҡарт оҫтабикә. Башҡаларға ҡарағанда күберәк белергә тейешһең. Бынан былай мулланан башҡа урам буйында йөрөмәгеҙ. Мине алла ебәрҙе. Мулланан башҡа йөрөгәнегеҙҙе күргән дә һеҙгә әйтергә бына мине ебәрҙе. Әгәр был эшегеҙҙе тағы ҡабатлаһағыҙ, яҡшы булмаҫ, барығыҙ ҙа бер көндө үләрһеҙ,— тигән. «Фәрештә» һөйләп бөткәс, оҫтабикә:

— Ашҡа һуңға ҡалмаһам ярар ине, — тип һөйләнә-һөйләнә шап-шап атлап китеп барған. Ул барып кергәндә, мулла менән өс оҫтабикә түр башына менеп ултырып, һыйлана башлағандар ине, ти. Өлкән оҫтабикә барып кергәс, табын кинәт таралып китә. Барыһы ла уны һырып алалар.

— Ни булды, һөйлә әле, һөйлә,— тип төрлө яҡтан ҡысҡырыша башлайҙар. Оҫтабикә ипләп кенә түр башына менеп урын ала. Халыҡ ултырып бөткәс:

— Теге «фәрештә» мине килеп тотто ла, бына мине алла ебәрҙе, төндә мулланан башҡа урам буйында һеҙгә йөрөргә ярамай, тағы ла был эшегеҙ берәй тапҡыр ҡабатланһа, яҡшы булмаҫ, донъялар үҙгәрә башланы, тине. Бына шул,— тип оҫтабикә һүҙен бөтөрә. Халыҡ аптырап ҡала.

Был аштан һуң оҫтабикәләр мулланан башҡа тышҡа сығырға ла ҡурҡа башлайҙар. Муллаға ла «фәрештә» һүҙен тоторға тура килә.

Бер көндө ураҙа осоронда тәрәүех * уҡығанда, шул уҡ «фәрештә» мәсеткә барып керә лә бөтә халыҡты ҡыуып сығара. Был ҙур моронло, быяла күҙле «фәрештә» кергәс, наҙан халыҡ ҡурҡыша, нисек сығып киткәнен дә һиҙмәй ҡала. Ишектән сығып барғанда, «фәрештә» мулланың еңенән тота. Мулла ҡалтырана башлай. Ҡурҡышынан ҡысҡыра. Уға бер кем дә ярҙамға килмәй. Шул ваҡыт «фәрештә» уға:

— Һин бөгөндән башлап мәсеткә эҙ баҫма. Аңланыңмы? Әгәр ҙә мәсеткә яҡынан килһәң, шунда уҡ йығылып үләрһең,— тигән. «Фәрештә» ебәргәс, мулла:

— Килмәм,— тип кенә саҡ әйтә алған, үҙе шунда уҡ мәсеттән сығып тайған.

Муллаларҙан мәсетте комсомолдар бына шулай һис бер тауыш сығармайынса алғандар ҙа мәктәп яһағандар. Шул көндән башлап, мулла мәсеткә табан әйләнеп тә ҡарамаған, ти.

## НУЖАНЫҢ ҮЛЕМЕ

Элек заманда бер ҡарт ил гиҙеп, рәхәт сигеп йөрөгән, ти. Уның исеме Нужа булған, ти. Был Нужа тигән ҡарт һәр кемдең елкәһенә атлана икән дә, ғүмер буйы төшмәй, кешене яфалап, интектереп, болдороп йөрөй икән.



Шунан халыҡ бынан бик йөҙәгән, тамам аптыраған. Нишләргә? Тоталар ҙа муллаға киләләр, Нужанан ҡотолоу осон юл эҙләп, кәңәш итергә булалар.

— Нужанан бер ҙә ҡотолоп булмай бит әле, шуға ни аҡыл итергә юл өйрәтер инегеҙ,— тиҙәр.

— Һеҙ ҡарттар,— тип әйтте, ти, мулла,— улай бола күтәреп йөрөмәгеҙ. Нужа ул алла тарафынан ебәрелгән. Нужаһыҙ донъя булмай. Һәр кем уны үҙенең елкәһендә йөрөтөргә тейеш. Шуның осон ул кеше ахирәттә рәхәт күрәсәк. Яҙмыш ни ҡушҡан, шуға риза булып ҡына тороғоҙ. Былай йөрөмәгеҙ, гонаһлы булырһығыҙ.

Ә Нужа ҡарт үҙе ситтән генә килеп тыңлап тора икән. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ул кеткелдәп көлдө лә башҡаларҙың күҙенә күренмәй генә мулланың ҡолағына килеп бышылданы, ти: «Рәхмәт, мулла кем, молодец икәнһең. Бергә булайыҡ. Һин дә рәхәт йәшәрһең, мин дә»,— тип кәңәш беркеттеләр, ти.

Шунан былар тотондолар, ти, бергәләп халыҡты иҙергә! Ҡайҙа аслыҡ — шунда былар өсөн байлыҡ. Ҡайҙа үлем — шунда былар өсөн төшөм. Ҡайҙа күҙ-йәш менән ҡан — шунда былар өсөн байрам менән дан! Мулла ла байып киткән, Нужа ла һимереп киткән.

Был хәлгә түҙә алмай, ил ҡарттары батшаға киткәндәр.

— Шулай ҙа шулай, Нужа беҙгә көн бирмәй, мулла уны күрмәй, күрһә лә уға юл ҡуя, сөнки Нужа мулла тирмәненә һыу ҡоя,— тигәндәр улар батшаға.

Батша ҡарап торҙо ла, ти, ҡулы менән ымлап ҡына Армайын саҡырып алды, ти. Килеп етте, ти, Армай. Шунан батша әлеге ҡарттарға төртөп күрһәтте лә:

— Әҙерәк аҡылға өйрәтеп ал әле үҙҙәрен! — тип әйтте, ти.

Тотондо, ти, Армай тегеләрҙе туҡмарға. Ятҡырып, арҡаларын астырып, меңәр ҡамсы һуҡты ла батшаға килде, ти.

— Етерме, батшам, әллә тағы әҙерәк бирәйемме?

Батша әйтте, ти:

— Алла ебәргән Нужаға риза булмай йөрөгәндәре өсөн тағы меңәрҙе төшөр!

Армай тегеләргә тағы меңәрҙе төшөргән. Шунан был ҡарттарҙың һушы киткән. Уларҙы зинданға бикләп ҡуйғандар.

Былар батшаға ингәндә, Нужа күренмәй генә килеп, тағы тыңлап торған. Ҡарттарҙы ятҡырып туҡмағандар. Нужа шатлығынан һикергеләп йөрөй икән яуыҙың.

Ҡарттар һуштарына килгәс, күрәләр: әлеге Нужа зиндандың мөйөшөндә быларҙы үсектереп, көлөп ултыра, ти.

— Минән ҡотолорға уйлағайнығыҙ! Юҡ инде, хәҙер һеҙ бөтөнләй минең ҡулда,— тип әйтә, ти.

Инде хәҙер ни эшләргә? Ҡарттар зар илашып ултыралар, ә Нужа уның һайын һөйөнә. Тегендә аталарынан етем ҡалған балалар йәш түгеп, ас-ялаңғас ултыралар. Ә Нужа уның һайын һимерә. Бөтә ил өҫтөн ҡайғы-хәсрәт баҫып алды, ти. Ҡан-йәш дарья булып аҡты, ти. Кеше ҡайғыһына һөйөнөп, кеше күҙ йәшенә туйынып, Нужа бик яман һимереп китте, ти. Халыҡ тамам аптырапта ҡалды, ти.

Шулай ни эшләргә белмәй аптырап торғанда, илгә бер гүзәл кеше килеп сыкты, ти. Халыкты йыйып алды ла, ти, әйтте, ти:

— Нужаны еңеп, бәхетле тормошка сыккығыҙ килһә, берәм-берәм генә йөрөмәгеҙ. Барығыҙ бергә йыйылышып, көрәш асығыҙ,— тип әйтте, ти.— Кем теләй? Давай, бергә ойошоп барайык! — тип әйтте, ти, был.

Шунан халыктар бөтәһе лә бергә йыйылып, Нужаны бөтә ерҙән кыуып сығарҙылар, ти. Уны яклап килгән батшаны, байҙарҙы колатып төшөрҙөләр ҙә, ти, илдә яңы тормош короп ебәрҙеләр, ти. Ә Нужа бөтөнләй әллә кайҙа касты, ти. Куркышынан ете кат ер аҫтына китеп юғалды, ти.

Нужаһыҙ тормош бик тиҙ алға киткән. Илгә байлык, бәхет килгән. Бөтә ер — ал да гөл, бөтә ил бакса булды, ти. Эшлә лә ял ит, уйна ла көл!

Шулай бер нисә йыл үтеп киткән. Бер вакыт шул Нужа, бик асыға башлағас, касып кына үҙенең элекке хужа булып йөрөгән ерҙәренә килеп сығырға булды, ти. Хәле бөткән, ти, бының: оҙон таякка таянған, лаҫтыр кейемен кейгән, аркаһына ямаулы ток аҫкан, ти. Кемдән булһа ла ярҙам һорарға тип, колхоз баҫыуы буйлап бара ятканда, күрә: алда бер көтөү һимеҙ мал йөрөй. Көтөү янында баштан-аяк күндән кейенгән бер кеше баҫып тора.

— Һаумы, туған, был һинең көтөүме?

— Әйе, карт, был беҙҙең көтөү.

— Ай-бай, бик ҙур икән. Тукта, тукта, был кем, һин Әлекәй көтөүсе түгелме һуң?

— Әйе, карт, мине элек Әлекәй тип кенә йөрөтәләр ине, хәҙер үҙ исемем кайтты: Ғәлекәй, дөрөҫө — Ғәлимйән булам.

— Һай, Ғәлимйән кусты, һин мине таныйһыңдыр әле. Беҙ бит элек һинең менән бик дуҫ инек,— тип әйтте, ти, Нужа.

— Таныйым, таныйым. Һин бында нишләп йөрөйһөң? — тип әйтте, ти, көтөүсе.

— Һай, кусты, һорама инде. Был илдә миңә йәшәр өсөн мөйөш калманы. Тамам йөҙәгәс, бына һиңә килеп сыктым әле. Элекке дуҫ, мин әйтәм, үҙе янына, моғайын, һыйындырыр, тим. Миңә хәҙер күп тә кәрәкмәй. Йылы мөйөш булһа, шул етә...

— Ә, юк инде, Нужа хәҙрәттәре, мин һине принимать итә алмайым,— тип әйтте, ти, көтөүсе.— Килгән кешене беҙ якшы хөрмәт менән каршылайбыҙ. Ә һинең өсөн урын юк!

Нужаның күҙ йәштәре атылып килеп сыкты, ти. Шунан ул тағы юл буйлап китте, ти. Әй бара, ти, әй бара, ти. Донъя бөтөнләй үҙгәреп киткән бит, малай! Юлдан выжт та гөжт автомобилдәр үтеп торалар. Берәүһе Нужаны тапатып китә яҙҙы, ти. Ул самакатка! Ул теге елсәпит! Ул матациклиттәр! Ул айраплан! Ул караптар!.. Ерҙә лә машина, күктә лә машина, һыуҙа ла машина... Матур-матур егеттәр, купшы кейенгән кыҙҙар ултырған ул машиналарҙың башына. Бер ҙә куркып тормай йөрөтәләр. Нужаның иҫе китеп, йығыла яҙҙы, ти. Шунан бара торғас, караһа: донъя һелкетеп, пырылдап, баҫыуҙан артына әллә нисә һабан таккан бер машина килә. Курка-курка ғына килеп етте лә Нужа элеккесә сәләм бирҙе, ти.



— Ни йомош, бабай? — тип әйтте, ти, теге тракторист.

— Карап торам, торам да, кусты, — тип әйтте, ти, Нужа, — һин теге мулланың работниге Сәлекәй батрак түгелме, балам?

— Әйе, элек мине Сәлекәй тип йөрөтәләр ине. Ә хәҙер — Сәлимйән! Хәҙер батрак та түгел, ә миллионер!

Нужа әйтә:

— Ай-бай, Сәлимйән кусты, һинең энтәр койло икән. Бик шәп. Һин мине таный торғанһыңдыр әле: элек бит беҙ бик дуҫ инек.

Тракторист әйтә:

— Бар ине ундай вакыттар. Хәҙер беҙ һине онотток инде!

Нужа сөсө телләнеп тағы һүҙ куша:

— Һеҙ онотһағыҙ ҙа, мин онотмаһым, туғанкайым, гел уйлап йөрөнөм. Әле бына, иҫке дуҫтар сығарып ташламаҫтар әле, тип киләм. Берәй йылы мөйөш бирегеҙсе.

Тракторист мыйыкты бороп алды ла:

— Беҙ һинең кеүек яфаны кайтарыр өсөн тукмәнек канды. Булмай, карт, юлыңда бул! — тип тракторын гөрөлдәтеп китеп тә барҙы, ти.

Нужа тағы ла илай-илай китте, ти. Әй бара, ти, был, әй бара, ти. Унда һуғылып карай, бында һуғылып карай, ти. Бер ерҙә лә тегеңә сәләм биреүсе юк. Һәр кем үҙ эшендә — бөтә ер гөжләп тора, радиолар уйнап тора, йырсылар йырлап тора, сәсәндәр һөйләп тора...

Нужа йөрөй торғас, бер ауылға килеп инә. Караһа, бөтә нәмә ялт итеп тора. Бары ла яңы, бары ла калай түбәле. Бөтә ерҙә телефон да электр... Нишләргә? Тота ла бер күпер төбөнә табан юнәлә. Ни өсөн тиһәң, унда бәләкәс кенә бер землянкала нужаны бик күп күргән Хәлекәй хәйерсе йәшәгән икән элек. Нужа шунда бара. Килһә — землянка ла юк, чорт та юк. Күперҙән өҫтәрәк бик купшы бер йорт тора. Хәлекәй хәйерсенең йорто тап ошо икән.

— Һаумы, Хәлекәй туған? — ти Нужа.

— Юк, бабай, мин Хәлекәй түгел. Мин элек Хәлекәй инем, хәҙер — Хәлимйән. Колхозник Хәлимйән булам мин.

— Һин мине таныйһыңдыр әле, Хәлимйән иптәш,— тигән була Нужа,—беҙ бит элек бик дуҫ инек. Мин бит һинең түреңдә генә ултыра инем.

Теге колхозник әйтә:

— Таныуын таныйым. Һинән котолоуға шатланып бөтә алмайым. Бына күр! Әгәр һинән котолмаған булһак, миңә ошондай байлык килер инеме ни? — ти.

Карайҙар — келәт тулы бойҙай, йорт тулы мал, бакса тулы һәр төрлө емеш, өй эсе тулы байлык.

Нужа тамам койолоп төштө, ти, шул сак. Шунан хәле бөтөп йығыла яҙҙы, ти. Сак-сак кына телгә килеп һораны, ти:

— Кем бирҙе һеҙгә был байлыкты?

— Колхоз бирҙе.

— Миңә лә әҙ генә бирегеҙсе шул колхозығыҙҙы.

— Юк инде. Колхозды биреп булмай, ул беҙҙең иң кәҙерле нәмәбеҙ. Йә, иҫән сағыңда юлыңда бул!

Нужа ҡарт, башына һуҡҡан кеүек, сығып китте, ти, бынан.

Инде ҡайҙа барырға? Барған бер ерҙә — отказ. Бер ерҙә лә ҡабул итмәйҙәр. Шулай итеп, был бик оҙаҡ ауылдан-ауылға, ҡаланан-ҡалаға, колхоздан-колхозға йөрөп ҡараны, ти. «Яҡын килмә»,— тип кенә торалар. Бөтә ерҙән тегене ҡыуып ебәрәләр. Ә теге ләғин, әрһеҙ нәмә, тағы килә, тағы сәсә телләнеп, төрлө һүрәттәргә инеп, килеп ҡарай. Берәү ҙә алырға теләмәй. Кем һуң инде ирекле баштан Нужаны алһын!

Бер көндө Нужа тамам аптырап йөрөй-йөрөй юл буйына килеп йығылған. Әлеге Ғәлимйән ферма малдарын алып ҡайтып килә икән. Шунан юлда ятҡан Нужанан ҡурҡышып, малдар кире боролған. Көтөүсе Ғәлимйән сыбыртҡыһын шартлатып килеп етә. Килһә, әлеге Нужа ятҡан еренән бер һарыкты электерергә самалай икән. Ғәлимйән ҡыҙып киткән. Сыбыртҡыһын шартлатып алған да: «Ах һин, яуыз, беҙҙең колхозға зыян килтерергә йөрөйһөңмө әле?» — тип тегене һуҡтыра башлаған. Әй һуҡтыра, ти, был, әй һуҡтыра, ти, ә Нужа баҡыу ярып аҡыра, ти. Ауыл халҡы йыйылған. Әлеге тракторист Сәлимйән да, колхозсы Хәлимйән да, башҡалар ҙа бөтә ауыл менән сыҡтылар, ти, бында. Алдылар, ти, былар күҫәктаяҡ, балта-бысаҡ, көрәк-һәнәк, тотондолар, ти, Нужаны туҡмарға!

Шунан тегене туҡмап-туҡмап, үлтереп, күпер башына, сүптәр торған ергә илтеп, тиреҫ аҫтына күмеп ҡуйҙылар, ти. Шулай итеп, Нужаның тамырын ҡороттолар, ти.

Тфү! Тфү! Ана бара юлы!

Шуның менән әкиәтте бөтөрәбеҙ, һөйләүсене ғәйеп итмәүегеҙҙе үтенәбеҙ, Нужа килмәһен өсөн, тағы бер төкөрәбеҙ ҙә урындарыбыҙҙан торабыҙ. Уныһын да быныһын, әйтергә кәрәк шуныһын: әшең булһа йөҙ, туклығы килер көҙ. Байлығы булған киләткә ҡар ҡунмаҫ, колхоздар тук булһа, Нужа беҙгә ҡабат килә алмаҫ. Әкиәт ары — мин бире, бына шул инде был әкиәттең сере!

## ҠӘМӘН МЕНӘН СӘМӘН, КАРТУФ СӘСКӘН СӘЛМӘН

Борон-борон заманда, һайыҫҡандар ала саҡта, олатайҙар бала саҡта, булған, ти, Аҡбулат тигән бер бабай менән Һылыубикә тигән бер әбей. Уларҙың өс улы булған, ти.

Аҡбулат ҡарт ғүмер буйына сажин ҡырҡҡан да ҡыуған ҡыуған, ҡарағай йыҡҡан да таранса ярған, туҙ һыҙырған да дегет яҡҡан, ерек ҡырҡҡан да күмер күсергән. Улдары ир етеүгә бабай менән әбей бик ҡартайып киткән, ти.

Быларҙың өлкән ике улы, Ҡәмән менән Сәмән, һүҙгә һүрән, эшкә һүлпән, йомош ҡушылһа, елкәләрен тырнаусан, ашарға тигәндә — йүгереп килеүсән, етәкләшеп бергә йөрөүсән, береһе эшләгәндә, икенсеһе ҡул ҡаушырып, ауыҙын асып, ҡарап тороусан булғандар, ти. Кинйә улдары, Сәлмән исемлеһе, эшкә сапсан, йомошҡа егәрле, һүҙгә үткер, уйға зирәк булған. Тотонған бер эшен ҡарап туйғыһыҙ итеп эшләр булған. Бесән сабырға тотондомо—һә тигәнсе бер күбә бесәнең сабып та ҡуйылған, утын ҡырҡырға тотондомо — алды-артына ҡарағансы бер йөк утын өйөп тә ҡуйылған, ти. Бабай менән әбей кинйә улдарынан кинәнеп бөтә алмағандар. Сәлмәндең былай булыуы Ҡәмән менән Сәмәнгә бер ҙә оҡшамаған. Уларҙың көнсөлөгө килгән.

Тик Сәлмәндең башында ике бармаҡ баҫымындай ялтыр урын булған. Көнсөл ағалары осон был етә ҡалған. Улар ҡустыларын гел генә:

— Сәлмән таҙ, ялтыр баш,— тип үсекләр булғандар. Ә Сәлмән бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Таҙ кеше таҙа була, башы ялтыр була, ә аҡылы алтын була,— тип йылмайып ҡына ҡуя торған булған.

Бер көндө Аҡбулат бабай ауырып киткән дә улдарын үҙ янына саҡырып алған. Ул үҙе иҫән-һау саҡта барлы-юҡлы мөлкәтен улдарына бүлеп бирмәксе булған: өлкән улы Ҡәмәнгә — балта, уртансы улы Сәмәнгә — бысҡы, кинйә улы Сәлмәнгә бер көйлә тейгән.

Күп тә тормаҫтан Аҡбулат ҡарт үлеп киткән. Былар әсәләре менән бергәләп үҙҙәре генә донъя көтә башлағандар.

Берҙән-бер көндө әсәләре:

— Балаларым, бер ағас та утын ҡалмаған икән. Утынға барып ҡайтыр инегеҙ,— тигән.

Сәлмән шунда уҡ һикереп тороп, йәһәт кенә сәкмәнен кейеп, билен һыға быуған да ағаларына ҡараған. Ә Ҡәмән менән Сәмәндең тиҙ генә ҡуҙғалғыһы килмәй тора икән. Улар тик әсәләренең күҙ ҡараштарынан оялып ҡына кирелгәндәр, һуҙылғандар ҙа, Сәлмәнгә ҡарап:

— Ҡара әле, кейенеп тә бөткән. Бысҡы менән балтаны ал да атлай тор, беҙ һине ҡыуып етербеҙ,— тигәндәр уға.

— Ярар,— тигән дә Сәлмән, балтаны биленә ҡыҫтырып, бысҡыны яурынына һалып, көйләһен ҡулына тотоп сығып та киткән.

Йыр артынан йыр башлап, йырлап-көйләп бара торғас, Сәлмән урманға килеп еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Сисенеп ташлаған да, һырғыйырaҡ ағастарҙы һайлап, берәм-берәм йығырға керешеп тә китте, ти, был. Йығып ебәрә лә шунда уҡ ботап, бысып, ярып өйөп ҡуя бара, ти.

Бер тын эшләгән был. Ике тын эшләгән. Төш ауып киткән, ағалары һаман юҡ та юҡ. Тағы бер тын эшләп алыуға Ҡәмән менән Сәмән, алпан-толпан атлап, ах та ух килеп, бер киҫкәгә барып ултырғандар, ти. Ҡараһалар — Сәлмән емертеп эшләп ташлаған. Быларҙың эстәре бошоп киткән.

— Әй ялтыр баш, ялтыр баш. Беҙҙең балта менән бысҡыға хужа булып та алғанһың икән. Үтмәҫләп тә бөтөргәнһеңдер әле. Бир үҙебеҙгә. Шәп булһаң, ағасты, ана, көйләң менән йыҡ,— тип ҡысҡыралар, ти, былар.

Шунда улар Сәлмәндән балта менән бысҡыны, аҙыҡ төрөлгән төйөнсөктө тартып алдылар ҙа әллә ҡайҙа китеп тә юғалдылар, ти. Сәлмән көйләһен тотоп торған да ҡалған.

Шулай ҙа ул аптырап тормаған: йығылған ағастарҙың ҡабығын

кәйләһе менән һыҙыра башлаған. «Юҡә һыҙырырмын, һалабаш төшөрормон дә арҡан ишермен, септә һуғырмын»,— тип уйлаған ул.

Ҡәмән менән Сәмән шыр бешәлек араһына инеп, төйөнсоктәге аҙыкты ашап бөтөргәндәр ҙә тағы Сәлмән янына килгәндәр.

— Их һин, алйот,— тиҙәр икән улар.— Бәләгә юлыктырҙың бит беҙҙе. Быскы менән балтаны эштән сығарып, үтмәҫләп бөтөргәнһең бит. Быса-быса ҡулдарыбыҙ ҡабарып бөттө, билдәребеҙ һына яҙҙы. Үлер хәлебеҙ юҡ инде, ҡайтып китәбеҙ, утынды иртәгә килеп алырбыҙ.

Балта менән бысҡыны Сәлмәнгә ташлап ҡалдырып, Ҡәмән менән Сәмән өйгә ҡайтып киткәндәр. Сәлмән яңғыҙы тағы бик күп утын ҡырҡып, әңер төшкәс кенә ҡайтып китте, ти. Эштән арып ҡайтҡан Сәлмән йоҡларға яткас та, Ҡәмән менән Сәмән бер үгеҙҙе мөгөҙөнән тотоп алып, ике тәртә араһына ҡыҫтырҙылар ҙа, ҡыҫҡа күкрәк арбаға ярышлап ултырып, үгеҙҙең ҡабырғаһына шап-шап һуғып, урманға китеп барҙылар, ти. Килеп етһәләр, аптырап ҡалғандар: Сәлмән эшләп киткән ерҙә ун-ун биш йоккә лә һыймаҫлыҡ утын өйөлөп ята. Ҡәмән менән Сәмән әҙер утынды тауҙай итеп, арбаны шығырҙатҡансы тейәгәндәр, ә өйөүле утын кәмемәгән дә. Ни эшләргә? Был ике эшлекһеҙҙең асыуы ҡабара.

— Сәлмән үҙе килһә, утынды икәүебеҙҙән дә күберәк алып ҡайтыр. Әсәйебеҙ беҙҙе түгел, уны маҡтар. Берәй аҡыл уйлап табырға кәрәк,— тиҙәр былар.

Шул ерҙә Ҡәмән менән Сәмән:

— Туҡта, ҡылайыҡ әле ҡылыкты,— тип кәңәш беркетәләр ҙә ҡустыларының утынын үртәп китергә булалар. Ут тортоп, яндырып бөтөрәләр ҙә ҡайтып китәләр. Ә ҡайтҡас:

— Әсәй, бына беҙ күпме утын ҡырҡҡанбыҙ!

— Бына утындың ниндәйен алып ҡайтырға кәрәк ул! — тип маҡтаналар.

Иртәгеһен таң менән Сәлмән дә, һыртаҡ үгеҙҙе егеп, урманға килә. Ҡараһа — өйөп киткән утын урынында күгәреп яткан көл өйөмөнән башка бер нәмә лә юҡ, ти. Ни хәл итмәк кәрәк? Әрәм булған утыны өсөн бик бошоноп, яңынан утын ҡырҡып тормайынса, көлдөң үҙен йыйып алып, арбаһына өйөп тейәгән дә ҡайтҡан да киткән, ти.

Үгеҙ, ҡәһәрең, ашығыуҙың ни икәнен белмәй: ығып ҡына, атлайыммы, атламайыммы тигәндәй итеп баҫа аяҡтарын. Сәлмән көл өҫтөнә түшәлгән сәкмән өҫтөнә салҡатан ятып оҙон көйҙәр көйләп барғанда, бер заман үгеҙ шып туктай ҙа ҡуя. Сәлмән башын ҡалҡытып ҡараһа — һыртаҡ үгеҙҙең бер ҡапҡа алдында торғанын күрә. Абайлабыраҡ ҡараһа, был ҡапҡа күрше рус ауылындағы белешенеке булып сыға. Инде ни эшләргә? Көн дә кисләп бара, үгеҙҙең дә көйшәп алғыһы килгәндер. Сәлмәндең үҙенең дә тамаҡ ялғап алаһы барҙыр. Әмәлгә ярағандай, йорт хужаһы, асмалы тәҙрәһенән башын тығып:

— Әйҙә, әйҙә, Сәлмән знаком, рәхим ит! — тип саҡыра ла башлаған.

Ә Сәлмән:



— Мөмкинме, белеш? Үгеҙҙе көйшәндереп алырға ине,— тигән була, ти. Йорт хужаһы югереп сығып ҡапкаһын аса ла бүркен һалып, башын эйеп, Сәлмәнде хөрмәтләп ҡаршы ала.

Инеп сәй эсеп, картуф ашап, хәл-әхүәл һорашып ултырғанда, Сәлмәндең белеше:

— Көлдө ҡайҙа алып бараһың? — тип һораны, ти.

Сәлмән эштең ҡалай-ҡалай булғанын энәһенә-ептән һөйләп бирҙе, ти. Белеше уны йәлләп:

— Көлөңдө анау кәртә артына түк тә, арбаңа картуф тейә,— тип әйтте, ти.— Әсәйеңә ашатырһың. Өйөңдә ашағы ултыртын та карарһығыҙ. Бәхетең булһа, үҫеп тә китер.

Сәлмән көлдө белешенең кәртә артына ауҙарған да ул биргән картуфты тейәп алған. Ул белешенә күп рәхмәттәр әйтеп, оҙон ғүмер теләп, ҡайтып киткән, ти. Был йомшаҡ аҙыҡка әсәһенең ҡыуанасағы, белешенән күрмәксе, һәйбәтләп картуф сәсеп ебәрәсәге тураһында юлдың буйынан-буйына уйлап ҡайтып бара икән Сәлмән.

Ярай, Сәлмән Ҡыҙыл йылғаһындай оҙон-оҙон уйҙар уйлап, үгеҙен ыктырып атлатып ҡайта торһон, ә беҙ уның белешенә әйләнеп киләйек.

Ул иртәгеһенә иртә менән картуф ерен һөрөп ебәргән дә картуф ултырткан. Ә Сәлмән түгеп киткән теге көлдө картуф сәсер алдынан бөтә баҡсаһына таратып сыҡҡан, ти. Был юлы уның картуфы емерелеп уңған, ти. Хатта ҡуйыр урын да таба алмай аптырап бөткән, ти. Шул арҡала тирә-яҡка уның даны киткән, ти. Бары ла килэләр, һорашалар, белешәләр, ти, ә ул эштең хикмәте ниҙә булыуын һөйләп аңлатып бирә икән, ти.

Ярай, ул һөйләй торһон, күрше-күләне тыңлай торһон, ә беҙ йәнә Сәлмәнгә килэйек.

Сәлмән ҡайтып еткәс, әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешереп ебәргән, ти. Уны дүртәүләп ултырып, бик яратып ашағандар. Шунан Сәлмән баҡсаны ҡаҙырға сығып киткән.

Сәлмән эшләй, тирләп-бешеп ҡаҙына, ә Ҡәмән менән Сәмән кояшта ҡыҙына, ти.

Бер заман Ҡәмән менән Сәмән Сәлмән янына килделәр ҙә һорашмаҡ булдылар, ти.

— Әйт әле, Сәлмән ҡусты,— тип әйттеләр, ти, былар,— һин, ни эшләп утын алырға барып, картуф тейәп ҡайттың һуң әле?

— Тәүҙә көл тейәнем. Шунан көлдө картуфка алмаштым,— тип һөйләп алып киткән, ти, Сәлмән, ағаларын шаяртып.— Утынды алып ҡайтайым, тип барһам, кисә өйөп киткән утыным урынында көл өйөлөп ята. Әллә ҡайһы һармағы үртәп киткән,— тигән булды, ти, ул.— Бөтөнләй ҡайғыға ҡалдым,— тип үк ебәрҙе, ти.— Урманға барып буш ҡайтыу әҙәм көлкөһө бит инде. Түҙә алманым, ҡайғынан да, ғәрлектән дә көлгә ятып аунай башланым. Үҙем аунайым, үҙем үкереп илайым. Шунан, туҡта әле, мин әйтәм, күпме генә аунап илаһам да, файҙа сыҡмаҫ. Булмаһа, шул көлдөң үҙен тейәп алайым да ҡайтайым тигән уй килде башыма. Ә урманды сыҡ-

ҡас: «Ни эшләп үҙебеҙҙең ауылға көл тарттырып йөрөйөм һуң әле мин. Күрше ауылға илтәйем дә картуфҡа алмашайым үҙен»,— тип уйланым, шунан күрше ауылға барып индем дә: «Кем көлгә картуф алмаштыра? Көлдөң бик шәбе бар»,— тип өс тапҡыр ҡысҡырғайным, биҙрә-биҙрә картуф күтәргән бисә-сәсәләр арбамды һырып алдылар. Тәүҙә көлдөң сортын тикшереп ҡаранылар. Шунан бер бисә: «Көлөң һәйбәт кенә икән дә һәйбәтлеген. Тик миңә кеше ятып аунаған көл кәрәк ине шул»,— ти. «Был һин теләгән көлдөң тап үҙе инде,— мин әйтәм.— Өҫтөндә үҙем аунаным. Ышанмаһаң, бына өҫ-башымды ҡара, көл теймәгән берәй ерем бармы,— типем тегеңә.— Ышандылар, әлбиттә. Кеше аунаған көл был ауылда ҡиммәт йөрөй икән. Бер биҙрәһенә ике биҙрә картуф бирәләр, кеше аунамағанына — бер биҙрә генә. Шулай итеп, мин туғыҙ биҙрә көлгә ун һигеҙ биҙрә картуф алып ҡайттым...»

Шулай тигән дә Сәлмән, тағы эшкә керешкән, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән әкрен генә сығып, кешегә күренмәй генә урманға ыҫҡындылар, ти. Өс көн буйына ҡайтмайынса утын ҡырҡтылар, ти, былар. Ҡырҡтылар ҙа өйөп һалып үртәнеләр, ҡырҡтылар ҙа өйөп һалып үртәнеләр, ти. Шунан дүртенсе көнгә сыҡҡас, көл өйөмө янына килеп, уйланып торалар, ти:

— Көлгә ятып аунауын аунап булыр инде уның, бына илауын нисек иларбыҙ, бер ҙә илағы килмәй бит әле,— ти икән Ҡәмән.

— Иламаһаҡ та ярайҙыр. Беҙҙең өсөн Сәлмән илаған бит инде. Көл өҫтөндә илай-илай аунап ятырға беҙҙең ни ҡайғыбыҙ бар? — ти икән Сәмән.

Шунан улар борҡолдоғон сығарып, көлгә ятып бик оҙаҡ аунанылар ҙа, ти, тейәп күрше Ишбирҙе ауылына киттеләр, ти. Ауылға барып инеү менән:

— Кем көлгә картуф алмаштыра? Көлдөң кәттәһе, икәүләп ятып аунағаны бар! — тип өс тапҡыр ҡысҡырҙылар, ти.

Башта был ауыл кешеләре уларға, шаяртып ҡысҡыраларҙыр, тип көлөп ҡарағандар. Ләкин тегеләрҙең бер туҡтамай урам буйлап, ҡолаҡты ярырҙай итеп, һөрәнләп барыуҙарын күргәс, асыуҙары килгән кешеләр урамға йүгереп сыҡҡандар.

— Был ниндәй алйот бәндәләр? Башында әҙерәк аҡылы булған кеше көлгә картуф алмаштыралыр шул!

— Ауылыбыҙҙа картуф ултыртыусы әҙ булыуҙан көлөп, беҙҙе мыҫҡыл итеп йөрөйҙәр улар,— тип Ҡәмән менән Сәмәнде тотоп алалар ҙа, уңлы-һуллы, яҙа-йоҙа бер-икене биреп, «аҡылға өйрәтеп», көл тейәгән арбаларына һуҙып һалып, ҡайтарып ебәрәләр.

Кеше күҙенә күренергә ғәрләнеп, Ҡәмән менән Сәмән күҙ бәйләнгәс кенә үҙ ауылдарына ҡайтып ингәндәр, ти. Ҡайтһалар, Сәлмән бөтә ерен ҡаҙып бөтөргән, хатта ҡул тырмаһы менән тырматып, иртәгә иртүк картуф ултыртырға әҙерләп ҡуйған. Шул ерҙә Ҡәмән менән Сәмән:

— Был бәндә беҙҙе әҙәм көлкөһөнә ҡалдырып, хур итте, үҙен дә шыма ғына итеп төп башына ултыртайыҡ әле,— тип кәңәш ҡорғандар.



Теге алып ҡайтҡан көлдәрен улар баҡсаға таратып тороп түгәләр. Шунан инде, Сәлмән һиҙмәһен тип, көлдө тупраҡҡа аралаштырып, бөтә ҡаҙылған ерҙе Сәлмәндең үҙе кеүек итеп, ҡул тырмаһы менән тырматып сығалар.

— Һемәйттек тегене! — тип ҡыуаныша-ҡыуаныша йөрөйҙәр икән былар.

— Бына үҫһен инде картуфың! Көл иләп кенә картуфтың тамырын ҡырҡһын әле,— тип көлөшәләр икән улар.

Былай ҙа тирҙәләп, арып ҡайтҡан Ҡәмән менән Сәмәнгә баҡсала эшләү етә ҡалған. Йыуынып, өйгә инеп йоҡлармыҡ та хәлдәре ҡалмай быларҙың.

Иртәгеһен таң менән Сәлмән сыға ла баҡса тултырып картуф ултырта. Эште бөтөрөп, өйгә инеп барғанда, үлек кеүек йоҡлап ятҡан ағаларын күреп, шарҡылдап көлөп ебәрә. Көлмәҫлек тә түгел шул — уларҙың тештәре генә йылтырап күренә, баштан-аяҡ көл-күмер менән бысранып бөткәндәр.

Шул ерҙә Ҡәмән менән Сәмән һикереп торҙолар ҙа Сәлмәндең яғаһынан алдылар, ти.

— Һинән күрмәксе, көл биреп картуф алырға барып, әҙәм көлкөһөнә ҡалып ҡайттыҡ. Енеңде сығарабыҙ хәҙер үҙеңдең,— тип тегене бөрөп кенә алып баралар, ти, былар.

— Ғәйеп үҙегеҙҙәләр әле. Мин эшләгәнсә эшләмәгәнһегеҙҙер әле, моғайын,— ти икән Сәлмән.— Хәҙер тикшереп ҡарайыҡ. Урманға барҙығыҙмы?

— Барҙыҡ.

— Утын үртәп көл яһанығыҙмы?

— Яһаныҡ.

— Көлгә ятып аунанығыҙмы?

— Аунаныҡ.

— Ә аунағанда күҙ йәшегеҙҙе сығарып иланығыҙмы?

— Юҡ, илап булманы. Уның урынына, көл менән күрше ауылға барғас иланыҡ,— тиҙәр тегеләр.

— Уныһы иҫәпкә инмәй,— ти Сәлмән.— Ғәйеп үҙегеҙҙә: көлдө тейәрҙән элек өҫтөндә аунап иламағас, үҙегеҙҙе ауылда илатҡандар.

Ҡәмән менән Сәмән бер-береһенә ҡарашты ла:

— Ғәйеп үҙебеҙҙә булған икән шул,— тип әйттеләр, ти.

Коҙ көнө Сәлмән баҡсанан быйма башы ҙурлығы эре картуф йыйып алды, ти. Әсәһе ҡаҙан тултырып картуф бешерҙе, ти. Ә Ҡәмән менән Сәмән картуф ашарға ултырырға ҡыймайыраҡ торалар икән, ти. Шунан Сәлмән:

— Ултырығыҙ, ағайҙар. Был картуфтың былай уңыуында һеҙ ҙә күп тырыштыҡ күрһәттегеҙ бит. Өс көн буйы кос түгеп, өҫтәүенә ҡолаҡ төбөгөҙгә ала-ала бер йоҡ көл килтерҙегеҙ. Көлдө, миңә һиҙҙермәҫкә тырышып, төндә баҡсаға һиптегеҙ. Ә картуфты уңдырыр өсөн көл бик кәрәк аҙыҡ икән ул,— тип һөйләп аңлатып бирҙе, ти.

Шул көндән бирле Ҡәмән менән Сәмән ҡустыларына ылығып, өс туған иң яҡын дуҫ булып, осоһо ла берҙәй эшлекле, берҙәй уң-

ған булып китте, ти. Шул көндән башлап Сәлмәндең тирә-яҡҡа даны таралып, уны картуф сәскән Сәлмән тип йөрөтә башланылар, ти.

Әкиәтем ары китте, үҙем бире ҡалдым.

## ИЛМӘТ МЕНӘН КИЛМӘТ

Ҡайҙалыр шунда, Урал ҡуйынында, Ағиҙел буйында, уйһыу-уйпат урында, булған, ти, бер колхоз. Башҡа колхоздарҙағы кеүек унда ла күмәкләшеп, бергәләшеп эшләйҙәр, ти: ер һөрәләр, ашлыҡ сәсәләр, ти; бесән сабалар, мал ҡарайҙар, ти; көҙөн уңыш бүлеп, байрам итәләр, ти.

Ошо колхозда йәшәгән, ти, ике күрше. Береһе Илмәт исемле, икенсеһе Килмәт исемле, ти. Илмәт исемлеһе бик уңған, Килмәт исемлеһе бик ялҡау булған, ти. Илмәт һәр йылды мең хеҙмәт көнө эшләгән, Килмәттең эшләп алғаны ярты ҡышҡа ла етмәгән, ти.

Берҙән-бер көндө ялҡау Килмәт йоҡоһонан уяна ла, торорға иренеп, кирелә-һуҙыла ҡарауатта ята икән. Шул саҡ тәҙрәнән Ҡояш килеп ингән, ти. Иҙән буйлап йөрөгән-йөрөгән дә Ҡояш килеп тегенең битенә төшкән, ти. Ялҡау Килмәт икенсе яҡҡа боролоп ятҡан, ти. Ҡояш һаман тиҙ генә китмәгән: тегенең елкәһен ҡыҙҙыра башлаған. Килмәт асыуынан юрғанына һуҙылған, бөркәнеп шул Ҡояштан ҡотолайым әле, тип уйлаған. Ләкин Ҡояш уға ирек бирмәгән, тиҙ генә ҡолағынан эләктереп алған да тартып торғоҙған, ти.

Килмәт кирелгән-һуҙылған да өҫтәл янына килеп ултырған. Оҙаҡ йоҡлай торғас, асығып киткән, ти, был. Ә өҫтәл өҫтө буш — бер ни ҙә юҡ. Тегендә ҡарай, бында ҡарай, ашарға таба алмай. Сөнки бар булғанын күптән ашап бөткән икән инде ул. Нишләмәк кәрәк? Күршеһе Илмәттән үтескә һорап торорға булған был.

Килмәт әкрен генә Илмәткә инә. Инһә — Илмәт өйҙә юҡ, ти, иртә үк тороп баҫыуға киткән, ти. Килмәт яй ғына атлап китә баҫыуға, күршеһе Илмәт янына. Килһә — Илмәт инде әллә ҡасан эшен бөтөргән дә икенсе ергә киткән, ти. Килмәт нишләһен инде, тағы эҙләп китә быны. Китә, китә, Илмәт эшләгән ергә барып етә. Ҡараһа — Илмәт бында ла юҡ, күптән эшен бөтөргән дә өсөнсө ергә күскән, ти. Шулай Килмәт күршеһе Илмәт артынан көн буйы йөрөй-йөрөй ҙә, алйып, хәлдән тайып, бер ағас төбөнә күләткәгә килеп йығыла.

Көн дә кисәйеп бара икән инде, Ҡояш та байыу яғына табанырак китеп бара, ти. Ул әкрен-әкрен генә япраҡ араларынан ғына күҙен ҡыҫып, ергә табан төшөп килгән сағында, ағас төбөндә ятҡан Килмәтте күреп ҡалды, ти. Шунан ағасты икенсе яҡлап килеп тә сыҡты, ти.

— Нишләп ятаһың, Килмәт ҡусты, бында? — тип әйтте, ти, Ҡояш.— Мин һине бит ағас төбөндә ятыр өсөн ҡолағыңдан тартып уятманым.



Килмәт тәүҙә аптырап ҡалған. Оялыуынан, ыҡ-мыҡ итеп, яуап бирә алмай торған, ти. Шунан эште хәйләгә борған, ти.

— Шуны уйлап ята инем әле, Ҡояш апай,— тип әйткән булды, ти, Килмәт.— Бына һин бер ҙә кешегә тигеҙ ҡарамайһың икән.

— Минме? — тип әйтте, ти, Ҡояш.— Алдайһың, Килмәт ҡусты, минең өсөн бөтә донъя бер.

— Юҡ шул, Ҡояш апай, һин донъяға бары өс йөҙ алтмыш биш көн бирәһең. Ә бына минең күрше Илмәттең көнө меңгә тула. Нисек ул алай? Ә?

Ҡояш үҙе лә аптырабыраҡ ҡалған, ти.

— Нишләп һуң ул былай булған? — тип әйтте, ти, Ҡояш.— Мин бит, ысынлап та, йыл әйләнәһенә ни бары өс йөҙ алтмыш биш тапҡыр сығам. Тимәк, ер йөҙөнә өс йөҙ алтмыш биш көн бирәм. Ә Илмәт тигән колхозсы ошо өс йөҙ алтмыш биш көндән ҡалай итеп мең көн сығара алған?

Ҡояш, шулай итеп, ап-арыу ғына көнләшеп ала, ти, Илмәттең эше менән бик ҡыҙыҡһына башлай.

— Хәҙергә, Килмәт ҡусты, минең ваҡытым юҡ,— тип әйтте, ти, Ҡояш Килмәткә,— әле ана теге тауҙар, урмандар артына барып сығырға кәрәк. Ә иртәгә был яҡҡа тағы килеп сығырмын. Шунан икәүләп ул Илмәттең эшен барып ҡарарбыҙ.

Шунан Ҡояш киткән, ти, үҙ юлына, Килмәт киткән, ти, үҙ юлына. Ә Илмәт эшен бөтөрөп, өйөнә ҡайтып, ашап-эсеп, тамаҡ туйҙырып алған да, мунса төшөп, һыуһынға һалҡын айран эсеп, ял итергә ятҡан, ти.

Шунан иртәгеһен ни алһыу булып таң ата, әллә ҡайҙан, алыҫтан, күк йөҙөн ҡыҙартып, Ҡояш килә, ти. Күп тә үтмәй, ул бейек тауҙар, ҡалын урмандар артынан килеп тә сыҡҡан, ти. Юл ыңғайында әлеге Килмәтте лә уятып алды, ти. Ҡояш үҙе алдан төшөп алды, ти, Килмәт — арттан. Килеп инделәр, ти, былар Илмәттең өйөнә.

Ҡояш һәйбәтләп кенә Илмәттең ҡапҡаһын ҡағып ҡарай, ти. Ҡараһа — ҡапҡа бикле. Ҡоймаһы аша атлап инеп ишегенә килә, ти. Килһә — ишеккә лә йоҙаҡ эленгән. Ҡояш, асыуланып, тәҙрәһен барып ҡараны, ти. Ҡараһа — Илмәт өйҙә юҡ, ул инде күптән баҫыуҙа, ти. Ә тәҙрә төбөндә тик бер бесәй генә ҡулы менән битен йыуып ултыра, ти.

— Һай, был Илмәт тигәндәре бик сос кеше булып сыҡты бит,— тип әйтте, ти, Ҡояш.— Минән дә иртәрәк тороп эшкә киткән дәбаһа был!

Килмәт хәҙер бөтөнләй нишләргә белмәй аптырап ҡалған, ти.

— Йә, ярай, Килмәт ҡусты,— тип әйтте, ти, Ҡояш,— минең ваҡытым юҡ. Хәҙер миңә теге яҡҡа барырға кәрәк. Инде хәҙер Илмәттең өс йөҙ алтмыш биш көндән ҡалай итеп мең көн яһауын белгәнһеңдер. Тимәк, ул бер көндән өс көн сығара, белдеңме? Эшкә Ҡояштың үҙенән дә иртәрәк сыға, ваҡытын әрәм итмәй, эштән бер ҙә туймай, белдеңме?

— Белдем, Ҡояш апай, белдем.

— Илмәттең ни өсөн икмәккә мул йәшәүен күрҙеңме?

— Күрҙем, Ҡояш апай, күрҙем.

Шунан ни Ҡояш китеп барған үҙ юлына, Килмәт китеп барған үҙ юлына. Килмәт бынан һуң пишләгәндер, уныһын әкиәт һөйләүсегә белеү шарт түгел. Тик шуныһы: шул көндән алып уның эше алға киткән, ти. Шулай инде ул: тырышып эшләһәң, колхозың алда булыр; колхозың алда булһа, ауыҙың балда булыр. Эшең үтәлһә йөҙ, туҡлыҡлы килер көҙ. Шуның өсөн дә әйтәләр: ҡояш менән бергә ҡуҙғалһаң — уңырһың, артта ҡалһаң, туңырһың. Ә Илмәт кеүек, ҡояштан алда китһәң, бөтәһенән дә уҙырһың. Эшлә, туған, эшлә, күҙ көйөгө булып йөрөмә. Әкиәт бөттө, беҙ ҡалдыҡ, давай, егеттәр, эшкә ҡуҙғалдыҡ!

# Риүәйәттәр, хәтирәләр

## ЭЛЕККЕ ТОРМОШ

### КАНТОНДАР БАР САҠТА

Халыҡ элек-электән мал аҫыраған, балыҡ тотоу менән көн иткән. Ер ҡыҫыла биреү менән, әкренләп иген эшенә керешеп, мал аҫырауҙы ит, һөт, кәрәк-яраҡҡа тотоноу өсөн генә ҡалдырған.

Йәйләүгә сығыу, ҡымыҙ эсеү, ат сабыштырыу беҙ йәш ваҡытта ла бик шәп була торғайны.

Күлдә балыҡ күп булһа ла, халыҡ уны күпләп тотмаҫ ине. Тотһа ла, һатыуҙан бигерәк, ҡунаҡ һыйлауға ғына тота ине.

Ул миҙгелдәрҙә халыҡтың үҙе туҡыған үҙенә ярай ине. Шәһәр нәмәһе менән артыҡ төрләнмәй инек. Шуның өсөн аҡсаның артыҡ кәрәге юҡ ине.

1860 йылға тиклем беҙҙә кантон идара итеп килде. Кантондарҙың төрлөһөн күрелепде. Минең ғүмеремдә дүрт кантон булып уҙҙы. Шуларҙың юнлерәге Гәрәй [1] кантон ине. Ул бер ваҡытта ла кешене наҡаҡҡа рәнйетмәне. Бик холоҡһоҙ кантондар ҙа була торғайны. Ундайҙар юҡ ҡына өсөн дә халыҡты ҡамсылар, туҡмар ине. Үҙҙәре һәр ваҡыт яҡшы аттар егеп йөрөрҙәр ине. Улар килә торған көндө халыҡ аш һалып көтөп тора. Күмәкләшеп баҫыу ҡапҡаһына сығып ҡаршы ала инек. Түрәләр килеүгә, урамдар һепереләп, инек алдары йыйыштырылып ҡуйыла. Кантон төшә торған йорттоң мунсаһы яғылып ҡуйыла. Бер нисә эйәрле ат менән йәш егеттәр йомошҡа сабырға әҙер торорҙар ине.

Кантон килһә, ашҡа йөрөүҙәр, ат сабыштырыуҙар, көрәш, йүгереш башлана...

Түрә асыуланып килһә, ауылға бәлә була. Юҡ өсөн һуҡтырыуҙар, хәл бөткәнсә йүгертеүҙәр, эҫе мунсаға ябып ҡуйыуҙар; йәй көнө сана һөйрәтеүҙәр — барыһы ла була ине.

Кантондар әсе бал эсеүҙе, йәшерен бүләк биреүҙе бик яраталар ине. Матур-матур ҡыҙ-ҡатынды ҡулдарына төшөрөргә тырышалар

ине. Инде, балалар, уны һөйләтеп тә тормағыҙ. Аллам һаҡлаһын!

Гәрәй кантондың атаһы Ишбулды[2] кантон бигерәк тә иҫ-аҡылды ҡоротор ине. Уның аттары бик яҡшы, бик шәп булыр ине. Атайымдар заманында йәй кондәре лә сана егеп йөрөгән...

— Ниңә йәй көнө сана егеп йөрөйһөң? — тигәс:

— Ҡыш көпө ботә кеше лә сана егә. Кантон булғас, кантон булыу кәрәк — йәй көпө сана егергә кәрәк,— тип әйтер булған.

## АЛДЫҠ АЗАТЛЫҠ АЛДЫҠ

Крәҫтиәндәрҙе азат итеү 1861 йылда булһа ла, беҙҙең баяр ул әмерҙе еренә еткермәне. Ике-өс йыл һуңында ғына беҙ уны күрә алдыҡ.

Урак өҫтө ине. Һәйбәт аяҙ көн ине. Петр Иванович тигән бер бабай килде. Ул, үҙе баяр булһа ла, крәҫтиәндәрҙе азат итеү яғында ине. Ул килеп крәҫтиәндәрҙе йыйҙы ла бер китабын асып уҡыны: «Һеҙҙе Тәфкилевтәр ике йылдан артыҡ крепостной итеп тоткандар. Һеҙ бынан ике йыл элек азат ителергә тейеш инегеҙ. Хәҙер һеҙ азат»,— тине. Беҙ ырҙында ашлыҡ һуға инек. Бер ваҡыт мәхшәр ҡупты. Крәҫтиәндәр тейәгән олтәләрен юл буйына ауҙаралар, ашлыҡ һуғыусылар шыбағастарын ырғыталар, ураҡсылар көлтәләрен туҙҙырып ташлап ауылға югерәләр. Ботә ерҙә шау-шыу ҡупты. Һөйләп боторлөк түгел инде. Ә баярҙар һарайҙарына инеп бикләнделәр. Крәҫтиәндәргә бер һүҙ ҙә әйтә алмайҙар. Ә уҫал приказчиктәре әллә ҡайҙа йәшенгәндәр. Күҙҙәрен дә күрһәтмәйҙәр.

Баярҙың эше бер ай буйы эшләнмәй ятты. Крәҫтиәндәр араһында шау-шыу бер аҙ баҫылғас, айырым-айырым һөйләшә башланылар. «Ер бирәбеҙ; яҡшы ашатабыҙ»,— тип ҡыҙыҡтыралар. Ерһеҙ крәҫтиәнгә ер ҙә кәрәк, аҙыҡ та кәрәк. Шунан һуң әкреплап баяр эшенә сыға башланылар. Коҙго эштәрҙе бөтөргәс, крәҫтиән башына икешәр дисәтинә ер бирелде. Ул ер менән генә тамаҡ туйҙырыуы ҡыйын ине. Барыбер баярға эшләргә тура килде.

## ТОҘҠОЙҒАН ПРИИСКЕҺЕ

Һарт [1] ауылынан Хәлил тигән ҡарт һөйләүе буйынса һөйләйем.

Тоҙҡойған приискеһе Һарт ауылының ере була. Һарт ауылынан Исрафил, Закир, Ноғман, Азамат, Йыһангир тигән кешеләр алтын эҙләргә килгәндәр. Сокор ҡаҙып төшәләр ҙә алтын эҙләйҙәр. Аттарын яҡындағы утлауға ебәреп торалар.

Бер ваҡыт ат тышай килгән бер кеше (ул Троицкиҙән килгән он ташыусы була) быларҙы күреп ҡала. Тегеләр уға:

— Әйҙә, һин дә ҡаҙыш, алтын сығасаҡ,— тигәндәр. Шулай аҙна ҡаҙғандар — алтын юҡ. Шунан он ташыусы:

— Юҡ, мин ҡайтайым әле,— тигән.

Ҡайтармайҙар. Һаман ҡаҙыталар. Рәт сыкканға оҡшамай. Бер заман Хәлил дә ҡайтырға булып китә. Шунда Закир «шахта»нан сыға ла былар тирәләй өйөрөлөп йөрөй башлай. Үҙе:



— Һөйөнсө, һөйөнсө,— тип һикерә. Батҡаҡлы ҡулдарында ҙур ғына бер нәмә, ти. Шунан уны тегеләрҙең алдына ташлап ебәрә. Ҡараһалар, ысынлап та алтын!..

— Һөйөнсөгә бер көрәгә бал!

Бал алып эсәләр. Үҙ-ара килешеп, быны бер кемгә лә һөйләмәҫкә булалар. Алты кеше: Исрафил, Закир, Ноғман, Азамат, Йыһангир, Хәлил үҙҙәре иртән алтынды бүлешеп алырға килешәләр.

Иртән киләләр. Бизмәнгә һалып үлсәйҙәр. Алтын теүәл ун ҡаҙаҡ була. Бүлешергә алтынды ташка һалып ҡына торһалар, бер француз байы килеп сыға. Кем барып әйткәндер, белмәйһең. Сураҡол ауылынан Буранбай бай ҙа килеп төшә. Ҡаҙан килтерә.

— Давай, һатығыҙ,— ти. Һаталар. Тегә ике бай бүлешеп алалар. Тауар бирәләр. Ултырып, ҡаҙанда аш бешереп ашаталар. Хәлил ҡарт:

— Байыҡтыҡ,— тип ҡыуана.

— Байығырһың, бынауы һомтоймаҫтар барҙа. Бер тәмен белгәс, бүтәнсә иркенләп эшләргә хут бирер тиһеңме,— тиҙәр иптәштәре.

Бер ваҡыт француз байы тағы Троицкиҙән килеп етә. Һартта ул йыйылыш йыя. Әйтә:

— Әйҙә, ерҙе миңә һатығыҙ!

Ул төрлө ваҡ-төйәк килтергән була. Ярлы халыҡ сәй-шәкәргә ула. Шулай ҙа бәхәс башлана. Берәүҙәр:

— Әйҙә, һатайыҡ,— ти. Икенселәре киң тугайлыҡ-бесәнлектәренән ҡолаҡ ҡағаһылары килмәй:

— Ҡуй, һатмайыҡ,— ти. Бәхәс ҡыҙа.

Ә француз байы һүҙе үтерҙәй ярлыларҙы йәшертеп генә йыйып ала ла:

— Һеҙгә артығы менән түләйем,— тип мул итеп аҡса бирә. Шулайтып уларҙы үҙ яғына ауҙарырға итә.— Һеҙгә нимәгә ул хәтлем ер? Һатығыҙ,— ти.

Шунан инде ерҙе һаталар. Был ваҡиға 1911—1912 йылдарҙа була. Ситтән эшселәр килә. Тотона француз шахта ҡаҙырға. Алтын күп сыкты, ти.

Шунан башлап Тоҙҡойған яланы алтын йыуыу приискеһенә әйләнә.

Революциянан һуң мин үҙем дә шунда старатель булып эшләнем. Француздың шахтаһы емертелгән ине. Беҙгә эште ер-яңынан башларға тура килде. Тәүҙә беҙ ҡырҡ метр ҡаҙып төшток. Француздан ҡалған төрлө кәйлә, балта, бысаҡ-маҙар, башҡа ҡорамалдар таптыҡ.

## ГУБЕРНАТОР КИЛДЕ

Япон һуғышы башланғанға тиклем, беҙҙең алты башкорт ауылының ере, һыуы, урман, яландары бергә ине. Шул йылдарҙа, волостән зимләмер килеп, ерҙәрҙе, душка* ҡарап, бүлеү эше үткәрҙе. Ҡатын-ҡыҙға өлөш юҡ. Һәр ир йәненә ҡырҡ берәр дисәтинә ер тейә ине. Атай менән икебеҙгә һикһән ике дисәтинә еребеҙ булды. Шуның

өс дисәтинәһе генә һөрөргә эшкинде. Ҡалғаны урман, ҡыуаҡлыҡ ине. Ул ерҙән күп файҙа алмаһаҡ та, интегеп, налогын түләүҙән баш сыҡманы.

Ерҙе бүлеү эше барған бер ваҡытта Йәнтекәш яланында Иҫке Күлдәр[1] менән беҙҙең ауыл халҡы араһында межаны билдәләү тураһында килешә алмайынса, талаш башланып китте. Межаға ултыртылған бағананы һурып алып, шуның менән һуғыштылар. Был хәлдән ҡурҡып, зимләмер ҡасҡан. Ҡасып барып үрәтниккә: «Үлеш башланды!» — тип хәбәр иткән. Ҡото осҡан үрәтник был хәбәрҙе становойға, становой исправниккә, исправниге губернаторға еткергән. Тиҙҙән «Ауылға губернатор килә!» — тигән хәбәр таралды. Шул хәбәр ишетелгән көндө беҙ төн буйы йоҡламай, бөтөн урамды һеперҙек, йыйыштырҙыҡ. Иртән иртүк бер рота һалдат менән губернатор килде. Килһә, ауылда бер ниндәй ҙә үлеш юҡ. Ҡарап-ҡарап йөрөнө лә был бына бер заман исправникте бәргеләргә тотондо. Чиненән дә төшөрҙө тегене. Үҙ-ара буталыш башланмаҫмы тегеләр араһында! Бынан һуң ер бүлешеү эшен һалдаттар менән губернатор күҙәтеүе аҫтында үткәрҙеләр.

Ер бүленде. Хәҙер межаларҙы сирутлап ҡарауыллайбыҙ. Бөтөн ерҙе бүлеп бөткәс, «удел» тигән нәмә сыҡты. Уделгә эләккән һәр кем (уларҙы «уделдәр» тип йөрөтә торғайнылар), ауылдан бүленеп, күсеп китә, шул еренә ултыра. Уделгә эләккән ярлы-ябаға, ерен эшкәртә алмағанлыҡтан, ситтән килгән мишәргә, урыҫҡа бер ситеккә, сәй-шәкәргә һата ине. Шуның менән ул көс етмәҫлек «бәләнән» ҡотолорға тырыша ине. Ундай ерҙе һатыу осон дә оҙаҡ ҡына йөрөргә тура килә ине. Шунлыҡтан ул ваҡытта: «Ҡосоҡ ороп ҡартая, удел йөрөп ҡартая»,— тигән һүҙ ҙә сыҡҡайны.

## ЛЕНИН БУЛМАҒАНДА, БӨТӘ ИНЕ БАШҠОРТ

1909—1910 йылдарҙа Николайҙың һанаттары капиталистәр килеп, завод, фабрика һалыу осон, башҡорттан ер ала. Башҡорттар аңламайынса, банкыға ер тапшырабыҙ тип, үҙҙәрен үҙҙәре һата ла ҡуя шул. Ерҙе шулайтып ҡулына эләктергәс, тегеләр. ни тирәяҡта күпме башҡорт бар — бөтәһен дә йәлеп итә заводта эшләтергә. Уларҙы «контрактованныйҙар» ти торғайнылар. Баракта йәшәнеләр. Заводта эшләп сыҡ та баракка ҡайт. Баяр еренә баҫма. Эргәнән һыу ағып ята икән, һин унан һыу алма — баракка һыу алып барырҙар. Тәртип шулай булып китте. Шулайтып, эскән һыу өсөн дә эшләгәндән тейәһе аҡсаны тота барҙылар. Эш хаҡы ташкүлсәйем генә булды: өс тәңкә ала икәнһең, бер тәңкәһе — баракта торған өсөн, бер тәңкәһе юҡ-бар түләүҙәр өсөн, бер тәңкәһе үҙеңә ҡала — ашарға алһаң, кейерең юҡ, кейерең алһаң — ашарға юҡ.

Ер һатҡас ни, аҡса бар. Бер әҙәм йөҙ тәңкәгә бер ат ала. Бер ат, бер өйөнән башҡа, бер нәмәһе лә, хатта ат бәйләр ҡаҙығы ла юҡ. Әгәр ҙә аҡыл булһа, шул тиклем аҡсаға өс-дүрт ат ала алыр ине, кәртә-ҡаралты ла эшләр ине. Юҡ, улай итмәгән шул. Ат бәйләр



ҡаҙыҡ та булмағас, был әҙәм атын ишегенең бүгәненә бәйләй. Ҡатыны, күрәйем әле тиһә, аты өркөн дә, яҡлауы-ние менән ишеген ҡуптарып алып, сабып сыҡҡан да киткән. Завод еренә барып инеп киткән ишекте һөйрәтеп. Бер бай завод хужаһын ҡоторта икән.

— Һин уға: «Атыңды юҡ тип иҫәплә»,—тип әйт. Мин үҙемә алайым уны,— тип әйтә икән.

Теге әҙәм атын һатып алғас, исмаһам, бер тотонон та ҡала алмаған, өйөнә тиклем менеп кенә ҡайтҡан була. Шулай итеп, йөҙ тәңкәгенәһе һыу төбөнә китә. Китмәй нишләһен, ерҙе заводсыға һатҡас, аты завод еренә ишек һөйрәп барып ингәс, хужа менән атҡа күҙе төшкән бәндә бер ауыҙҙан, бер һүҙҙән булғас. Шулай асыҡ ауыҙ булғанбыҙ беҙ. Асыҡ ауыҙ булмаһаҡ, аҡсаға, сепрәккә алданып, кеше аяғының аҫтындағы ерен һатып ебәрәме лә яланғас ултырып ҡаламы? Әлдә Ленин бабай капиталистәрҙең хоҡуғын тартып алып, ярлы халыҡҡа ирек биреү сараһын күрҙе. Ленин бабай булмағанда, беҙ әле һаман да баярҙар ҡулында булыр инек, йөҙ метр ҙа китә алмаҫ инек барактан йә бөтөнләй бөтөр ине башҡорт.

## ӘЛДӘ РЕВОЛЮЦИЯ СЫҠТЫ

Әлек халыҡҡа бер ҙә көн итергә мөмкинлек бирмәнеләр. Халыҡ та бик ғәйәр ине. Байҙар менән килешмәй, бола күтәреп кенә торғандар. Бер саҡ ғәскәр килтереп һалып ҡуйғандар. Күнтәр ҡатыр ебәрелгән.

Мин иҫ белгәндә, ауылда старшина хоком һөрә ине. Яҡындағы күп кенә шәп ерҙәрҙе бүлемгә керетмәй, Шәрип старшина үҙенә алды. Ауылдағы бер-ике ҡартты һыйлай ҙа үҙ буйындағы ерҙәрҙе эләктерә торғайны. Ҡотоулеккә, сабынлыҡҡа ярамалы шәп урындарҙы быҙауҙарына кәртәләп ала ине. Игенде күп сәсерә ине. Үҙенән артҡанын Мөнәйергә оҙатып, байҙарға һатып, күп аҡса ала ине.

Муллалар ҙа старшинанан ҡалышманы. Мин белгәндән шул: халыҡ кенәгәгә яҙылып, Мөхәмәтйән муллаға өмәгә сыға ине. Бесәнен саптыҡ, игенен урҙыҡ. Хәлил муллала ялсылыҡта торҙом, байҙарҙа ла йөрөлдө.

Совет власенә тиклем шулай күп күрҙем. Бер көндөң эш хаҡы хәҙерге ун тингә лә тура килмәне. Етмәһә, эшләтеп, эшләтеп, ҡыуып сығарырҙар ине.

Халыҡ йонсоу ине. Шуға күрә ер ҙә һатып ҡараны. 1910 йылда Урмантау яҡтарын Балашовка[1] һаттылар. Уға батша Николай Романов үҙе шулай кәңәш биргән, имеш, тинеләр. Ул саҡта халыҡ ерҙе гектар менән дә, километр менән дә үлсәп тормаҫ ине. Яман йылғанан Урмантауға тиклем, тип күмәртәләй һата ла ҡуялар. Бөтә урман Балашовтарға сыҡты. Ул генеральный просек ҡырҡтырҙы, һаксы ҡуйып, уларға урманда йөрттәр һалдырҙы. Ҡәҙерен дә, хаҡын да белмәгәс ни, ерен бушҡа тиерлек осланы халыҡ. Осиновка[2] яғын арендкә бирҙеләр. Ерһеҙ ҡала башлағас, үкенеп, йырҙар сығарҙылар.

Мырҙаларҙың урамыша
Үҫәр микән алмаған.
Ҡайҙа барып ултырыр икән,
Ултырыр ер ҡалмаған.
Мырҙа алған бер юртаҡ,
Бәйләп ҡуйған ишеккә.
Урман һатып алған аты
Алып ҡасҡан ишекте.

1910 йылда француз байы килеп, инженерҙәр менән тикшеренеп, баҡыр рудаһы тапты.

— Етмеш йылға арендҡа бирегеҙ,— тип һораған.

— Етмешкә бирмәйбеҙ. Оҙаҡ була. Бирһәк, егерме йылға бирербеҙ,— тигән халыҡ.

— Был ғына ваҡыт әҙ. Зауыт һалыу өсөн сығым күп буласаҡ,— тигән бай. Бирмәнеләр. Бай ун йыл буйы килә-китә йөрөнө, ныҡ һораны, барыбер алалманы. Быға тиклем ер һатып һабаҡ алғайны шул халыҡ. Әлдә генә революция сыҡты. Әгәр революция сыҡмаһа, урманһыҙ ҙа, ерһеҙ ҙә ҡала инек.

## ЭЛЕККЕ ТОРМОШ — ЭТ ТОРМОШО ИНЕ

Эт тормошо ине бит ул элекке тормош, ҡәһәр төшкөрө. Үткән ғүмер тураһында һөйләй башлаһаң, бик оҙон инде ул, балаҡайҙар, лутсы мин һеҙгә бабай бахырҙың нисек үлтерелеүен һөйләйем.

Ул бик йәш көйө һәләк булды, мәрхүм. Уның үлеүенә Зөлҡәрнәй кулак ҡына сәбәпсе булды. Ул беҙгә бик үс була торғайны. Күршеләге урыҫтың атын үҙенең кейәүенә урлап биреп ебәреп, шуны минең бабайға һылтаған.

Күҙ күнө ине. Бабай бахыр урмандан өшөп-туңып ҡайтҡайны. Мин түрбашта аш-һыу әҙерләп йөрөй инем, күрше малайы килеп инде лә:

— Хәйбулла староста саҡырта,— тине бабайға. Бабай бахыр тамаҡ та ашап торманы, сығып киткән булды, шул китеүҙән өйгә ҡайтып инмәне. Барғас та ни, быға төрлө һорауҙар биреп аптыратҡандар. Был:

— Белмәйем,— тигән.

— Һин әле тана башлаңыңмы? — тип туҡмарға тотонғандар. Бахыр бабай ҡысҡырынып ҡараған да, берәү ҙә ярҙам итмәгән. Иҫтән яҙҙырғансы туҡмағандар быны. Ул арала көн кислэп бара ине. Мин ни, аны-быны белмәгәс, ҡайтыр әле, тип вайымһыҙ тик йөрөйөм. Сығып, утлыҡтағы тауыҡтарға ем бирҙем. Ҡаҙан аҫтын ҡағыштырып йөрөһәм, бер малай килеп инде лә:

— Олатайымды үлтерәләр бит! — тип илап ебәрҙе. Анан-бынан кейендем дә сығып югерҙем. Бәҙриҙәр тыҡрығынан боролоп, баҫманы аша сыҡтым да абайлап алдым: бер урында халыҡ ҡорт кеүек ҡайнай. Югерҙем шунда. Барып ҡараным — һушым китеп йығылғанмын, бер нәмә лә хәтерләмәйем.

Бабайҙы ни, бахырҙы, ярты бүҫкәһенән былай ергә күмгәндәр ҙә тирә-яҡтан йоморо таштар менән туҡмағандар. Ул бахыр һаман



да йән бирмәгән булған, шул көйө зыяратҡа алып барғандар ҙа анан-бынан соҡоштороп күмгәндәр ҙә киткәндәр. Зыярат янында йәшәгән теге Мәфтуха:

— Сәғәт ярым самаһы ер аҫтынан ыңғырашҡан тауышы ишетелеп торҙо,— тип торғайны. Шул хәтле йорәгем әрнене, ниишләйем, бабай мәрхүм шулай итеп тонто юҡҡа әрәм булды. Балаларым дүртәү ине: ос улым, бер ҡыҙым бар ине. Атанан етем ҡалды, бахырҡайҙарым.

Шунан ни күп тә үтмәй, Совет власе урынлашты. Теге ҡәһәр һуҡҡыр Зөлҡәрнәйҙе Себергә ебәрҙеләр. Муллаларын да, башҡа байҙарын да ҡалдырманылар. Себерҙән ары ебәрер ер булмағандыр инде. Булһа, арыраҡ ебәрер кәрәк ине ул ҡәһәр һуҡҡырҙарҙы. Үҙәккә үткәрҙеләр инде улар.

Балаларым ҙурайҙы. Үҙем колхозға индем. Колхоз һәйбәттән бер ҙур өй һалып бирҙе, рәхмәт яуғыры. Тик был көндө бабай мәрхүм генә күрә алманы.

Уҡығыҙ, балаларым, тырышып уҡығыҙ, ил һеҙҙе белемле итеү өсөн бөтә көсөн бирә. Һеҙ бәхетле.

## ӘХМӘТША ЙЫРСЫ

Тәфкилев мырҙаға һарай эшләү өсөн атай ҙа, әсәй ҙә кирбес һуҡҡандар. Һалыуҙа ла ҡатнашҡандар. Был һарайҙы һалдырыу өсөн Петербургтан рус оҫталары килтерткәндәр. Шул оҫталарҙың береһе йығылып төшөп үлгәнде бик ҡыҙғанып һөйләрҙәр ине.

Был һарайҙы һалғанда, Әхмәтша тигән бер йырсы ҡарт та эрәм булған. Мин бик кескенә инем. Шулай ҙа Әхмәтша ҡарттың моңло йырҙары хәтеремдә ҡалған. Бик оҙон, бик моңло итеп йырлар ине. Уның йырын тыңлағанда, беҙҙең атайҙар илай торғайны. Әхмәтша бабай байрҙар мәжлесендә лә йырлай торған булған. Шул йыры арҡаһында башын һәләк иткән. Ул былай булған. Ошо һарайҙы һалған саҡта әсе көндә кирбес, ком ташып, Әхмәтша ҡарт бик арыған. Шул саҡта баяр һарайында бик ҙур мәжлес бара икән. Әхмәтша ҡартты йырларға саҡырғандар. Ул: «Бик арыным, хәлдән тайҙым, бара алмам, йырлай алмам. Йырлатырға булғас, көндоҙ эшкә ҡушмаһындар ине»,— тигән. Шуға ҡарамаҫтан, ихтыярына ҡуймайынса, бисараны алып килгәндәр. Мәжлескә килгәс тә, йырламай ҡарышҡан: «Арыным, хәлем бөттө, тамағым кипте, йырлай алмам бит, хәҙрәттәр»,— тигән. Уға бер туҫтаҡ ҡымыҙ биргәндәр. Йырларға ҡыҫтағандар. Шунан һуң шулай итеп йырлап ебәргән:

Иҙәш буйҙарында талдар күп,
Бергенәһе уның ҡарама.
Әй хоҙайым, аллам, ҡәҙер мәүләм,
Баярҙарҙан беҙҙе арала...

Әхмәтша ҡарттың ошо йырын ишеткәс тә, баяр уны мәжлестән ҡыуырға, һуҡтырырға ҡушҡан. Икенсе көндө үк Әхмәтша йырсыны балалары менән бергә икенсе баярға һатып ебәргән.

## ТИМЕРБАЙ БАТЫР

...Мин крепостной заманында булманым. Мин белгән заманда барыбер крепостнойҙар кеүек баярҙа эшләйҙәр ине. Мин үҙем Тәфкилев тигән мырҙаларҙа, һуңынан Йәнтурин тигән байҙарҙа күп эшләнем. Беҙгә Тәфкилевтәрҙең һарайына кереү түгел, ихатаһы яныннан үтеп булмай ине. Әгәр ҙә берәй крәҫтиән койма тирәһенән үтһә, Сәйетгәрәй мырҙа аҫырау кыҙына:

— Камал! Бар, кыуып ебәр! — тип акырып ятыр ине. Әгәр ҙә инде берәйһе койма аша йортка карағанын күреп калһалар, уны тотоп алып, индереп һуктыралар ине.

Уның Ламакин тигән уҫал приказчиге бар ине. Кешеләрҙе кыйнау уның өсөн бер нәмә түгел, шунан рәхәт таба ине.

Тимербай карт Ламакинде кыйнау өсөн күптән кыҙып йөрөй ине. Баярға һоло ташыған вакытта, Тимербай карт атын һолоға кушкан да юрый белмәмешкә һалышып тора икән. Ламакин быны күреп әтәсләнеп килгән дә Тимербай карттың һырт буйына камсы менән төшөргән. Тимербай өндәшмәгән, колоп торған да, кинәт Ламакингә ташланып, уның кулындағы камсыһын тартып алып, башын ике тубығы араһына куйып, әйҙә тегенең арка кайышын кайышларға тотонған. Ламакинде, тауышы бөткәнгә кәҙәр, һыҙырып-һыҙырып, һуштан тайҙырып ташлаған да өйөнә кайтып киткән. Һай, ғәйрәтле карт ине ул Тимербай! Тимербай кайтып, Ламакинде кыйнағанын катынына, күршеләренә һөйләгән. Катыны илай башлаған. Ә Тимербай карт:

— Барыбер һуктыралар бит инде. Үҙемдең алдан һуктырыуым шәп булды. Барыбер мин кыйнаған тиклем каты һуға алмаҫтар әле, — тигән дә казактарҙың килгәнен көткән. Ул көндә улар килмәгәндәр. Иртәгеһен Сәйетгәрәй мырҙа сакырткан:

— Ниңә Ламакинде кыйнаның? — тип һорағас, Тимербай карт:

— Булмаҫ, мин уны кыйнау түгел, күргәнем дә юк әле, — тигән. Икенсе бүлмәлә Ламакин йәшеренеп тыңлап тора икән. Ишекте асып сыккан да:

— Барин, ул ялғанлай, —тип Тимербай карт алдына килеп баҫкан. Сәйетгәрәй мырҙа үҙенең йомшак диванында ҙур мендәрен култығына кыҫтырып, быларға карап ята икән. Тимербай юрый Ламакинде үртәп:

— Һин минең кыйнағанды күргәнең юк, — тигән. Ламакин, кыҙып китеп:

— Күрмәнең ти бит әле, ялғансы, ергә һалып кыйнаның! — тип екеренә башлаған. Тимербай карт, мырҙаға карап:

— Хәҙрәт, ул минең кыйнағанды күрмәне. Иң башта мин уның башын ике тубык араһына кыҫтырҙым. Шунан һуң ғына аркаһын һыҙырҙым. Минең һыҙырғанды кайҙан күрһен ул Ламакин? Күрҙем, тип үҙе ялғанлай, — тигән. Шул ерҙә Ламакин тағын да ярһыған, әтәс кеүек һикерәнеп, Тимербай карттың өҫтөнә ташланған. Шул вакыт Тимербай карт уңайлап кына Ламакиндең моронона берҙе кундырған, теге осоп барып иҙәнгә ауып төшкән. Быны күргәс, Сәйетгәрәй мырҙа ла куркып, мендәрен косаклап, күрше бүлмәгә кереп бикләнгән. Тимербай карт кыҙып киткән.

Шунан һуң Сәйетгәрәй мырҙа Тимербай картты егермә биш сыбык һуктырырға әмер биргән икән. Әмер биргәндә, әйтә икән:

— Һуккас, сыбыкты һыҙырып алығыҙ! Тиреләре һуйылып сыкһын! — ти икән. Сәйетгәрәй мырҙа каты бәғерле, үҙе юләр кеше ине. Крәҫтиәндәрҙе ул сүпкә лә һанамай ине.

## ГУБЕРНАТОРҘЫ АТКАН КЕШЕ

Әлегерәк, революцияға тиклем әле, нисәнсе йылдарҙыр, хәтеремдә түгел, атайымдар һал менән Өфөгә китте. Мине лә алдылар. Подрядчик булып бер урыҫ барған булған. Һалды килтереп һуккас, теге урыҫ шәпләп атлап калаға менеп китте. Мин артынан әйәргәйнем, етеп тә булмай. Губернатор баксаһына етәрәк, мылтык аткан тауыш ишетелде. Кешеләр югерешә. Беҙ аптырап торабыҙ. Уңарсы булмай, беҙҙең урыҫты ике полицейский ике яктан килеп тә тотто, алып та китте. Урыҫ тегеләргә әллә нәмәләр әйтеп карай ҙа бит, тыңламайҙар. Мин яр башына саптым. Атайымдар хафаға калды. Бер-ике сәғәт үткәс, улар янына ла полициянан килделәр. Атайымдар үҙҙәре китте. Мин дә барҙым. Полиция идаралығында үҙебеҙҙең кем икәнде, бөгөн генә килгәнде аңлаттык. Шунан миңә бер кешенең һүрәтен күрһәттеләр.

— Ошо кешене күрмәнеңме? — тип һорайҙар.

— Губернатор баксаһы янында осраманымы, кайһы якка касты? — тип ныкыйҙар. Мин уны күргәндәй ҙә булам. Бик нык куркыу сәбәпле, айышына төшөнә алмайым.

— Юк, — тинем дә куйҙым.

Аҙак беҙгә кайтып китергә куштылар. Подрядчик урыҫты ла сығарҙылар. Ул, рәхмәттәр әйтә-әйтә, атайымдарҙы һыйлап-һыйлай инде. Бакһаң, баксаһында ял итеп йөрөгән губернаторҙы берәү атып каскан[1]. Ул Солтанов тигән кеше икән. Нәк шул мәлдә беҙ бакса янынан үтеп барғанбыҙ. Етмәһә, беҙҙең урыҫтың кеҫәһендә наган да булған. Кайҙан алған булғандыр инде.

Әлеге Солтановты аҙак Бөрө яғында осраттым. Командир булып алған ине. Таныным да әлеге фото буйынса өндәштем. Һәйбәт кеше булып сыкты. Көлә.

— Һеҙҙе куркытканмын икән, — ти. Мине үҙенең отрядена сакырҙы. —Минең отряд особый поручениеләр отряде, — тигәйне лә:

— Үҙ сотням үҙемә якын, — тип барманым.

Шулай ҙа була икән тормошта.

## БУНТ

Миңә һигеҙ-туғыҙ йәш тирәһе ине. Беҙҙең ауылға француз байҙары килде. Ер һатып алмаксылар икән. Волость насалниктәре, старосталар, өй кешеләре (хәҙергесә әйткәндә, ун өйҙән бер депу-

тат һымаҡ кешеләр) менән һөйләшеп кенә, эште бөтөрмәк булып, уларға нәсәй (ришүәт) өләшәләр икән. Ҡырын эш һиҙелмәй буламы ни. Был эште ишетеп ҡалып, ауыл халҡы баш күтәрҙе. Беҙҙең ауылда Ғилметдин Мөхотдинов тигән сая кеше бар ине. Ғауғаны беренсе булып шул башланы. Бына бер заман бөтөн ауыл халҡы, күҫәктәр менән ҡоралланып, байҙарҙы, старшинаны туҡмарға тотондо. Түрәләргә арыу ғына эләкте ул саҡта.

Шул ваҡиғанан һуң старшина менән староста йыуашланып ҡалды. Ауыл халҡынан йәшеренеберәк йөрөр булып киттеләр. Шулай итеп, байҙар халыҡ ризалығынан тыш үҙ теләктәренә ирешә алманылар. Ер һатылманы. Ә теге французлдарҙың әҙе лә, еҫе лә ҡалманы. «Береклектә — тереклек» тигән һүҙ шунда килә инде.

## СӘЙЕБЕҘ ҘӘ БУЛДЫ, ЕРҘЕ ЛӘ ҺАТМАНЫҠ

Үҙ ғүмеремдә бик күпте күрергә тура килде. Йәш сағымда эш эҙләп, Петербурға барып сыҡтым. Унда бит бик шәп завод бар. Путилов заводы [1] тип йөрөтәләр. Шунда эшкә индем. Яңы урынға эйәләшеүе тәүҙә еңел булманы. Эйәләшергә тура килде. Эшселәр ҙә тиҙ арала яраттылар.

Дәрт тә, дарман да шәп ине: унар ботлоҡ ҡойма балункаларҙы, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, цехтың бер башынан икенсе башына елдереп йөрөтә инем.

Заманы яман ине: күп эшләтәләр, әҙ ашаталар. Бөтәһе лә батшанан тип, беҙ батшаны бер ҙә яратмай инек. Степан Халтурин [2] тигән эшсе Ҡышҡы һарайҙа батшаны шартлатҡан. «Батшаны үлтерергә иткәндәр» тигән хәбәрҙе ишеткәс тә, беҙ, ҡыуаныстан, кәпәс сөйөп, ҡул саба башланыҡ. Шуның өсөн генә лә эшселәрҙе ҡулға ала башланылар. Йоҙәрләгән путиловсы менән мине лә эләктерҙеләр. Крепоскә ябып ҡуйҙылар. Крепоскә алып китеп барғанда, бер эшсе:

— Бер нәмә лә аңламаған кешегә, алйотлоҡка, һалып,— тине. Мин эште һиҙеп алдым бит инде:

— Була ул,— тинем.

Допростар башланды.

— Ниңә ҡул саптың? Батшаны үлтерһәләр, ҡыуанысмы ни! — тип ҡыҙҙыралар.

— Рустарҙың байрамылыр, ҡул сабырға кәрәктер, тип уйлапым да ҡул саптым,— тинем.

— Дурак! — тип сығарҙылар ҙа ебәрҙеләр. Шунда күп кенә кешене каторгаға ебәрҙеләр. Каторгаға ебәрмәһәләр ҙә, миңә паспортты ҡабат бирмәнеләр. Шунан ни эшләйһең инде? Тәки бер ерҙә лә эшкә алманылар. Кире илгә ҡайтырға тура килде. Ул ваҡыт Баймаҡ заводына промышленник Кабанов [3] хужа ине. Завод тирәһендәге урманды ҡырҡтырып бөтөрҙө лә, тағы ла ҡайҙан яғыулыҡ табырға, тип эҙләй бит теге. Шунан уның күҙе Таналыҡ буйындағы торфҡа төшә башланы. Ә был торфлы һаҙлыҡ башҡорттар ерендә ине. Кабанов алдап-йолдап «һатып алыу» яғын ҡарай башланы. Алтын промышленниге Закир менән Шакир Рәмиевтәрҙән барын ярҙам һораны. Улар күптәнән алтын сыға торған Ирәндек буйына ҡыҙыҡһынып йөрөйҙәр ине. Кабановтың теләген белгәс тә, Закир менән Шакир бай башҡорт старшиналарын һыйлап, ер һатырға өгөтләй башланылар. Күп тә үтмәне, дүрт волостең халҡын йыйнап, ер һатыу тураһында һүҙ астылар. Старшина ла:

— Һаҙлыҡтан ни файҙа? Үҙебеҙгә кәрәкмәгән һаҙлыкты Кабановҡа бирәйек. Ирәндек тауын Рәмиевтәргә һатайыҡ. Бер йәшник сәй бирәләр,— ти. Йәнем түҙмәне, алғараҡ сыҡтым да:

— Әфәнделәр, ерҙе бик арзан алмаҡ булаһығыҙ! Тәүҙә барып үлсәп ҡарарға кәрәк, уның хаҡы, бәлки, бер йәшниклек кенә түгел, ике йәшник торорлоҡтор.

Шунан Рәмиевтәр уйланып торҙолар ҙа, халыҡҡа ҡарап йылмайып:

— Һеҙҙеңсә булһын, ике йәшник бирәбеҙ,— тинеләр.

Шулай ҙа был юлы ерҙе һатманыҡ, таралдыҡ. Беҙҙең күрше ауылда ике ятҡа ла яҙыусы, грамотный кеше бар ине. Шуның менән үҙебеҙҙең хәлде һөйләп, кәңәш һорап, Петербурға үҙем менән эшләгән иптәштәргә хат яҙҙыҡ. Байтаҡ ваҡыт үтте. Берҙән-бер көн хат менән өс йәшник сәй килеп төштө. Хат та, сәй ҙә Петербур эшселәренән булып сыҡты. Улар: «Һеҙгә сәй ебәрәбеҙ. Быны аҡса һалышып алдыҡ. Ерҙе байҙарға бирмәгеҙ. Үҙегеҙгә кәрәк булыр. Талаусылар булһа, елкәләрен төйгөсләп ҡыуығыҙ»,— тип яҙғайнылар.

Күп тә үтмәне, теге Кабанов менән Рәмиевтәр халыҡты тағы йыйҙылар бит. Старосталар, сотскийҙәр ҙә бик күп килгәйне.

Беҙ Петербурҙан килгән өс йәшник сәйҙе алып барҙыҡ. Бер ваҡыт тегеләр йорттоң баҫҡысына баҫтылар ҙа ҡағыҙ уҡый башланылар. Йәнәһе, беҙ Ирәндек буйын ике йәшник сәйгә һатырға риза булған булабыҙ.

Беҙ шул арала теге Петербурҙан килгән өс йәшник сәйҙе халыҡҡа таратып бирҙек. Шунан һуң халыҡ:

— Ирәндекте бирмәйбеҙ! — тип шау-гор килеп, баҫҡыста баҫып торғандарға ташланды. Улар йорт эсенә инеп бикләнделәр. Беҙ ҡарап торманыҡ, ишекте ватып индек. Старостаны ике ҡатлы йорттоң тәҙрәһенән ташланыҡ. Ике сотский үлтерелде. Ҡалғандарын Белореткә тиклем ҡыуып барҙыҡ.

Шулай итеп, Питер эшселәренең ярҙамы менән сәйебеҙ ҙә булды, ерҙе лә һатманыҡ. Революциянан һуң, байҙарҙы ҡыуғас, барыһы ла үҙебеҙҙеке булып ҡалды.

# ГРАЖДАНДАР ҺУҒЫШЫ

## ЧАПАЕВ ДӘРЕСЕ

Һуғыш ваҡытында, нисектер, бер нисә һалдат дошмандан ҡасҡан. Ишетеп ҡала ла Чапаев тегеләрҙе саҡыртып ала. Һораша яҡшылап. Тегеләр ҡурҡып ҡасҡан була. Шунан ни Чапаев нисек итеп бер үҙенә ете кешенән ҡурҡмау тураһында һөйләргә тотона:

— Ете кешегә ҡаршы һуғышҡанда, бер кешегә уңайлыраҡ,— ти Чапаев.— Атышыр осон ете кешегә ете түмһәй кәрәк, һиңә бер түмһәй етә. Бер түмһәйҙе һәр саҡ табырға була, ә етене табыуы ҡыйын. Шуға етәүгә берәүҙе еңеүе еңел түгел. Яңғыҙ кеше ни, ят та, әйҙә, ата бир: берәүһен үлтерһәң, алтауһы ҡала, икәүһен үлтерһәң, биш ҡала... Алтыһын үлтергәс, инде береһе һинән үҙе лә ҡурҡырға тейеш. Ҡулдарын күтәрт тә әсир ит. Әсир ит тә штабҡа илт.

## ТОЧИССКИЙ[1] РӘХМӘТЕ

Аҡтарға ҡаршы көрәш башланғас, Белореттә ҡыҙыл гвардия төҙөлдө. Уны Точисский ойоштorҙо. Революциянан һуң Дутов Верхнеуральскиҙә ята ине. Ул ваҡытта самай шырпы ҡабыҙған Урал булды бит.

Ҡыш урталары ине. Точисский Кизилгә (казак ауылына)[2] һөжүм яһаны. Мин уның разведчиктәренә юл күрһәтеп барҙым. Юл күрһәтеүсегә ҡорал бирә торғайнылар. Мине лә ҡоралландырҙылар. Тик миңә Кизилгә тиклем барырға насип булманы. Моракайға[3] тиклем алып барғайным, аръяғына икенсе кеше алып китте. Мине ҡалдырҙылар.

Аҡтар яҡлы казачийҙәр ҡыҙылдарҙан еңелеп ҡастылар.

Аҡтар был тирәлә күбәйә башлағас, Точисскийҙең ғәскәре кире Белореткә ҡайтып, яңынан көс йыйҙы. Унан Аҡтүбәлә бик хәтәр һуғыш булды. Миңә унда ла ҡатнашырға тура килмәне. Был яҡта Точисскийҙе һаҡлап ҡалдым. Ул беҙҙең яҡта добровлецтәр йыйырға ҡалғайны. Уға илле-алтмыштар самаһы булғандыр, бик ир кеше ине. Точисский беҙгә килгәйне, бер заман аҡ казачийҙәр килеп тулды. Нишләргә? Точисскийҙе кәртә яғынан өйгә индерҙем дә топҡо бүлмәләге урындыҡҡа һалдым.



— Инһәләр ҙә тик ят. Ыңғыраш. Яуабын үҙем табырмын,— тинем дә тышҡыҙ туп менән яптым.

— Ярар,— тип ятып ҡалды.

Хәҙер дөбөр-шатыр тегеләр инеп килә.

— Ҡайҙа большевиктәр? — тип екеренәләр.

— Ҡыҙылдарҙы ҡайҙа йыйҙың? — тиҙәр.

— Белмәйем. Күрмәнем,— тим. Ҡуймайҙар:

— Давай әйт,— тиҙәр. Шунан:

— Тапһаҡ, үҙеңдән күрерһең,— тип тентей башланылар. Урта ишеккә тотонғайнылар:

— Инмәгеҙ. Ауырыуы йоғор. Бисәмдең атаһы тиф менән ауырып ята. Үҙебеҙ ҙә инмәйбеҙ, ҡурҡып,— тигәс ныҡышманылар алайҙа ғына. Аса бирҙеләр ҙә яптылар. Темекһенеп йороноләр-йороноләр ҙә казачийҙәр киттеләр. Улар китеп, кеше аяғы бөләкәй һил булғайны, Точисскийҙе ылау менән Белореткә оҙаттым. Китәненндә рәхмәт әйтте.

— Тағы килермен әле. Ҡулыңа шунда бер ҡағыҙ бирөп китермен,— тигәйне. Бутәнсә осрашып булманы.

## Н. К. КРУПСКАЯНЫҢ ҠЫҘЫЛ КАМАЛА БУЛҒАНЫ[1]

Ҡыҙыл Камалағы Николо-Березовкала граждандар һуғышы мәлендәге ваҡиғалар бик ҡатмарлы була. Байҙар үҙҙәренә отряд төҙөп алып, иген йыйып, уны шул тирәлә үҙҙәре белгәнсә оҙатып йөрөгәндәр. Уларға ҡаршы шул байҙарҙа эшләүселәр, шулай уҡ шул тирәләге ауыл ярлыларынан төҙөлгән партизан отрядтәре һуғышҡан. Боро ҡалаһынан Чеверев[2], Дүртөйлөнән Каштанов отрядтәре лә килгән. Мәгәр аҡтарға чехтар ҙа ярҙам итеү сәбәпле, был тирәне ташлап Сарапуль аша Ижов-Воткинский һәм Вятка ҡалалары яғына киткәндәр. Әммә ләкин икенсе яҡтан ҡыҙылдар килеп сығып, был тирәнән аҡтарҙы ҡыуалар. Бында совет урынлаша. Мәгәр шулай булһа ла, аҡтар йыш ҡына һөжүм яһап торалар. Шул йылы (1919) Кама буйлап үрләп, бик матур итеп биҙәлгән бер пароход килә. Был пароход Николо-Березовка пристаненә туҡтай. Элекке ваҡытта хәҙерге кеүек телефон булмау сәбәпле, пароход килгәндә, сиркәүҙең бер уртаса тауышлы ҡыңғырауын ҡаға торған булғандар. Ә бөгөн улай ғына ла түгел, дүрт яҡҡа ла ҡыҙыл флагтар элгәндәр. Ҡыңғырау ҙа оҙаҡ һуғыла. Халыҡ бик күп йыйыла. Пароходта Н. К. Крупская килгән була.

Крупская караптан төшөүгә, митинг асалар. Унда Крупская һөйләй. Сығышынан һуң ул урындағы активте йыйып алып, ауыл Советендә әңгәмә үткәрә. Совет власе осон көрәш тураһында кәңәштәр бирә. Эшен тамамлағандан һуң, Н. К. Крупская шул уҡ пароходта юлын дауам итә.

Крупскаяның Николо-Березовкаға килеп һөйләшеүе ирҙәргә генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарға ла ныҡ тәьҫир итә, көрәшкә күтәрелергә ярҙам итә, батырлыҡ өҫтәй.

Шунан һуң, бер аҙ ваҡыт үтеүгә, аҡтар йәнә һөжүмгә күсеп, волость үҙәген алалар. Тирә-яҡ ауылдарға разведка йөрөтәләр, постар ҡуялар. Аҡтар аңһыҙҙан килеп сығыу сәбәпле, Николо-Березовкалағы бәғзе совет яҡлы активистәр бер яҡҡа ла ҡаса алмай ҡалалар. Бында ла постар күп була. Әлек партизандар отрядеңә йөрөп, яраланыу сәбәпле өйҙә ятып ҡалған бер нисә кеше мунсаңә йәшенеп, ҡыҙ-ҡатындарҙы йөрөтөп, бында һәм Кәзәүҙә аҡтарҙың косоп ҡараталар. Аҡтар күп түгел, уҙа барһа, бер рота һалдат була. Шунан һуң былар кәңәшләшәләр ҙә Камбарка заводында ятҡан ҡыҙылдарға хәбәр итер өсөн, бер ҡыҙҙы ебәрәләр.

Ҡыҙ кис менән, кәртә артына мал ҡараған булып, ҡулына сыбыҡ тотоп сығып, арлы-бирле йөрөгән була ла, ауылдан алыҫлай барып, күҙ бәйләнгән саҡта Мыс [3] ауылының үрге осона барып етә. Ул-былды уйламайынса, ситән буйлап бер тыҡрыҡтан урамды аша сығырға бара ятһа, ҡаршыһында бер аҡ һалдат:

— Стой! — тип туҡтатып, ҡарауыл йортона алып китмәксе була. Ҡыҙ уға:

— Мин ошо ауылдыҡы бит. Эштән ҡайтып киләм,— тип әйтеп ҡарай, мәгәр һалдат ышанмай.

— Әйҙә! Әйҙә! — тиеүен генә белә.

Ситән буйлап атлай башлағанда, ҡыҙ унан ҡотолоу сараһын күреп:

— Туҡта, анау мунсаға бер осло башлы кеше инеп китте! — тип әйтеүенә, аҡ һалдат:

— Моғайын, ҡыҙылдыр. Андрей Вострецов тигән партизан ҡасып яталыр,— тип ҡыҙға артынан эйәрергә ҡуша ла үҙе ситән аша баҡсаға төшә. Ҡыҙ ситәнгә менә алмаған кеше булып тороп ҡала ла ҡаса. Аҡ һалдат, ни ары, ни бире була алмайынса, аптырап ҡала. Ҡыҙ йүгереп ауылды аркыры сығып, Беүә йылғаһы буйындағы таллыҡҡа йүгерә, эҙ ҙә яҙҙыра. Шул төндө Камбаркаға барып етеп, эште баштан-аяҡ һөйләп бирә.

Ара алыҫ түгел, ун ике саҡрым ғына. Ҡыҙылдар йыйылышып, Николо-Березовкаға һөжүм итәләр. Таң атыуға, ауыл ҡыҙылдар ҡулына күсә.

Шулай итеп, Н. К. Крупскаяның килеп китеүе ирҙәргә генә түгел, ҡыҙ-ҡатындарға ла геройлыҡ бирә.

## КАШИРИНСЕЛӘР [1] КИЛГӘНДӘ

Миңә ете йәштәр бар ине. Яңылышмаһам, 1918 йылдың ғинуары ине. Иҫке Монасип ауылы ҡырмыҫҡа иләүе кеүек мыжғып тора.

— Морат [2] яғынан Тимергә [3] ҡыҙылдар килгән.

— Шуларҙы ҡаршылау өсөн, бер-ике кеше ебәреү кәрәк икән...

— Иртә булыуына ҡарамай, сход йыйылды. Өлкәндәр кәңәш-тө-йөш иттеләр ҙә, ҡыҙылдарҙы ҡаршы барып алып килеү өсөн, Юлдашев Садиҡ менән Буранов Хәйбулланы вәкил итеп һайланылар. Аҡ егеп алдылар ҙа улар шунда уҡ Тимер яғына тороп саптылар...



Сапҡынсыларҙы оҙаттылар ҙа, ҡасан килерҙәр икән, тип көтәлә башланылар. Төш ауҙы — сапҡынсылар юҡ. Кон кискә һарыҡты — күренмәй тегеләр. Шик төштө. Тоҙаҡҡа ғына ҡапҡылармы икән әллә?

— Киләләр!

— Киләләр!

Шуны ишетеү менән, бала-саға ла урамға ябырылды. Алдан биш һыбай килә. Араларында Сафа менән Хәйбулла ла күренә. Ҡыҙыл флаг тағып алғандар, саналарына һыймай, әллә кем булып килә яталар. Арттанырак күмәк ылау күренде.

Был мәлдә ауылда аҡтар юҡ ине. Улар ос-дүрт көн элек кенә Темәс [4] яғынан килеп, Яңы Монасип [5] яғына үтеп киткәйнеләр. Ҡыҙылдар ҙа, беҙҙә оҙаҡ тормай, шул яҡҡа үтә башланы. Һуңғы ылауҙары ауылдан сығып бөттөмө-юҡмы, бына бер ваҡыт кире сабыша башланылар. Ҡараһаҡ, арттарынан ҡылыс болгап, ҡыйҡыулашып, аҡтарҙың һыбайлылары баҫтырып килә... Аҙаҡ белдек. Ҡыҙылдарҙың разведкаһы Яңы Монасипкә инеп:

— Аҡтар бындамы? — тип бер ҡарттан һорағандар. Теге ни:

— Юҡ. Дауна киттеләр,— тип яуап биргән. Ләкин улар китмәй, ҡыйыҡ эстәренә йәшенеп, ҡыҙылдарға засада ҡорған булалар. Разведка дозорын имен үткәреп ебәрәләр ҙә аңын-тоңон белмәгән төп көстәрҙе пулемет уты менән ҡаршылайҙар... Алдағаны өсөн, теге ҡарт язаһын ала...

Хәҙер былар урамға һыймай сабышып килеп, килгән юлдарынан Иҙел аръяғына, кепестәр (кепестәр араһы йәшәгән урамды шулай йөрөтәбеҙ) яғына, сығып киттеләр. Аҡтар килеп ингәйне, бына бер мәлде уларға пулеметтан яуҙыра башланылар. Беҙ инде, ҡайҙа ҡарап тороу, баҙға төшөп ултырҙыҡ... Аръяҡҡа сыҡҡас та, ҡыҙылдар кәмә сығышындағы ҡая башына пулемет ултыртып өлгөргән булғандар икән. Ҡалғандары мылтыҡ менән тау ҡырлап ятҡандар ҙа аҡтарҙы тетәләр генә. Был яҡтағы аҡтар ҙа яуапһыҙ ҡалманы. Ғилметдин ҡарттың өйө янына бер пулемет, тыҡрыҡҡа бер пулемет ултыртып, уларға ҡаршы атып ҡараны. Атыш сәғәтҡә яҡын барҙы. Шунан аҡтарҙы өтөп алып киттеләр. Шул китеүҙән бешә һуғып, Яңы Монасипте үтеп киткәндәр.

Ҡыҙылдарҙың штабы Әлхәмов Исхаҡ ҡарттың өйөндә булған. Аҡтарҙы ҡыуғас, ҡыҙылдар ауыл Советенең мисәтен Сафа ҡартҡа биреп, уны председатель итеп киттеләр. Беҙҙең тирәне аҡтарҙан таҙартҡан ул отрядтағыларҙы, каширинселәр булды, тип һөйләй торғайнылар.

Улар киткәйне, малайҙар кемуҙарҙан гильза йыйырға тотон. Итәк тултырып, шаптырлатып алып йөрөлә лә ҡуйыла. Мулыҡтыҡ тәсәйгә.

## НИМӘ УЛ БОЕВОЙЛЫҠ?

Еҙем урыҫы Харитон менән беҙҙең Ғәләү бик дуҫ булды. Һуғышҡа бергә киттеләр. Бер сотнялә булдылар.Бер ваҡыт улар араһында кем боевойыраҡ тигән бәхәс сыға. Былай ҡарағанда, икеһе лә бое-

вой егет ине. Ну дан тигән нәмә йыш кына кешенең башын әйләндерә, дуҫтарҙы талаштыра бит ул. Ғәләү:

— Боевойлык ул —йәнһеҙ һуғышыу, үҙеңдең үлемең тураһында уйламау, курҡмау,— ти.— Боевойҙың,— ти,— аты үлә, үҙе кала,— ти.— Боевой кеше ярһыу була, касмай,— ти.

Харитон әйтә:

— Боевойлык — акыл менән һуғышыу, вакытын белеп, каса ла белеү,— ти.

Бер вакыт бик кыҙыу һуғыш була. Ғәләү менән Харитон һәр һуғыштағыса бергә булды. Былар бер подполковникте кыуа китәләр. Подполковник тә хәйләкәр, артына әйләнмәй генә, быларға ата ла ата икән. Харитон капыл ситкә тайшана. Ә Ғәләү йән асыуына, ялтара-ялтара, подполковникте кыуа икән. Подполковник наганындағы патронын атып бөтөп, икенсеһенә үрелгәндә, Ғәләү ялтарыныуын ташлап, бер-ике һикерә лә подполковникте тәгәрәтә һуға. Өҫтәнә һикергән ыңғайға күҙен тортоп сығара. Иҫтәлеккә тип, сәғәтен тартып ала. Шул сак Харитон килеп етә.

— Дуҫ, бир миңә сылбырын,— ти.

— Ә мин үлем хәлендә сакта ярҙам иттеңме һуң? — тип яуап бирә Ғәләү.— Боевойлыкка дошманды бергәләп туҡмау ҙа инә, Харитон.

Харитон бер нәмә лә өндәшмәй. Ул Ғәләүҙеке дөрөҫ икәнен, һуғыш кырында дуҫыңды ташлап калдырыу — курҡаҡлык икәнен белә. Үҙ ғәйебен таныуҙан башка сара калмай.

— Был да боевойлык,— ти Ғәләү.

## СӘРҮӘР

Николай батша колатылғас та, халык икегә айырыла. Актар, кыҙылдар вакыты килеп етә. Хәҙер ауылды йә актар килеп баҫа, йә кыҙылдар килеп баҫа. Был ауылда еткән кыҙлы бер кеше кыҙылдар яклы була. Шул кеше, актар килгәс, бер үҙе уларға каршы һуғыша. Бик батыр кеше була. Тик, яңғыҙ булғас, ни саклы булашһа ла, хәленән килмәй. Шунан атына менә лә каса был. Атаһы касып китһә лә, кыҙы өй башына менә лә актарға ата башлай. Актар атаһын кыуыуҙан туктайҙар ҙа кыҙға һөжүмгә күсәләр. Камап алалар быны. Камап алғандан һуң нишләйҙәр? Кыҙҙы терелэй кулға алалар ҙа, һандыкка һалып, һыуға ағыҙалар. Үҙҙәре һис бер тәләфләмәйҙәр.

Түбәндәрәк һыу ярында кыҙылдарҙың ғәскәре яткан була. Теге һандык һыу буйлап ағып килә. Быны кыҙылдар күреп кала. Был ниндәй һандык? Бер вакыт кыҙылдарҙың командире йөҙөп барып, һандыкты ярға һөйрәп алып сығара. Хәҙер һандыкты аса. Асһа — кыҙ. Сак һулыш алып ята. Был кыҙ уңайланып, хәл ала, терелеп китә. Терелгәс, булған хәлде әнәһенән ебенә тиклем түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Кыҙылдар кыҙҙы үҙҙәре араһына алалар. Уға Сәрүәр тип исем дә бирәләр. Шунан һорайҙар:



— Йә, Сәрүәр, нишләйбеҙ? Барабыҙмы шул һуғышка, актарҙы кырырға?

— Юк,— ти Сәрүәр.— Минең атай каскан якка барып, атайға кушылайык. Атайҙы эҙләп табырға кәрәк.

Хәҙер был кыҙ әйткән якка, атаһы каскан якка, китәләр. Баралар, баралар. Бара торғандың һуңында, быларға кыҙылдарҙың йәнә бер ғәскәре осрай. Хәҙер кыҙ иптәштәренә әйтә:

— Минең атай шундай-шундай кеше ине. Мин атайҙы эҙләп табырға тейеш. Ул барыбер үлмәгән булырға тейеш,— ти.—Атайҙы табып алғас та, уның менән һуғышта йөрөрмөн,— ти.— Шундай намыҫ иткәнмен,— ти. Шундай намыҫсан кыҙ була Сәрүәр.

Хәҙер кыҙҙы теге тап булған ғәскәр араһына алып баралар. Атаһы юк. Атаһы булмағас, тағы ла әйтә:

— Мин атайҙы кайҙан булһа ла табырға тейешмен. Атайым менән бергә һуғышасакмын,— ти. Хәҙер нишләйҙәр? Оҙатырға ике һалдат бирә лә командир атаһын эҙләргә сығарып ебәрә быны.

Китеп баралар, китеп баралар, бер вакыт осрай быларға бер отделение кыҙылармееҙ. Кыҙҙың атаһы шулар араһында була. Атаһы ла, кыҙы ла кунаклашып, һыйлашып, шунан күмәкләшеп актарға һөжүмгә күсәләр. Кыҙ бик батыр булып сыға. Кыҙылдар үтә торған күперҙән ситтә актарҙың юлы барлығын белеп ала ла, кешенән айырылып барып, бер түңгәк төбөнә ултырып ала. Шул ерҙән бишатма мылтык менән әйҙә кыра, әйҙә кыра тегеләрҙе. Бик күптәрен һалып куя. Был кыҙҙы актар күргән була. Ләкин, катын кеше, тип иғтибар итмәйҙәр. Атышып ята торғас, икенсе яктан тағы ла актар килеп сыға ла, аталарын айырып ала ла китә. Сәрүәр япа-яңғыҙ тора ла кала.

Тағы ла актар кулына эләгә. Актарҙа әсирҙә калғас, был кыҙҙы нишләйҙәр? Терелэй табутка бикләйҙәр ҙә ағас оҫтөнә ултырталар. Ләкин кыҙ үлмәй. Уның үлмәүенең сәбәпсеһе шул.

— Һөйләп бир ысынды. Атайың кем? Ағайың кем? Улар кайҙа? Һуғыштамы? Һин кыҙ башың менән нишләп мылтыклы йөрөйһөң? — тип кыҫалар. Кыҫыуҙарына карамай, кыҙ һис сер сисмәй. Был кыҙ шундай батырсылыкка етә:

— Теләһәгеҙ нишләтегеҙ — һөйләп бирәсәгем юк. Мин ысын партизан кыҙымын. Теләһәгеҙ нишләтегеҙ, тапмайым,— ти. Шуның өсөн табутка бикләйҙәр инде. Шулай итеп, кыҙ табут эсендә кала.

Бер вакыт тағы кыҙылдар килеп етеп, актарҙы кыуып алып китәләр. Актар табутты алып китергә өлгөрмәй калалар. Кыҙылдар килеп табутты асһа — үҙҙәренең кыҙы. Шул вакытта кыҙҙан бер командир һорай:

— Һин нисек тере калдың?

Шулай, шулай булды, тип хәлде һөйләп бирә.

— Һис сер сисмәнем. Үлтермәк тә булғайнылар, ни сәбәптәндер табутка һалдылар. Ләкин мин әйтмәнем. Тик шуны ғына әйттем: «Атайым — ысын партизан, үҙем — партизан кыҙы. Теләһәгеҙ нишләтегеҙ»,— тип әйттем.

Шулай батырлык һаап, ул кыҙ, Сәрүәр батыр булып, Кыҙыл Армияла хеҙмәт итеп кайта.

## ҠЫЙЫУ КАЗАК

Ҡыҙылдар ҡыҫымына сыҙамай, казачий атаман Дутов Верхнеуральскиға сигенә. Ҡала коменданты итеп, аяуһыҙ яуыҙлығы менән дан алған Гончаренко тигән поручикте тәғәйенләй. Гончаренкоға, ҡалала большевиктәр бар, тип хәбәр итерҙәр ине. Ундай саҡта поручик эҙләргә бойороҡ бирер ине. Халыҡты берәй урынға йыйҙыртыр ҙа ине, әй тотонған ! булыр ине һорау алырға. Большевиктәрҙе әйтегеҙ, йәнәһе. Ләкин ошаҡларға теләүселәр була һалмай. Шунда сыбыртҡылау башланыр ине.

Бер кисте Верхнеуральск халҡын мәктәп янына йыйҙылар. Гончаренко ла килеп етте. Ул, револьверен тотоп, бүлмә уртаһына сыҡты ла:

— Миңә асығы билдәле. Һеҙҙең арала большевиктәр бар. Улар икәү. Мин уларҙы ҡулға алырға тейеш,— тип револьверенең тәтеһенә баҫты.— Аңлашыла торғандыр?

Уға бер кем бер нәмә әйтмәне.

— Большевиктәрҙе йәшерергә булдығыҙмы? — тип туҙынып киткән булды комендант.

Шунан сал башлы бер ҡарт янына барып баҫты, бабай аяғында саҡ тора, бахыр. Таяғына һалынып ҡына тора.

— Әйт, кем бында большевик? — тип Гончаренко уны һаҡалынан елтерәтте. Бабай саҡ-саҡ тәкмәсеп китмәне.— Йә,— тип Гончаренко уға револьверен терәне.

Шул саҡ халыҡ араһынан Илья Смирнов тигән казак килеп сыҡты. Гончаренко янына бара килеп, револьверен һыпыра тартып алды ла күкрәгенә терәп тороп атты ла йыҡты тегене.

Ҡапыл ботәһе лә тынып ҡалды. Ә Илья халыҡҡа боролоп:

— Дуҫтар, минең бүтәнсә түҙер әмәлем ҡалманы,— тип һикәлтәгә сыҡты ла Гончаренконың атына һикерҙе, һыпыртты ғына.

Тиҙҙән, Илья Ҡыҙыл Армияға ингән, имеш, тигән хәбәр таралды.

## БАТЫРОСКАНТАШ

Революциянан һуң булған был хәл.

Беҙҙең ауылды аҡтар баҫып алған. Улар һорауһыҙ-ниһеҙ малды һуйғандар. Халыҡты талағандар. Аттарына ашатыр һолоһо булмағаны осон генә лә, Сәғит тигән бабайҙы ат ҡойроғона бәйләп, ауыл буйлап һөйрәтеп йөрөтөп туҡмап үлтергәндәр.

Бер кон аҡтар ашығып-ашығып нәмәләрен арбаларына тейәп, кисеү аша Иҙелдең теге яғына сыға башлағандар. Уларҙың ҡайҙа киткәнен бер кем дә белмәгән.

Кис булған. Шул мәлдә ауылға бер һыбайлы килеп ингән. Ул аҡтар тураһында һорашҡан. Ауыл халҡы асылып ҡына һөйләргә ҡурҡҡан. Сонки, «аҡтар», «ҡыҙылдар» тигән һүҙҙәр менән таныш булһалар ҙа, уларҙың айырмаһы күптәргә билдәһеҙ ҡалған. Шулай ҙа, ҡурҡа-ҡурҡа һүҙ башлап, һөйләп биреүселәр табылған. Ауылға ҡыҙылдар етеп килеүен һиҙеп ҡасҡандар икән аҡтар.



Оҙаҡ булмаған был һыбайлы ауылда. Уның ҡайҙан килгәнен белмәгән кеүек, ҡайҙа китеүен дә һиҙмәй ҡалғандар. Тик бер нисә кон үткәс кенә асыҡланған уның ҡайҙалығы. Иҙел аша сығып, аҡтар артынан киткән булған икән. Аҡтарҙың һаны, ҡоралы тураһында мәғлүмәттәр алып ҡайтырға тейеш булған. Егет тегеләрҙең эҙенә төшөп, ниәтенә ирешеп, ҡайтыр яҡҡа боролған. Кире ҡайтҡанында, котмәгәндә тағы бер аҡтар отрядена осраған. Һуңғы патроны боткәнсә атыша егет. Аҡтарҙың күп кенә һалдатын ергә һала. Патрондары боткәс, кинәт алға ташлана. Аҡтарҙың имен ҡалған ос һыбайлыһы уның артынан төшә. Яңғыҙ ҡыҙыл һалдат ҡамауҙа ҡала. Артта аҡтар, ә алда... текә ҡая. Ҡая аҫтында Иҙел.

Дошман ҡулына терелэй бирелергә теләмәгән егет. Ярһып сапҡан атын ул тауҙың иң текә урынына ҡайыра. Шул ҡыҙыулығын юғалтмай, аты менән бергә Иҙелгә оса. Аптырашта ҡалған аҡтар, үҙе башына үҙе етте, уңай булды, тип кире сабалар. Ә ҡыҙылармеец тә, аты ла үлмәй, имен-аман йөҙөп сыға. Егет иптәштәренә барып ҡушыла.

Ауыл халҡы был батырҙың үҙҙәренә килеп киткән һыбайлы икәнен танып ҡалған. Бына шул кондән башлап Үрге Сорғаяз ҡаршыһындағы был тауҙың исеме Батыросканташ булып йөрөй.

## ЕРӘНСӘКӘЙ

Үрген ауылында Ишмай исемле ҡарт йәшәгән. Уның ҡатыны булған, Хәҙисә менән Зәкирә исемле ике ҙур ҡыҙы, уларҙан ҡала Аҡбулат исемле улы, Аҡбулаттан ҡала тағы туғыҙ ҡыҙы булған. Ишмай ҡартҡа ер бик аҙ тейгән. Ни осон тигәндә, элек ер ир затына ғына бирелгән, ҡыҙҙарға, батша законы буйынса, ер бүленмәгән. Шуға күрә ауыр тормоштоң көсөн ҡыҙҙарына төшөрөп, Ишмай ҡарт һәр ваҡыт зарланған: «Ҡоро тамаҡтар, бер киҫәк ергә лә торош түгелһегеҙ»,— тип ҡыҙҙарын тиргәгән.

Ишмай ҡарт үҙе Хисам тигән байҙа эшләгән. Аҡбулат ҙурайыу менән, уны ла Хисам ҡартҡа малайлыҡҡа биргән. Үҙе мал коткән, ә улы байға бесән сапҡан.

Атаһының ярлы тормошон күреп үҫкәнгә, Аҡбулат бик моңло булған. Туғайҙарҙа бесән сабып арыгас, ял иткәндә, бик моңло итеп ҡурай уйнар булған. Атаһы уйнағанда, ҡушылып йырлай торған булған.

Ишмай ҡарттың бөтә байлығы бер бейәнән дә йөнә бер һыйырҙан ғына торған. Урындыҡҡа төшәп йороторлоҡ балаҫы ла булмаған. Аҡбулат атаһынан бейәнең ҡолонон һораған. Атаһы ҡолондо биргән. Аҡбулат уға Ерәнсәкәй тип исем ҡушҡан.

Ерәнсәкәй оҙон яллы, ҡырас арҡалы, ҙур тояҡлы, ҡара күҙле сибәр, тибенеүсән булып үҫеп еткән. Хисам байҙың котоүен коткән саҡта, Аҡбулат уны үҙ янында йороткән. «Исмаһам, йәй коно рәхәтләнеп ҡалайыҡ беҙ икәү»,— тип иркәләгән, ашатҡан, эсергән. Ерәнсәкәй котоүгә бүре килтермәҫ айғыр булып үҫкән: алдына барһа, тешләгән, артынан килһә, типкән. Һәр ваҡытта ла котоүҙе һаҡ-

лап килгән. Аҡбулат ял итергә ятҡан саҡта, берәй хәл тыуһа, ер тырнап, уны уятып, үҙе йылҡыларҙы өйөрә торған булған.

Ишмай ҡарт бик ҡартайып киткән. Улын үҙ янына саҡырып алып васыят әйткән: «Мин тиҙҙән үлермен. Бәлки ошо яланда, бәлки үҙ түшәгемдә. Уныһын алла белә. Һин минән ҡалаһың. Һинә ошо ялан-ға яңғыҙ йәки икенсе берәй ҡарт менән иптәшләнеп йөрөргә тура килер. Һин минең берҙән-бер улым булдың. Нәҫелемдең тамыры булып ҡалаһың. Ишет, улым, һинә атайың кеүек ауыр тормошта йәшәргә тура килер. Бөтә ерҙә лә батыр бул, дошманға бирешмәҫлек булып үҫ»,— тигән. Күп йәшәмәгән, ҡарт үлеп киткән.

Хисам ҡарт Аҡбулатҡа бер ниндәй рәхимлек күрһәтмәгән, ас йөрөткән ваҡыттары күп булған.

Граждандар һуғышы башланыу менән, Аҡбулат, үҙ атына атланып, әсәһе, апалары менән хушлашҡан да өйҙән сығып киткән. Партизандарға ҡушылып, бер ни тиклем урманда партизан булып йөрөй, аҡтарға ҡаршы көрәшә. Улар үҙ араларынан Хәйрулла исемле башҡорт егетен үҙҙәренең командиры итеп һайлап ҡуялар.

Ҡыҙылдар Ҡыяюл исемле тауҙа, ә аҡтар Сусаҡ[1] исемле тауҙа ятҡандар, ҡапма-ҡаршы атышҡандар. Хәйрулланы аҡтар үлтергән. Уны тау итәгенә күмеп киткәндәр. Иптәштәре Аҡбулатты командир итеп һайлағандар. Аҡбулат бөтә көсө, намыҫы менән хеҙмәт иткән. Ул ҡыйыу батыр булған, ҡурҡыу белмәгән, Ерәнсәкәйе менән дошманға уҡ кеүек уҡталған. Аты Аҡбулатты дошмандар ҡулынан бер нисә тапҡыр ҡотҡарып алып ҡалған.

Аҡбулат Ерәнсәкәйен яратып, йыр сығарған:

Ерәнсәкәй атым, ай, елеүҫ,
Ҡыйбыланан иҫкән ел кеүек.
Ерәнсәкәй яуға алып барҙы,
Бер туҡтауһыҙ янған ут кеүек.
Ялбыр-ялбыр ғына Ерәнсәкәй
Осоп та ғына менә тауҙарға.
Ҡурҡыу ҙа ғына белмәй Ерәнсәкәй
Алып та керә мине яуҙарға.

Ерәнсәкәйҙе Аҡбулаттың иптәштәре лә маҡтағандар. Уның тураһындағы йырҙы ла оҡшатҡандар. Улар Аҡбулатты ҡабат-ҡабат йырлатыр булғандар.

...Ҡыҙылдар күмәкләп походҡа сығып китәләр. Был Ерәнсәкәйҙең һуңғы походы була. Ул ошо походтан әйләнеп ҡайта алмай, үлеп ҡала.

Былай була ул хәл: аҡтар көтмәгәндә һөжүм итәләр. Атыш башлана, һуғыш китә. Аҡбулат яралана, ләкин ятып ҡалырға теләмәй. Был мәл аҡтар күмәкләшеп, шул яҡҡа ҡарап саба башлайҙар. Ерәнсәкәй быны һиҙә. Дошманға ҡаршы ул үҙе сабып китә. Быны күреп, ҡыҙыл һалдаттар ҙа дошманға ташланалар. Аҡтар кире боролоп ҡаса башлайҙар.

Ерәнсәкәй аҡтарҙы ҡыуып етә. Ҡыҙыулыҡ менән, бер ярҙан һикереп сығам тигәндә генә, йырынға ауа. Ерәнсәкәй ҙә үлә, Аҡбулат та. Уларҙы шундағы тау башына күмәләр. Аҡбулаттың баш осона ҡыҙыл йондоҙ ҡағып ҡуялар.



## АННАОСҠАНТАУ

Был хәл элек булған. Ауылда Совет власы урынлашҡан, ҡыҙыл милиция отряды төҙөлгән. Ул бөтәһе ете кешенән торған. Шул етәү араһында Анна исемле бер рус ҡыҙы ла булған. Йәйге бер матур көндө ауылға аҡ бандалар баҫып инә. Ауыл эсендә улар менән ҡаты һуғыш башлана. Ҡыҙыл милицияларҙың бандаға ҡаршы торор көстәре булмай. Етмәһә, күптәре бәрелештә сафтан сыға. Уларға сигенергә, йәһәт кенә ауылдан сығырға кәрәк була. Сигенә башлағас та, волость башлығы Ильяс Мәмбәтовты атып үлтерәләр. Шул ваҡыт Анна атына менә лә атылып ауылдан сыға. Уны күреп ҡалып, артынан төшәләр. Оҙаҡ ҡына еткермәй барғандан һуң, Анна бер бейек тауға барып сыға. Алда юл бөтә, артта — дошман. Анна аптырап ҡалмай, дошман ҡулына эләкмәҫ өсөн, атын бар көсөнә ҡыуа ла таш һымаҡ аҫҡа ташлана. Шулай һәләк була батыр ҡыҙ.

Шуға күрә был тауҙы Аннаосҡантау тип атайҙар.

## БИЛДӘҺЕҘ ҠЫҘЫЛАРМЕЕЦ

Уны Верхнеуральск өйәҙе Красинск ауылында тоталар. Ул йәшеренмәй, асыҡтан-асыҡ еңел кәшовкала килгән була. Егерме йәштәрҙәге һомғол егет ине. 19-сы йылда беҙҙең тирәлә бөтә үткенселәрҙе лә тоторҙар ине, тикшерерҙәр ине. Быны ла, тотоп алғас, штабҡа илттеләр. Тентеү шикләнерлек бер ни ҙә бирмәне.

Санаһын тикшерә башланылар. Сана ике төплө булып сыҡты. Ике арала ҡағыҙ төргәктәре ине. Һалдаттар ҡағыҙҙы тағатып уҡыһалар, унда: «Казаҡтар һәм һалдаттар, үҙегеҙҙең туғандарығыҙға ҡаршы һуғышмағыҙ! Ҡоралдарығыҙҙы алығыҙ ҙа беҙҙең яҡҡа сығығыҙ!» — тип яҙылғайны. Офицер борола килеп, һалдаттарҙан ҡағыҙҙы тартып алды.

Эңерҙә штабтан сығарғанда, егетте танырлыҡ түгел ине: өҫтөндә бер ҡат күлдәк-ыштан ғына, башы-күҙе ҡанға батып шешкәйне, ҡулдары артҡа шаҡарып бәйләнгәйне.

Иртәгеһен уны ауыл аша зыяратҡа алып киттеләр. Ауыл халҡын да шунда ҡыуып килтерҙеләр. Көн хәтәр һалҡын ине. Ҡыҙылармеецте күлдәк-ыштандан ғына күргәс, халыҡ илаша башланы. Кешеләр илаша, ә егет уларға:

— Минең хаҡта беҙҙекеләргә әйтерһегеҙ. Улар тиҙҙән бында буласаҡтар. Антын боҙманы, тиерһегеҙ! — тине. Егеттең һуңғы һүҙҙәре залп тауышында күмелеп ҡалды.

## ҠЫҘЫЛДАР МЕНӘН БЕРГӘ

### Беҙ — ҡыҙыл башҡорт ғәскәре

1919 йылдың майы[1]. Беҙ Кинель станцияһынан Украинаға ҡарап юл алдыҡ. Харьков эргәһендә Деникингә ҡаршы һуғышҡа индек. Унда ғәскәр осрамай, гел бандиттар һымаҡ йәшеренеп һуғыша-

лар, имеш. Ботәһе лә`áктар яклы кеүек. Йорттарына инһәң, йәшеләр бөтәләр. Юл һораһаң, әйтмәйҙәр. Станцияға төшһәк, станцияла, баҙарға сыкһак, баҙарҙа, беҙҙе күреп калалар ҙа, һатыр нәмәләрен һатмай, ташлай-ташлай касалар.

— Ниңә касаһығыҙ беҙҙән? — тип һораһак:

— Илгә башкорт ғәскәре ябырылды. «Башкорттар кеше ашай» тигәйнеләр. Шуға касабыҙ,— тиҙәр.

— Беҙ ниңә улай булайык, ти? Һеҙҙе куркытыр өсөн, дошмандар, һатлыктар тараткан ул хәбәрҙе. Беҙҙе Ленин үҙе ебәрҙе. «Ярҙам итегеҙ украин халкына», тип әйтте. Ә һеҙ касаһығыҙ,— тип тегеләрҙе кире урындарына ултыртып, һатыр нәмәләренән үҙебеҙгә кәрәкте һатып ала торғайнык.

Харьковты сыкканса, пулемет менән сыктык. Палтауға барып, фронт тотоп яттык. Палтау ерендә бер станцияла торҙок. Унда гел йәһүттәр ине. Улар беҙҙе бик ярата торғайнылар. Мин үҙемдең иптәштәр менән калас, булка бешереп сауҙа итеүсе бер йәһүттә торғайным. Кыҙы бик матур ине. Үҙебеҙҙең башкорт кыҙы кеүек кара кашлы, кара күҙле, кара сәсле. Бик итәғәтле. «Кал. Ошо кыҙым менән донъя көтәрһең»,— тип өгөтләй торғайны карт.

Кайҙа инде ул сакта кәләш тураһында уйлау. Тирә-яктан «йәшелдәр» тынғы бирмәй. Беҙгә деникинселәр менән дә һуғышырға тура килде. «Йәшелдәр»е лә, деникинселәре лә торғаны бандиттәр ине. Бик ауыр булды. Көнөн дә, төнөн дә тик тороу булманы. Үлем эргәлә генә йөрөнө. Шундай мәхшәр вакытында бер мәлдә мине Палтау калаһына аҙык алырға ебәрҙеләр. Кул аҫтыма өс һалдат та бирҙеләр. Китеп барабыҙ. Куркыныс. Бандиттәр тегенән дә, бынан да килеп сығырҙар йә засада ойошторорҙар кеүек. Бер ауылға барып индек. Бер кем юк. Йәшенеп ятып, атһа ата ла куя инде. Әжәл етмәгәс, имен калдык.

Аҙык-түлек тейәп кайтып килә ятһак, тегеләрҙең самолеты килә (бер самолеттары ла була торғайны). Һиптереп килә. Аҫтан оса бит әле, етмәһә, кәһәр төшкөрө. Атты юлдан кайырҙык та үҙебеҙ канауға боҫтоk. Үтте. Был юлы ла имен котолоноldo.

Гоголевка станцияһында «йәшелдәрҙең» 600 бандитен тоттоk.

— Һеҙ кайҙан? Һеҙ ниндәй кешеләр? Беҙҙе еңгәндәре юк ине әле,— тип аптырашa тегеләр.

— Белегеҙ: беҙ — Кыҙыл башкорт ғәскәрҙәре! — тип кенә ебәрәбеҙ.

Тегеләрҙең төргәктәренән күп төрлө корал, мылтык, киҫелгән берданкалар сыкты. Киҫелгән мылтыктарынан атып карағайным, йыраkка баралмай икән. Уларҙы ла, үҙҙәрен дә штабка оҙаттык.

## Петроградты һаклағанда

Харьковта эште бөтөргәс, ике көн станцияла яттык. Һалдаттар араһында:

— Петроградка ебәрәләр, имеш.

— Стәрлегә кайтаралар, имеш,— тип һөйләнеүҙәр, имеш-мимештәр китте.

Сентябрҙә буғай Петроградка китергә тигән бойороk булды. Стәрлеңән өҫтәмә көс килде. Кыҙыл башкорт ғәскәре тулыланды. Тик тегеләрҙең өҫтәренә кейҙерерлек хәрби кейем юк ине. Үҙебеҙҙең запастарҙан кейем тегеп кейҙерҙек. Ауыр замандар ине шул. Өҫтә лә иҫке-моҫко, аякка ла етешмәй ине. Комиссарҙар, командирҙар йыш кына: «Бойокмай йөрөгөҙ. Әпәйҙе түшкә терәп телер сак килер әле ул. Шунда кара-каршы ултырып сәй эсербеҙ, ыҙалар онотолор»,— ти торғайнылар.

Ул сакта Петроградка каршы Юденич һуғыша ине. Самолеттары көн дә кала өҫтөнән оса. Һуғыш бик кыҙыу бара. Царское село, Детское село тигән ерҙәргә әллә ни тиклем һалдат китә, юк булып тик тора. Беҙ Фин вокзалында инек. Балтик вокзалы аша һуғышка барып индек. Баш осонда йәнә самолеттар. Ерҙә — яман ҙур танкылар. Шунда беҙҙең якташ, Үтән ауылынан Ғәйнетдинов Йомағужа, менән икәү актарҙың тауҙай бер танкыһын шартлаттык. Шунан пулеметын ыскындырып алдык та дошманға ата башланык. Бик сая һуғышты башкорт егеттәре. Беҙ фронтка ингәс, Юденич сигенмәк менән булды. Тегенең ғәскәрен кыйратып, калған-боҫканын сиккә еткәнсә kыуып, кире Петроградка килдек. Шунда бер иптәш балкондан тороп доклад һөйләне. Беҙ хәҙер мирауай революцияға тырышабыҙ. Беҙ тағы ла ныгырак берләшергә тейешбеҙ. Капиталистәрҙе тамырынан юк итергә тейешбеҙ.Юденичкә каршы сая һуғыштығыҙ. Һәр урында ла шулай ғәйәр булығыҙ, тип, беҙгә ул кеше рәхмәт әйтте. Һөйләгән кешене Ленин булған, имеш, тинеләр. Булһа булғандыр, бигерәк дөрөҫто һөйләне.

Кала халкы, беҙ кайтканда, ни нәмәһе бар, беҙгә бүләк итте. Үҙҙәре ас, үҙҙәре яланғас ине, ә беҙҙе кейем, ашау-эсеү менән бүләкләнеләр. Йомағужаға күн пинжәк бирҙеләр.

— Һай, Таһир тиңдәш,— тир ине аҙак осрашкан һайын Йомағужа,— хәҙер булһа, Советтәр Союзы Геройы тигән исем бирерҙәр ине бит беҙҙең эштәр өсөн.

Шулай инде. Заманаһына күрә күн пинжәк тә ҙур бүләк ине... Эш бүләктәме ни?

## АЙҒЫРАТКАНЪЕР

Анауында, ауылға ниндәй әлек, күп булһа, өс сакрым булыр, шунда Айғыраткан тигән ер бар. Былай уның тарихе. Беҙҙең ауыл ике бер туған Ғөбәй менән Зөбәй мал бүлешә икән. Мал бүлешә, тип инде, Ғөбәйе, йәше, кыҙылдарға яҙылырға итә икән, Зөбәйе менеп китергә айғырын бирмәҫкә итә икән.Талашып арығандар ҙа, әҙерәк тынысланып, өйгә ингәндәр. Әллә ни арала Зөбәй тып итеп тышка сыккан. Ғөбәй бынан шикләнгән дә сығып караған. Ни күрһен, Зөбәй айғырҙы менгән дә оса ғына, ти. Ни эшләргә? Ғөбәй күп уйлап тормай, урамда берәүҙең атын һорап менә лә куыа сыға ағаһын. Ошо тау итәгенә еткәндә генә, Зөбәйҙең айғыры һөрөнөп йығыла.

Шул арала Ғөбәй якынлашып та өлгөрә. Ағаһы айғырҙы менеүе була, Ғөбәй:

— Тукта, котоп тор, атам котмәһәң! — тип кыскырып ебәреүе була, мылтыкты кайҙан эләктергәндер инде, әнеһе яғына ата ла ебәрә Зөбәй. Ғобәйҙең колак эргәһенән һыҙғырып үтә пуля. Ғөбәйҙең асыуы кабара. Әйләнә киләй, ул да ата. Ағаһы тәкмәслән барып йығыла. Әнеһе килеп еткәндә, Зөбәй атының башын косаклап илап ултыра, ти.

— Әйҙә, ағай, кайттык,— ти әнеһе тыныс кына.— Беҙҙе талаштырыр нәмә юк инде хәҙер. Айғыр һиңә лә түгел, миңә лә түгел.

Улар ауылға кайтып китәләр. Аҙак партизан булып киткәндә, Ғобәй әйтә икән:

— Айғыр ни табылыр ул. Бына бәхет тигән нәмә табылмаҫ, шулай үҙ-ара талашһаң. Әйҙә, ағай, минең менән.

Зөбәй уйлап-уйлап торған да:

— Һинеке дөрөҫ, Ғөбәй, ике ыласын талашһа, төлкөгә ем була, ти. Үҙ-ара талашмай, төлкөнөң үҙен йолкайык,— тигән. Ике ағай шулай килешеп, партизан булып китә. Ә теге айғыр атылған ер шул вакыттан алып Айғыратканъер булып калған.

## КАРАУЫЛТАШ, ПАРТИЗАНДАР ТАШЫ

Салауат районының Ахун ауылы янындағы Каратау башында бер таш тора. Бүгәсәү менән Салауат яуы барған мәлдә унда баш күтәреүселәр карауылы торған булған. Шуға уға Карауылташ тип исем биргән булғандар.

Граждандар һуғышы сығып киткәс, шул таш эргәһендә кыҙыл партизандар пикеттә* торған. Шунда актар менән улар араһында бик каты һуғыш була. Был һуғышта партизандарҙың бөтәһе лә тиерлек кырылған. Актар кыуылғас, ауыл халкы уларҙы әлеге таш эргәһенә хөрмәтләп куйған. Шунан башлап карауылташты Партизандар ташы тип тә йөрөтә башлағандар.

## КАРАУЫЛТАУ

Сокор эсендә урынлашкан бер башкорт ауылынан ике-өс сакрым ситтәрәк ҙур бер тау күгәреп ята. Карауылтау тиҙәр уны. Был тау әлек бейек булған. Тау араһында бөркөттәр йәшәгән. Ыласындар оялаған. Аҫта мәғәрә * булған. Ул әле лә бар, тик ауыҙы ғына капланған. Әлекке башкорттар бер ауылдан икенсе ауылға йөрөү өсөн мәмерйә эсенән тау аҫты юлы һалғандар. Карауыл мәмерйәһенән кереп китеп Ташбаш тигән ауылға барып сыға торған булғандар. Тауҙың Карауылтау тип аталыуы бик борондо вакиғаға бәйле. Салауат болаһынан калған исем булырға тейеш, тип һөйләй торғайнылар. Был тау башынан бөтә тирә-як һәйбәт күренә, хатта әлләкайҙа яткан Стәрле калаһы, Шахтау, Йөрәктауҙар ҙа асык күренә. Стәрлегә килгәндә, Салауаттар беҙҙең ауыл аша үткәндәр, байҙар шул тауға киткәндәр, ярлылар Салауатка кушылғандар. Байҙар ошо тауҙан бөтәһен дә күҙәтеп ятыр булғандар. Бына ошонан Карауыллап ятыу тауы тигән исем килеп сыккан, тиҙәр. Уны аҙак Карауылтау тип кенә калдырғандар, имеш.

Тауҙың исемен икенсе төрлө лә аңлаталар. Ул былай була. Граждандар һуғышы бара. Актар, уларға кушылған байҙар, төрлө бандалар Аккүл тигән станцияны баҫып алғандар. Ауыл кешеләре һунар мылтығы менән коралланып вакиғаны ошо тауҙан күҙәтеп ятканлар. Һунар мылтыктары менән әллә ни эш кыйратып булмаһа ла, дошманды кабат ауылға индермәҫкә шулай карауылда ятканлар. Кыҙылдарҙан ҙур көс килерен дә шул тау башында ятып котор булғандар. Икеме, өсмө көн үткәс, көс килгән. Ауыл халкы уға кушылған да, актарҙы бергәләп кыуып киткәндәр.

Тауҙың Карауылтау тип йөрөтөлөүен шулай тип тә аңлата торғайнылар.

## ХУЖАБИКӘНЕҢ ФАТИХАҺЫ

Шулай бер ауылда дүрт-биш һалдат бер фатиргә төштөк. Сәй эсергә ултырҙык. Бер вакыт хужабикә булған әбей беҙҙең янға килде лә:

— Был аңкы-тиңке касан баҫылыр? — тине.

— Ак бандаларҙы еңмәй тороп, бөтмәҫ әле,— тибеҙ.

— Ул еңеүегеҙ касан булыр һуң ул?

Әбей мәсьәләне кып-кырын килтереп куйҙы.

— Һуғышмағыҙ, баҫылығыҙ ҙа куйығыҙсы. Үҙегеҙ ҙә йонсоп бөткәнһегеҙ. Ғаиләләрегеҙ ҙә көтәлер,— тине. Ә үҙе, беҙ китер булғас, ике мылтык, ике кылыс килтереп һондо:

— Алығыҙ, беҙҙең өйгә бының кеүек нәмә бүтәнсә инмәһен,— тине. Төпкө өйҙә ауырып яткан улы:

— Әсәй, килешмәгәнде, куй, кыланма,— тип ғыжылданы. Тормакҫы ла итеп караны.

— Ят,— тине әсәһе,— мин әсәме, юкмы?

Беҙ мылтык менән кылыстарҙы алып сығып киттек. Ул көндө беҙ был ауылдан сигенгәйнек. Ике көндән уны яңынан алдык. Фатиргә тағы әлеге әбейгә төштөк. Был юлы ул өндәшмәй генә сәй куйҙы.

— Улың төҙәләме? — тип һораныҡ унан.

— Төҙәлә,— тине лә әбей, капыл шымып калды. Туҙған ак сәстәрен яулығы аҫтына кыҫтырҙы. Теге сакта сәсе кара кеүек ине. Әле ак сәсен күргәс, аптырап киттек. Сәй янына ултырғаҫ кына, телгә килде әбей.

— Блен алаһығыҙмы? Алһағыҙ, үлтерәһегеҙме? — тип һорап куйҙы.

— Юк, үлтермәйбеҙ.

Әбей тороп китеп, келәтенең келәһендәге йоҙакты алды ла, ишеген кайырып:

— Бына һеҙгә блендәр. Теләһәгеҙ ниһләтегеҙ. Һеҙҙең ҙыянығыҙ теймәне, ә быларҙыкы тейҙе. Ике улымды шулар үлтерҙе.

Беҙ шунда ғына әбейҙең сәсе шул ике арала ниңә ап-аҡ булыуын аңланыҡ. Сәй ҡайғыһы китте. Командирҙе килтерҙек тә аҡтарҙың келәткә йәшеренгән егерме дүрт һалдатын ҡулға алдыҡ...

Кисен аҡтар артынан киткәндә, аҡ сәсле әбей менән, үҙ әсәйебеҙҙәй күреп, хушлаштыҡ. Ул беҙгә фатихаһын биреп ҡалды.

## ДОШМАН ҺҮҘЕ

1918 йыл булырға кәрәк. Сәсәктау [1] башында ҡыҙылдар атты, ауылда — аҡтар.

Ауылда хәбәр таралды, йәнәһе, ҡыҙылдар ялмауыҙ keүек ерҙе ялмап, ҡоротоп килә, берәүҙе лә ҡалдырмай, ҡыуып килә. Уныһын әле күргән юҡ, мәгәр аҡтар ҡорота ине. Малмы ул, игенме ул, умартамы ул — һыпырып алып киттеләр.

Әй аша борам бар ине. Ҡыҙылдар ҡыҫмаҡҡа ала башлағайны, еңелмәйбеҙ, тигән аҡтар борам аша Әй арьяғына һыпыртты. Үҙҙәре сығып бөткәс, арҡанды өҙөп, борамды ағыҙып киттеләр. Ҡыҙылдар уға ҡарап аптырап ҡалманылар. Шарт та шорт ата-ата килделәр ҙә арҡанды, нисектер, ялғай һалып, арьяҡҡа сыҡтылар. Аҡтар атышып ҡаранылар — булдыра алманылар, ҡастылар.

Атыш ваҡытында беҙ, бала-сағалар, ҡарбаҙҙа боҫоп ята торғайныҡ. Аҡтар киткәс, сыҡтыҡ. Ялмағаи да юҡ, ҡырған кеше лә юҡ. Теге һүҙ төптә дошман һүҙе булып сыҡты.

## АТЛАС ЮРҒАН

Партизанлыҡ итеп йөрөй торғас, бер ауылға килеп сыҡтыҡ. Бик йонсоткан, арыткан, асығылған. Халыҡ та насар ҡаршы алды. Баҡһаң, аҡтар бик ҡурҡытҡан икән тегеләрҙе. Митинг үткәреп, халыҡты ойоштороп, йомшартып алайыҡ тиһәк, бер ап-аҡ һаҡаллы ҡарт беҙҙең эскадрон командирен эҙләй. Күрһәттек тегеңә. Был әйтә:

— Аҡтар ауылды талап бик ҙур ылау менән китте. Шуларҙы ҡыуа сығырға кәрәк,— ти. Арыһаҡ та, ылау, тигәс, беҙҙең күҙҙәр янып китте.

— Барайыҡ,— тибеҙ.

— Арығанһығыҙ, асыҡҡанһығыҙ,— ти комәск *.

— Ылауҙы ҡулға төшөрһәк, улары ғына бөтөр,— тибеҙ.

— Тура юлдан апарам,— ти ҡарт,— тик бик һаҙлыҡ. Иллә сығырға кәрәк,— ти,— аҡтар урауҙан китте,— ти,— уларҙың алдына сығып ҡына торасаҡбыҙ,— ти.

Риза булды командир. Киттек. Өмөтләнеп торған ауыл халҡы бик күңелһеҙ ҡалды. «Беҙ шунда киттек»,— тип әйтеп булмай бит инде. Бата-сума сыҡтыҡ урмандағы һаҙлыҡты. Оло юл буйлап ике яҡлап позиция алдыҡ та көтәбеҙ. Бына бер ваҡыт алда бер сотня күренде, унан, әллә утыҙлап ылау таланған әйбер. Ҡарт ярһып кит-



те, меңгән атын да ярһыта, тегене саҡ тыйҙыҡ. Обоз артынан бер взвод килә. Артта пулеметлы тачанка. Их, бер заман бирҙек кәрәктәрен. Түҙ генә. Беҙҙең ҡарт күсәк күтәреп, геү ғәләмәт килеп йөрөй. Ылауҙың береһенә барған да был күсәк менән бирә генә бит берәүгә. Тукмалыусыны аңғарыр хәл юҡ. Аҡтарҙы туҙҙырғас ҡына белдек. Баҡһаҡ, бер офицер, имеш. Ботонлой рәте киткән тегенең. Саҡ тыйып ҡалдыҡ бит ҡартты. Ҡыҙған да киткән. Шунан ҡайҙандыр септә алды ла офицерға ырғытты.

— Ябын, хәшәрәт! Атлас юрған кәрәк икән быныуыға. Бирермен мин килепемдең затлы бирнәһен!

Баҡһаң, офицер юлда ябынып ултырырға тип ҡарттарҙан оло юрғанды талап алып сыҡкан булған икән. Ҡарт рәте киткән офицерға туҙған септе япты ла, минең әш бөттө тигәндәй, комэскадронға китте.

— Ҡайтып китергә рөхсәт итегеҙ.

Командир көләмһерәй:

— Бурысыңды үтәнең бит. Ярай инде, ҡайт. Һаҡла бынан һуң атлас юрғаныңды,— ти. Ҡарт та көлдө.

— Һаҡлармын, командир туған,— ти.— Ул бит килен бирнәһе — буласаҡ гаиләнең тәүге ярағы. Уны туҙҙырһаң, гаиләлә бәхет тә, бер нәмә лә булмай,— ти.

Шунан беҙ ылауҙарҙы борҙоҡ та, әлеге ауылға кире барып, халыҡтың әйберен тараттыҡ. Ылауҙан тағы бер юрған сыҡты. Эйәһе юҡ. Ҡартҡа бирергә иткәйнек, яҡын да килмәй.

— Таланған әйберҙең ҡуры юҡ. Берәү рәнйеп яталыр,— тине. Халыҡ беҙҙе бик яҡшы ҡунаҡ итеп оҙатып ҡалды.

## ҺӘЙБӘТ КЕШЕЛӘР

Ҡыҙылдар менән аҡтар атышҡан саҡта, Таймый ауылында бер ҡарсыҡтың һыйырына пуля тейгән.

— Яңғыҙ ғына һыйырымды әрәм иттеләр,— тип ҡарсыҡ илаулап йөрөй, ти. Ҡыҙылдарҙың командире ишетеп ҡалған да:

— Мә, һыйыр һатып ал,— тип, быға күп итеп аҡса тотторол киткән.

Ҡыуанған, аптыраған ҡарсыҡ. Аптырамаҫлыҡ түгел дә шул. Ҡыҙылдар килмәҫ элек: «Ҡыҙылдар талап һуйып, үлтереп китәләр. Ҡыҙылдар динһеҙ. Ҡыҙылдар аяуһыҙ» тигән хәбәр таралған була.

Әлеге командирҙең аҡсалы сумкаһы ҡарсыҡтарҙа онотолоп ҡала. Күреп ҡалған да ҡарсыҡ, баҫыу ҡапҡаһынан сыҡҡан саҡтарында ғына, ҡыҙылдарҙы ҡыуып етеп, сумкаһы командирға тапшырған. Командир уға йәнә аҡса биргән.

Ҡарсыҡ шул аҡсаларға һыйыр һатып алған. Аҙаҡ:

— Бик һәйбәт кешеләр икән ҡыҙылдар,— тип маҡтап һөйләп йөрөр булған.